ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

15-21 октябрь (карасай) 2016

№42 (720)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Һуңғы көн үкенестәре



3

Ҡаның ниңә таҙа, юрматы?



7

Халҡыбыҙ фольклоры менән...



сит ил тамашасыларын да яулайбыҙ 8-9,11

Ғәжәп ата ҡаҙҙар



12-13

ТВ-программа 14

**ИҒТИБАР! 13 октябрҙән 23 октябргә тиклем арзан хаҡҡа 2017 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылыу ун көнлөгө иғлан ителә. Ошо арауыҡта ВО665 индекслы гәзитебеҙгә - 450 һум 06 тингә, ВО673 индекслыһына (предприятиелар һәм ойошмалар өсөн) - 478 һум 56 тингә, Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм инвалидтары 410 һум 22 тингә яҙыла ала (мәғлүмәттең дауамы 2-се биттә).**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Өс балалыларҙы күп балалы ғаилә тип нарыҡланылар. Илдә халыҡ һаны миллионлап кәмегәндә, бындай сикләү зыянға ғына булмаҫмы?

***Нурмөхәмәт хәҙрәт НИҒМӘТУЛЛИН, Башҡортостан мосолмандарының Диниә назараты рәйесе:*** Аллаһы Тәғәлә донъяға ике енесте яратҡан, ләкин икеһен ике төрлө сифаттар менән бүләкләгән. Ир-егетте көслө иткән, ҡатын-ҡыҙға йомшаҡлыҡ, наҙ биргән. Уға йәнә лә бөйөк вазифа башҡарыу - әсә булыу бурысын йөкмәткән. Балалар ана шул ике енестең бер-береһенә ҡарата никах менән дәлилләнгән һөйөү, мөхәббәт емеше булып яҡты донъяға килә. Уларҙы башҡаса бер ҡайҙан да табып булмай, аҡсаға ла һатып алыу мөмкин түгел. Буласаҡ сабыйҙың енесен дә ата-әсә үҙ теләге менән билдәләй алмай. Бала - Аллаһы Тәғәлә бүләге ул. Шуға күрә, Ул күпме насип итһә, шул ҡәҙәрем бала донъяға килергә тейешле. Бала күп булған һайын, ғаиләлә бәрәкәткә, изгелек ғәмәлдәренә лә юл асылып ҡына тора. Икәү, өсәү менән сикләнеү - Аллаһының ниғмәттәренә, ихтыярына юлды ябыу бит ул. Күмәк ғаиләнең ризығы ла күп була, иншалла: һәр сабый донъяға үҙ ризығы менән тыуа. Бары тик уларға күркәм тәрбиә биреп, иманлы, сәләмәт рухлы, йәмғиәтебеҙ өсөн файҙалы шәхестәр итеп үҫтереү - ата-әсәнең төп бурысы булып ҡала.

***Әминә АСЫЛҒУЖИНА, 4 бала әсәһе, Күгәрсен районы "Аҙинәйҙәр коро" етәксеһе:*** Ысынлап та, сикләү кәрәкмәҫ ине, юғиһә, шул һанға тултырам да ташламалар менән файҙаланасаҡмын, аҡсаһы булыр, тип тырышҡан ҡатындар ҙа юҡ түгел бит. Дөрөҫөн әйткәндә, аҡса өсөн таба булып сыға бит инде улар. Бындай ниәт төптө дөрөҫ түгел, халыҡ аҡылы һалынған әхлаҡ нигеҙҙәре лә, динебеҙ ҙә ундай ҡараште маҡтамай. Тыуасаҡ сабыйындан иң элек файҙа көҫәү - үҙе иманһыҙлыҡ бит ул. Халҡыбыҙҙың алтын аҡылында, һәр сабый был донъяға үҙ ризығы менән тыуа, тигән бик тапҡыр һынамыш бар. Хоҙай бала бирә икән, тимәк, уның артынан ниғмәттәрен дә бирер, иншалла. Бер ыңғайҙан шуныһын да әйтәйем: Хоҙай насип иткән сабыйҙың ул әсә ҡарынында яралыу менән үк ғүмерен киҫеү - бигерәк тә оло гонаһ. Бындай уйланмаған аҙымы өсөн ҡатын кеше ғүмере буйы был донъяла ла, гүрҙә лә ғазап кисерәсәк.

Ни өсөн һуң күптәр ике-өс бала менән сикләнә, тигән һорауығыҙға мин, ҡатын-ҡыҙҙа ҡурҡыу хисе өҫтөнлөк итәлер, тип уйлайым. Баланың киләсәге өсөн, илдәге тотороҡһоҙлоҡ касафаттарынан ҡурҡа булыр кеше. Шуға ла мин, ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ телевидениенан алып барылған тапшырыуҙарҙы, ҡурҡыныс фильмдарҙы ҡарамаһын, насар мәғлүмәттәрҙе бик ҡолаҡҡа элеп бармаһын ине, тием. Үҙҙәрен позитивҡа көйләһендәр, Аллаһҡа һығынып, унан шәфҡәт һорап, ғаиләһен, тормош юлдашын ышанысны һаҡ итеп, ошо мөхиткә һыйынып, уны тыныс, йәнгә йәннәттәй нығытмаға әүерелдерһен. Шул саҡ буласаҡ әсә бер нәмәнән ҡурҡмайынса, сабыйҙарына ғүмер бүләк итеп, улар ҡыуаныһы менән генә йәшәйәсәк.

**(Дауамы 2-се биттә).**

АФАРИН!

# БЕҘ ҺЫНАТМАЙБЫҘ!

**Баш ҡалабыҙ Өфө 2015 йыл һөҙөмтәләре буйынса "Рәсәйҙең иң төҙөк ҡалаһы (ауылы)" Бөтә Рәсәй конкурсында беренсе категорияға ингән субъекттар араһында Хабаровск менән бер рәттән икенсе урын яуланы. Беренселектә - Ставрополь, өсөнсө урын - Красноярскиҙа.**



Конкурс йыл һайын алты категорияла уҙғарыла. Призлы урындар алған муниципаль берәмектәргә РФ Хөкүмәтенең дипломдары тапшырыла. Был бәйге урындағы үҙидара органдарының торлаҡ-коммуналь хужалыҡты үҫтереү һәм территорияларҙы төҙөкләндереү мәсьәләләрендәге әүҙемлеген хуплауға йүнәлтелгән. Беренсе категорияға илдең иң ҙур, халҡы миллиондан ашҡан ҡалалары инә һәм, тәбиғи, төҙөкләндереү, инфраструктураны үҫтереү, йәшәү өсөн уңайлы шарттар булдырыу өлкәһендә иң юғары талаптар ҡуйыла. Еңеүселәрҙе һайлағанда уларҙың Торлаҡ-коммуналь хужалығын үҫтереүгә һәм төҙөкләндереү кимәлен күтәреүгә бүленгән урындағы бюджет аҡсаһын һөҙөмтәле файҙаланыуы, территорияны йәшелләндереүгә, урам-юл селтәре торошон яҡшыртыуға, биләмәнең санитар-эпидемиологик торошона, торлаҡ төҙөү күләменә, авария фондындағы торлаҡты һүтеүгә, яңы прогрессив технологиялар ҡулланыуға һәм ҡарарҙар ҡабул итеүгә, халыҡты транспорт менән тәьмин итеү торошона, хәрәкәт итеү мөмкинлеге сикләнгән категория өсөн уңайлы мөхит булдырыуға, дәүләт-шәхси партнерлығын үҫтереүгә, халыҡҡа күрһәтелгән хеҙмәттең сифатын күтәреүгә һ.б. иғтибар бирелә. Быйыл баһалау критерийҙары исемлегенә "Рекреацион тәғәйенләнештәге территорияларҙа төҙөкләндереү" блогы ла индерелгән. Уның буйынса, ял зоналары, парктар, бульварҙар, скверҙар булыу-булмауы, шулай уҡ бәләкәй архитектура формалары ла иҫәпкә алына. Иң ҡәтғи категорияла икенсе урын алыуы - Өфөнөң төҙөкләндереү өлкәһендәге эшмәкәрлегенә һәм халыҡҡа йәшәү өсөн уңайлы мөхит булдырылыуына юғары баһа ул.

**(Дауамы 4-се биттә).**

12+

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Белеүегеҙсә, гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакциябыҙға ебәргән уҡыусыларыбыҙ даими рәүештә беҙҙең бүләктәргә лайыҡ була килә. Июлдән сентябргә тиклем 2017 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙән:**

Баймаҡ районы Ярат ауылынан Нәжип Дәүләтбирҙин, Белорет районы Ботай ауылынан Разия Ирғәлина, Октябрьский ҡалаһынан Әхмәҙулла Хасаев - **Флүр Ғәлимовтың "Аҙғын тәүбәһе" китабы**;

Өфө ҡалаһынан Венера Һиҙиәтова, Баймаҡ районы Ярат ауылынан Мәхмүҙә Исламғолова, Саҡмағош районы Саҡмағош ауылынан М. Ғүмәрова, Хәйбулла районы Уфимский ҡасабаһынан Фәриҙә Шәрипова - **"Бураҡаевтар ижады" китабы**;

Учалы районы Истамғол ауылынан Әҙилә Ғәйетҡолова, Әбйәлил районы районы Атауҙы ауылынан Маһинур Ямалетдинова, Әлмөхәмәт ауылынан Р. Заманова, Асҡар ауылынан Нәғимә Илһамова, Баймаҡ районы Ярат ауылынан Гөлсөм Мырҙабулатова, Зәлифә Ҡасҡынова, Темәс ауылынан Сания Әминева, Күгәрсен районы Мәксүт ауылынан Ю. Вафина, Мораҡ ауылынан Урал Псәншин, Миәкә районы Илсеғол ауылынан Фәнүзә Илекәева, Мәләүез ҡалаһынан Зөлфәт Ғәлиев, З. Әминева, Дәүләкән районы Мәкәш ауылынан Рәмилә Ғәйзуллина, Мәләүез районы Һарыш ауылынан Р. Саҙретдинова, Сарлаҡ ауылынан Мәзинә Фазләхмәтова, Ғафури районы Ибраһим ауылынан Ф. Ғәлиуллина, Йылайыр районы Матрай ауылынан Ш. Төхвәтуллина, Көйөргәҙе районы Яҡшымбәт ауылынан Радик Хәлитов, Ейәнсура районы Бикбау ауылынан Хаммат Хәмитов, Үтәгол ауылынан Н. Нияҙғолова, Салауат районы Мәрсәлим ауылынан М. Ҡорбанғәлиева - **2017 йылға "Башҡортса дини календарь" менән бүләкләнә.**



Октябрҙә 2017 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙән бер кеше **"Антология поэзии Башкортостана**, 2 кеше **Рәшит Назаровтың "Ер һәм Йыһан йыры"**, 1 кеше **Ноғман Мусиндың "Алдар батыр"**, 1 кеше **"Башкирские исторические предания и легенды"**, 1 кеше **"Әхмәтзәки Вәлиди", 10 кеше 2017 йылға "Башҡортса дини календарь" китаптарына** лайыҡ буласаҡ.

**Әйҙәгеҙ, кем алыҡ!**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Өс балалыларҙы күп балалы ғаилә тип нарыҡланылар. Илдә халыҡ һаны миллионлап кәмегәндә, былдай сикләү зыянға ғына булмаҫмы?*



(Башы 1-се биттә).

*Мәликә МОРТАЗИНА, 4 бала әсәһе:*

Миненсә, сикләү тигән һүҙҙе ғөмүмән ҡулланырға ярамай, шундай аҡыл да бар бит хатта: Хоҙай күпме насип иткән, шунса тап балаҡаны, тип. Мин үҙем, мәсәлән, өс бала араһында үҫтем, ләкин беҙ бер ҙә күмәк булмаһыҡ: бер апайым, бер һеңлем - шул күп буламы инде? Уның ҡарауы, ирем яңғыҙы үҫкәнлектән, үҙебеҙҙең ғаиләлә балаларҙың күп булыуын теләне. Мин дә яратам сабыйҙарымды, береһе лә артыҡ түгел. Тик бындай тойғоно аңлаусылар һирәк шул хәҙер. Ҡайһы саҡ бәгзе әҙәмдәрҙең тупһыҙлығынан унайһыҙ ҙа булып китә хатта. "Нинә улай күп табаһың? Фатир кәрәкме? Ниндәй ташламалар алаһың, балалар аҡсаһын күпме түләйҙәр?" тигәнерәк әҙәпһеҙ һорауҙары менән теңкәгә тейәләр, шул тиклем ғәрләндерә. Ирем, Аллаға шөкөр, гел ҡолаҡҡа киртеп кенә тора, тыңлама шул йүнһеҙҙәрҙе, иң ҙур байлығыбыҙ - балалар, беҙгә ни кәрәк тағы, тип күңелде күтәреп ебәрә. Шөкөр, фатирыбыҙ ҙа бар, эш хаҡын да етерлек алабыҙ, башҡаһында эшебеҙ юҡ. Мин декретта ултырғанда, сабыйҙы ташлап, сығып йөрөй алманым, аталары балалар пособиеһы артынан сабыулап ҡараны ла, ҡул һелтәп кенә ҡуйҙы. Иҫ киткес волокита, әллә күпме ҡағыҙ, белешмә, документ юлларға ҡушып сығарғандар - ул да бит эш кешеһе. Әгәр балалар, уларҙың тыуыу тураһында таныҡлығы ла дәлил була алмай икән, тағы ниндәй документ таптыралар икән...Юллап бөтөрә алмаһыҡ, барыбер ыраған аҡсаһы юҡ, Хоҙай һаулыҡ бирһә, балалар ас-яланғас ултырмаҫ. Өс улыбыҙ, бер ҡыҙыбыҙҙы сынъяһау итеп кейендереп ебәрәбеҙ, бер кемдең балаһынан да кәм түгелдәр, артығырак булмаһа әле! Малайҙарыбыҙ мәктәпкә көн дә алыштырып, ап- аҡ күлдәктәрҙә бара, аяҡ кейемен дә ҡиммәтерәк булһа ла, сифатлыһын ҡарап алабыҙ. Ашарға ла тәрләндереп, тәмле итеп әҙерләргә тырышам, ризыҡ мул, шөкөр. Итенән дә, һөтөнән дә, йәшелсә-емештән дә айырылған юҡ. Балалар бер-береһе өсөн өҙөләп тора, бөтә ергә лә бергәләп йөрөйбөҙ. Көн һайын киске ашты байрамса, бергәләшеп ултырып ашайбыҙ. Берәү һуңлай икән - барыбыҙ ҙа уны көтәбеҙ. Күп бала - бәхет ул ҡәҙерен белгәндәргә. Уның ауырлығы бер ҙә һиҙелмәй, тиһәм дә, үҙем ауыл ғаиләләре хаҡында уйлайым: улар нисек көн күрәләр - тап шул балалар пособиеһына ғына ҡарап йәшәүселәр ҙә бар бит, сөнки ауылда эш юҡ. Ошо йәһәттән хөкүмәтебеҙ күп балалыҡты дәртләндереүсе сараларҙы камиллаштыра барһа, пособие юллауҙы ябайлаштыра төшһә, аборт яһатыусы йә сабыйынан баш тартыусылар ҙа булмаҫ ине.

*Тамара ИШДӘҮЛӘТОВА, 9 ейән-бүләсәргә өләсәй, Мәләүез районы:*

Үҙем ике бала менән сикләндем, шуға үкенгән саҡтарым күп хәҙер. Заманында партия райкомында яуаплы эштәрҙә булып, өйҙә бала ҡарап ултырырға форсат теймәне шул. Ул ваҡыттарҙа бит карьера, йәмәғәтселек әүҙемлеге, иртәнән кискә тиклем эш, командировкалар менән мәж килә инек. Ҡартайыр көндәрҙең, балаларыңдың уңдан да, һулдан да килеп етә һалып, хәл белешеп тороуҙарына, аралашыуҙарға зар-интизар булыр мәлдәрем етерен уйламағанмын икән, тием хәҙерге аҡыл менән. Хәҙерге аҡыл тигәндәй, әле йәш булһам, мин, моғайын, балаларым һанын алты-етегә тултырыр инем. Тик бына шуныһы: заманалар үҙгәреберәк китте бит, быны ла танымай булмай. Ҡыҙым менән улымдың ғаиләләре хәленән дә күреп торам: тартып-һүҙып, саҡ етекреп торалар. Ҡыҙым менән кейәү өс бала үҫтерә, улым менән килен иһә минең өгөтләүҙәргә ҡараманы - ике бала менән генә сикләнделәр. Мин уларҙы гәйепләй ҙә алмайым. Әгәр хөкүмәтебеҙ социаль яҡлау саралары на тейешле иғтибар бүлеп, демография мәсьәләһен милли идея кимәленә күтәрә алһа, тыуым артыр ҙа ине, бәлки. Бөтә бәлә, миненсә, илдәге туктауһыҙ көрсөктәрҙә, социаль-иҡтисади нигеҙебеҙҙең тотороҡло булмауында. Шул хәлдә лә әле икенсе балаға түләнеүсе әсәлек капиталы программаһын бойомға ашырыу ҙур эш булды, тип уйлайым. Ул күп балалы ғаиләләр хәлен һәм абруйын бер аҙға булһа ла күтәреп ебәрҙе, миненсә. Шуға ла хәҙер икенсе бала табырға теләүселәр байтаҡ та бит, тик шуның менән сикләнә лә ҡуялар. Булһын ине шундай дәртләндереү сараһы: әйтәйек, бишенсе балаға - миллион! Был да күптәгә ҡарар ҡабул итергә этәргес булыр ине. Башҡа тәңгәлдә бит беҙҙекеләр сит ил өлгөһөнә эйәрергә бик ярата. Ә бына уларҙың күп балалыларҙы социаль яҡлау системаһына күҙ һалыусы ла юҡ. Был йәһәттән иң уңышлы өлгөнө Франция күрһәтә. Унда күп балалы ғаиләләр һалымдарҙан азат ителә. Чехияла иһә һәр бала тапҡан һайын әсәнең пенсияға барып етеү йылы яҡынлаштырыла. Америкала күп балалы ғаиләгә айлыҡ пособие күләме - 200 доллар, Францияла - 500 евро, Германияла - 170, Австрияла 160 евро тәшкил итә. Бынан тыш, ғаиләләр һәр төрлө ташламалар менән файҙалана. Булһасы беҙҙә лә ошондай пособиелар!

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Рәсәй Премьер-министры Дмитрий Медведев "Башнефть"тең дәүләт ҡарамағында булған 50,075 процент акцияларын 329,7 миллиард һумға "Роснефть" компанияһына һатыу тураһындағы бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы. Билдәләнеүенсә, "Башнефть"тең дәүләт ҡарамағында булған акцияларын һатыуҙан килгән аҡса 2016 йылғы бюджетҡа йүнәлтелә.

✓"Башнефть"тең директорҙар советы быға тиклем "Роснефть"тең вице-президенты вазифаһын биләгән Андрей Шишкинды компанияның президенты итеп тәғәйенләне. Компанияның элекке етәксеһе Александр Корсик һәм идара ағзаларының вәкәләттәре ваҡытынан алда туҡтатылды. "Башнефть" компанияһының идара составына "Роснефть"тең ете топ-менеджеры: Андрей Шишкин, Наталия Минчева, Андрей Судаков, Андрей Лазеев, Денис Ныряков, Ростислав Латыш һәм Сергей Лобачёв инде.

✓Өфөлә Башҡортостандың Үҫеш корпорацияһы һәм Аньхойҙағы Ҡытай һәм Рәсәй араһында хеҙмәттәшлеккә ярҙам итеү үҙәге хеҙмәттәшлек тураһында килешеү төҙөнө. Документ машиналар эшләү һәм электр техникаһы, металлургия, еңел сәнәғәт, азыҡ-түлек сәнәғәте, төҙөләш материалдарын етештереү, индустриаль һәм агросәнәғәт парктарын булдырыу өлкәләрендә ил төбәктәре һәм Аньхой провинцияһы араһында хеҙмәттәшлек булдырыуға һәм уны үҫтереүгә йүнәлтелгән.

✓Өфө аэропортынан Белоярский ҡалаһына яңы льготалы рейс асылды. Осоштар төбәк пассажирҙар ташыуҙы субсидиялау программаһы сиктәрендә планлаштырылған һәм 24 октябрҙән башлана. Самолет Өфөнән дүшәмбе һәм шәмбе көндәрендә иртәнге 10 тула 15 минутта оса. Белоярскийҙан - урындағы ваҡыт буйынса көндөҙгө 3-сө 10 минутта. Осош өсөн минималь тариф 2980 һум тәшкил итә.

✓Профилле комитет ултырышында Башҡортостан парламентарийҙары йәшәү минимумын арттырыу тураһында төҙәтмәләрҙе хупланы. Проект 2017 йылда пенсионер өсөн ошо дәүмәлдә 8015 һум күләмендә билдәләүҙе күҙ уңында тота. Ошо һандан пенсияға социаль өҫтәмәләр билдәләнә, тип аңлатма бирҙеләр төбәк парламентының матбуғат хеҙмәтендә. Закон проекты Һаулыҡ һаҡлау, социаль сәйәсәт һәм ветерандар эше буйынса комитет ултырышында ҡаралды.

✓ *Үлем алдынан һәр икенсе әҙәм эште беренсе урынға ҡуйғанына, яҡындарына күберәк ваҡыт бүлмәгәненә, эш тип һаулығын бөтөрөп, кемдәр менәндер ара боҙоп, кемдәр менәндер сараһыҙҙан дуҫлыҡ тотоп йәшәүенә үкенә икән...*



УЙЛЫҒА- УЙ

**Был тема нишләптер минең бар уйымды солғаны ла алды. Ҡыҙыҡлы, арбағыс сюжет кеүек. Үлем алдындағы үкенестәр тураһында яҙылған уйланыуҙар ине был. Америка хосписында оҙаҡ йылдар эшләгән Бронни Веэның күҙәтеүҙәре, ауырыуҙар менән аралашыуҙары бәйән ителгән был яҙмаларҙа. Шуныһы ҡыҙыҡлы (йәки ҡыҙғаныс), үлем алдындағы кешеләрҙең барыһында ла үкенес була һәм, иң хайран иткәне, уларҙың барыһы ла тигәндәй бер төрлө. Бер нисә тема уларҙың барыһында ла әсендергес үкенеү хисе тыуҙырған. Йәғни, ваҡыты еткәс, беҙ ҙә шул уҡ нәмәләр, төшөнсәләр өсөн үкенәсәкбеҙ булып сыға бит инде. Ә бит, уйлап ҡараһаң, беҙ ул буласаҡ үкенеүҙәр теҙмәһен кәметә лә алабыҙ кеүек. Ғүмеребеҙҙең аҙаҡҡы көндәрендә нимәләргә үкенергә мөмкинбеҙ? Шулар хаҡында һөйләшәйекме?**

# ҺУҢҒЫ КӨН ҮКЕНЕСТӘРЕ



## Кеше аҡылы менән йәшәүгә

Беҙгә йәмғиәттең фекеренә буйһоноу ғәҙәте шул тиклем нык һеңгән. Йәмғиәт фекеренән тыш, беҙгә эргәбеҙҙәге яҡындарыбыҙҙың йоғонтоһо ла көслө. Мәҫәлән, ата-әсә шулай теләй, әсәй шунда уҡырға инергә, музыка менән шөғөлләнергә ҡуша, был егеткә тормошҡа сығыуҙы йәки шул ҡыҙға өйләнеүҙе хупламайҙар һ.б. Кеше фекеренә буйһоноу беҙгә уңайлы ла. Үҙеңә уйлап торорға, баш ватырға, яңылышҡанда эстән янырға кәрәкмәй. Икенсенең аҡылы менән башҡарылған хатала кемделер рәхәтләнеп әрләргә, ғәйепте уға ябырға була. Арабыҙҙа үҙ теләктәрен һәр ваҡыт артҡа шылдыра килеп, берәй ваҡыт тормошҡа ашырына йәшерен өмөт йөрөтөп, китек күңел менән ҡалыу күптәргә хас. Бигерәк тә тыуған яҡтарынан айырылып, ситтә көн иткән ир-егеттәр үкенә икән. "Ҡасандыр бер ҡайтып, шунда йәшәрмен тип, ҡатынымды йә башҡаны тыңлап, зарығып, үҙемде бәхетһеҙ иткәнмен", - ти икән уларҙың күптәре. Ир-егеттең кендеге ҡарын һыуы түгелгән ергә бәйле була, тигәндәре ошолор, күрәһең.

Ошоларҙан сығып, тереләргә беренсе кәңәш: күңелде тыңларға кәрәк. Уны зарыҡтырырға ярамай. Теләмәгән ерендә йәшәп, теләмәгән кешеһен йәр итеп, яратмаған эштә һәм үҙен хөрмәт итмәгән кешеләр араһында көн итеү, йәғни үҙеңде "көсләү", тәжрибә күрһәтеүенсә, яҡшы һөҙөмтә бирмәй. Бындай йәшәйештә күңел үҫмәй, ул яйлап ҡорой ҙа, кешене бәхетһеҙлек халәтенә алып килә.

## Эште беренсе урынға ҡуйғанға

Беҙ матди донъяла көн итәбеҙ. Йәғни, йәшәү өсөн эшләү кәрәк. Эш өсөн аҡса алабыҙ һәм шул аҡсаға аҙыҡ, кейем, комфорт һатып алабыҙ. Аҡса, билдәле, бер ваҡытта ла етмәй. Хатта иң хәлле иҫәпләнгәндәргә лә етмәй ул аҡса. Ни өсөн улай һуң? Сөнки беҙ матди ғына түгел, ә ҡатламдар бүленешенә, сағыштырыуҙарға һәм көнсөллөккә ҡоролған донъялабыҙ. Беҙгә инде ябай етешлек кенә түгел, ә башҡаларҙан юғарыраҡ, шәберәк көнитмеш кәрәк. Башҡалар был хаҡта белмәһә лә, һеҙ үҙегеҙ беләһегеҙ бит. Шул көнитмеш үҙе үк ҡапҡан. Был марафонда кеше ат кеүек яна, эшлектән сыға.

Был мәсьәлә икенсе төрлөрәк тә булырға мөмкин. Мәҫәлән, һеҙ эшләмәй булдыра алмайһығыҙ. Балаға ниҙер һатып алырға, киләһе эш хаҡынан фатирға ремонт яһарға, кредит түләргә кәрәк һ.б., һ.б. Шул мәшәҡәттәр артынан ҡыуып, балалар ҙа, ғаилә лә, туғандар ҙа икенсе, өсөнсө планға тороп ҡала. Әлеге көндә, бәлки, беҙ быларҙы тулы мәғәнәһендә аңлай ҙа алмаҫбыҙҙыр: нисек инде, эштән мөһим нимә бар? Әммә, нисек кенә булғанда ла, үлем алдынан һәр икенсе әҙәм эште беренсе урынға ҡуйғанына, яҡындарына күберәк ваҡыт бүлмәгәненә, эш тип янып-көйөп, һаулығын бөтөрөп, кемдәр менәндер ара боҙоп, кемдәр менәндер сараһыҙҙан дуҫлыҡ тотоп йәшәүенә үкенә икән...

## Хистәрҙе йәшергәнгә

Бөтә донъя - театр, ә беҙ уның әртистәре, тип Уильям ҡарт дөрөҫ әйткән ул. Был ысынлап та шулай. Беҙ күп осраҡта ысын хистәрҙе йәшереп, яһалма хистәр менән йәшәйбеҙ. Был яһалмалыҡ ҡаныбыҙға шул ҡәҙәр нык һеңгән һәм уны мәҙәниәт тип тә атай алабыҙ. Бары тик бәләкәй саҡта ғына беҙ был бығауҙарҙан азат. Мәҫәлән, балалар баҡсаһына йөрөгән сабый, кемделер яратмаһа, уның менән сәкәләшә йәки тәрбиәсеһен яратмайым тип әйтә ала бит. Хатта тәү күргән кешеһенә лә балаларҙың "Кит, мин һине яратмайым", тип әйткән осраҡтарын ишеткәнебеҙ бар. Әйтә ала, сөнки күңеле уға шулай итергә ҡуша. Күңелен тыңлай, сөнки әле тәбиғи ысынбарлығынан, тәбиғи аңынан айырылмаған. Ул үҙенең эске донъяһына, һиҙемләүенә ҡаршы килмәй. Ә беҙ уны "бер ҡатлы сабый" тигән булабыҙ. Үҫә бара кеше ана шул тәбиғилеген юғалта һәм хистәрен йәшерә белергә өйрәнә барып, өйрәнә барып, "әртискә" әйләнеп ҡуя. Күптәр, бигерәк тә әлеге лә баяғы ир-егеттәр, ҡатындарын ысын күңелдән яратмауын йәшереп йәшәй икән. Ҡатындар был хаҡта әйтергә лә мөмкин, ә ирҙәр күп осраҡта әйтә алмай һәм хисен баҫып йәшәй, тиелгән. Был, әлбиттә, минең үҙем өсөн дә бик ҡыҙыҡлы яңылыҡ булды һәм ошо хаҡта оҙаҡ ҡына уйландым. Ә бит беҙ был тәңгәлдә ир-егеттең күңеле ҡатыраҡ икән, тип уйлап өйрәнгәнбеҙ. Баҡтиһәң, киреһенсә.

Эштә йә өйҙә яратмаған кешеләрең менән аралашырға, һәр ваҡыт бәйләнештә булырға тура килеү ҙә кешене эстән иләй икән. Ә шулай ҙа үлем түшәгендәгеләр иң күп осраҡта "Эх, шуға һөйөүемде белдерә алманым" йәки "Уларҙы (балаларын, атаәсәһен, туғандарын, ирен йә ҡатынын) яратыуымды етерлек белдерә алманым", тип үкенә икән. Ошоларҙан сығып, шундай һығымта яһайыҡ: йәшермәйек хистәрҙе. Әйҙә, улар белһен. Бәлки, яуап та бирмәҫтәр, бәлки, һеҙҙең һөйөүҙе ҡабул да итмәҫтәр, бәлки, артығыраҡ та булыр, әммә һуңынан һеҙ был хаҡта үкенмәйәсәкһегеҙ. Кем әйтмешләй, яратыу артыҡ булмай ул.

## Дуҫтар менән аралашмауға

Һеҙ ҡасан һуңғы тапҡыр дуҫтарығыҙ менән булдығыҙ? Осрашыу түгел хатта телефондан да һирәк кенә бәйләнешкә инә алаһығыҙ, шулай бит? Сөнки, эш, ғаилә, эш, ғаилә... һәм тағы бер тапҡыр эш, ғаилә. Ошо теҙмәлә беҙҙең тормош бер төрлөгә, төҫһөҙгә, ҡыҙыҡһыҙға әүерелә. Дуҫтар (әлбиттә, яҡшы дуҫтар) улар тормошобоҙҙо биҙәүсе төҫтәр ҙә инде. Улар менән бер ултырып алыу, бергәләп ҡайҙалыр барыу, нимәләрҙер ойоштороу үҙе үк ыңғай эмоциялар, кисерештәр барлыҡҡа килтерә. Һеҙ ана шул аралашыуҙан әллә күпмегә етерлек позитив аласаҡһығыҙ. Шунлыҡтан, алдығыҙҙа ял көндәре эш йә дуҫтар тигән һайлау торһа, мотлаҡ дуҫтарығыҙҙы һайлағыҙ. Хатта ғаилә лә ваҡыты-ваҡыты менән был тәңгәлдә һеҙҙе аңларға бурыслы.

## Үҙеңә бәхетле булыу мөмкинлеген бирмәгәнгә

Беҙҙең бөтә тормоштоң 90 проценты хәл-ваҡиғаларҙы нисек итеп ҡабул итеүҙән һәм шуның 10 проценты ғына шул ваҡиғаларҙың ысынбарлығынан тора икән. Шунлыҡтан, юҡ-бар бәләне олоғара итеп ҡабул итмәй өйрәнергә кәрәк. Мәҫәлән, балаң уҡырға инә алмаған икән, илап-һыҡтап, уны ҡурҡытып, үҙегеҙ ҡайғырып ултырырға түгел, ә еңелерәк ҡарап өйрәнеү зарур. Икенсе йыл һынау тотор, уҡыу йортоноң хәле еткәндәйенә барыр, бәлки, тап ошоноң менән уның икенсе юлдары асылалыр һ.б. Юғары аң һеҙҙе нимәнәндер сикләй йәки нимәнәндер мәхрүм итә икән, тимәк, башҡа мөмкинлектәр бирәсәк. Был юҡ, шул етешмәй, шунһыҙ ҡыйын, тип, һәр ваҡыт күгегеҙҙе һөрөмләп тормағыҙ. Һеҙ бит әле шунһыҙ ҙа йәшәйһегеҙ, ә, бәлки, ул бөтөнләй һәм бер ваҡытта ла булмаҫ? Шунлыҡтан, шунһыҙ, тегеһеҙ һәм кемдәрһеҙҙер бәхетле була белегеҙ. Бәхетле булыу тойғоһо берәүҙән дә тормай, ә һәр кешенең үҙ башындағы тойғо икән. Бәхетле итә белегеҙ үҙегеҙҙе, был яҡын-тирәләгеләрегеҙгә лә йоғонто яһаясаҡ. Һеҙҙең бәхетле булыуығыҙҙы сикләгәндән алыҫлашығыҙ, күңелегеҙҙе таҙартығыҙ, бер нәмәнең дә тотҡоно булмағыҙ. "Мин бәхетле" тип уйлағыҙ һәм шул уйҙы үҙегеҙгә һеңдереп алығыҙ. Үкенмәҫһегеҙ.

## Һығымта

Уйлап ҡараһаң, ошо хәҡиҡәттәрҙең тап үлем алдынан аңға барып етеүе үҙе үк үкенесле. Ни өсөн быларҙы кеше йәшәйештә, әле шәп сағында аңламай икән? Үлем түшәгенә яткас, яратып, эшләп, башҡарып һ.б. өлгөрөп булмай бит инде. Ә күңелде намыҫ талай һәм кешеләр кемгәлер нимәнелер әйтеп ҡалдырырға, ғәфү үтенергә, күреп ҡалырға ашыға. Асылда, быларҙы ваҡытында ла үтәп була ине. Туҡтап, уйлап ҡараһаҡ, беҙ бит был хаҡта беләбеҙ, бары тик моңһоҙлоҡтан, ғорурлыҡтан, киләсәккә һылтаныуҙан арына алмайбыҙ. Ә ваҡыт ул иң алдатҡыс нәмә, бөгөн ул бар кеүек, ә иртәгә инде - юҡ. Һәм һиңә кәрәкле кеше лә юҡ. Иң ҡурҡынысы шунда.

Шулай итеп, кәметә алабыҙмы беҙ һуңғы көн үкенестәрен? Әлбиттә, бөгөндән башлаһаҡ...

**Лилиә ИСМӘҒИЛЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостандың коммерцияға ҡарамаған өс ойошмаһы 2016 йылда социаль әһәмиәтле проекттары өсөн Рәсәй Президентының гранттарын аласаҡ. Атап әйткәндә, 3 миллион һумлыҡ грантты Йәмәғәт башланғыстарына ярҙам итеү төбәк йәмәғәт ойошмаһы отто. Еңеүселәр иҫәбендә республиканың Хәйриә ойошмалары ассоциацияһы ла бар. Башҡортостан Профсоюздар федерацияһының "Хеҙмәт кешеһе һәм закон" проектын тормошҡа ашырыу өсөн 3 миллион һум самаһы бүленә.

✓Өфөләге "Еңеү" кинотеатрында скульптура тергеҙелә. Бина алдындағы "Азат итеүсе яугир, эшсе һәм колхозсы" композицияһы 2000-2001 йылдарҙа реконструкциялағанда емерелгәйне. Хәҙер уны урынына кире ҡайтарырға хәл ителгән. Асыу тантанаһы октябрь аҙағына билдәләнгән. "Еңеү" кинотеатры 1945 йылдың 9 майында картуф баҫыуы урынында немец әсирҙәре көсө менән төҙөлә башлай. 1958 йылда ул киң экранлыға әүерелә, 2001 йылда цифрлы ҡорамалдар менән йыһазландырыла.

✓Республиканың баш ҡалаһында Чехияның рәсми делегацияһы булып китте. Уның составында Чехияның Ғәҙәттән тыш һәм Тулы хоҡуҡлы илсеһе Владимир Ремек, Чехия Республикаһының ауыл хужалығы министры урынбаҫары Ярослава Бенеш Шпалкова бар ине. Сәфәр барышында улар бизнес-форумда ҡатнашты, Ҡырмыҫҡалы районындағы "Артемида" тоҡомсолоҡ хужалығына булды.

✓Башҡортостан Рәсәй Иҡтисади үҫеш министрлығына республиканың икенсе һәм өсөнсө категориялы моноҡалаларында тиҙ социаль-иҡтисади үҫешеүсе биләмә булдырыу өсөн ғариза бирҙе. Уларға Нефтекама, Белорет, Учалы һәм Благовещен ҡарай. Ғаризаларға Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов ҡул ҡуйған.

✓Республиканың юбилейы уңайынан Башҡортостандың Сауҙа-сәнәғәт палатаһы "Республиканың 100 йыллығына - 100 инвестиция проекты" тигән эшҡыуарлыҡ акцияһы башлай. Уның маҡсаты - республикала инвестиция мөхитен яҡшыртыу өсөн шарттар булдырыу, бизнес һәм властың яңы үҙ-ара эш итеү механизмдарын һынап ҡарау.

**"Башинформ"дан.**

*✓ Зәки Вәлиди урамынан алып, Республика Йорто урынлашҡан Туҡай урамынан Салауат Юлаев майҙанына тиклем территорияны ысын мәғәнәһендә Республика майҙанына әүерелдереү йүнәлешендә эшләргә генә кәрәк.*



ҠЫҪҠАСА

# БЕҘҘЕКЕЛӘР - ҠЫТАЙҒА, ҡытайҙар - беҙгә

✓**Башҡорт дәүләт университеты һәм Наньчан университеты икеләтә диплом программаһын башларға һәм уҡытыусылар менән алмашырға ниәтләй.** Ҡытай Халыҡ Республикаһы делегацияһының БДУ-ға сәфәре барышында ошо хаҡта һүҙ барҙы. Әлеге ваҡытта Башҡорт дәүләт университеты һәм Наньчан университеты студенттарҙы ваҡытлыса бергә уҡытыу программаһын тормошҡа ашыра, киләсәктә башҡа йүнәлештәр буйынса хеҙмәттәшлек итеү ҡарала. Башҡорт дәүләт университеты ректоры Николай Морозкин әйтеүенсә, студенттар араһында ҡытай мәҙәниәтенә ҡыҙыҡһыныу арта, күптәр ҡытай телен өйрәнергә теләй. Хәҙер Наньчан университетының рус теле кафедраһы мөдире Чжан Мянь БДУ студенттарына ҡытай теленән белем бирә, Ҡытайҙа иһә Наньчан университеты студенттарын рус теленә БДУ-ның сит телдәр кафедраһы доценты Анна Рябцева өйрәтә.

✓**Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенең 23 августағы "Башҡортостан Республикаһында йәшәгән, эшләмәүсе айырым категория граждандарға күп фатирлы йортта дөйөм милекте капиталь ремонтлауға сығымдарҙы компенсациялау тәртибенә үҙгәрештәр индереү тураһында"ғы 344-се ҡарарына ярашлы,** айына бер тапҡыр бирелә торған өҫтәмәгә яңғыҙ йәшәгән, эшләмәүсе, 80 йәшкә еткән йәки пенсияла булған эшләмәүсе граждандар ғаиләһендә йәшәүсе 80 йәшлек торлаҡ милекселәре хоҡуҡлы. Компенсация күләме: 6 ҡатлы йорттарҙа йәшәүселәргә - 85,80; 6 ҡаттан бейек булған йорттарҙа йәшәүселәргә 95,70 һум. Өҫтәмә түләүҙәрҙе алыу өсөн, был хоҡуҡҡа эйә граждан йыл дауамында ниндәй айҙа мөрәжәғәт итеүенә ҡарамаҫтан, түләүҙәр йылдың 12 айы өсөн дә бирелә. Был мәсьәлә буйынса Р.Зорге урамы, 33, 101-се бүлмәгә мөрәжәғәт итергә кәрәк. 223-27-49 телефоны буйынса белешмәләр алырға мөмкин.

✓**Быйыл 15 сентябрҙә республика Хөкүмәте ипотека кредиты буйынса процент ставкаһын өҫтәмә финанслау программаһын ҡабул иткәйне.** Хәҙер федераль программала ҡатнашыусылар ғәмәлдәге ставканы тағы ла ике процентҡа кәметә ала. Ошо федераль программала ҡатнашыу өсөн республикала алты айҙан оҙағыраҡ йәшәүсенең йәше 18-ҙән кәм булмаҫҡа тейеш. Субсидиялау программаһы беренсел эконом-класлы торлаҡ һатып алыуға, кредит килешеүҙәренә ҡағыла. Программаға инеү өсөн район йәки ҡала хакимиәтенә мөрәжәғәт итергә кәрәк. Ғаризаны 2016 йылдың 31 декабренә тиклем бирергә мөмкин. Ипотеканы субсидиялау программаһында авария хәлендә булған һәм тиҙҙән һүтелергә тейешле йортта йәшәгән ғаиләләр, 35 йәшкә тиклемге ике бәләкәй балалы ғаиләләр, хәрби хәрәкәт ветерандары ҡатнаша ала.

ЙӨҘ ЙЫЛЛЫҠҠА - ЙӨҘ ОБЪЕКТ

# РЕСПУБЛИКА МАЙҘАНЫН КҮРГЕМ КИЛӘ...



**Донъяла бер нисә урында Республика майҙаны тигән территория бар. Улар нигеҙҙә республиканың төп майҙаны булып тора һәм төрлө ҙур саралар, әһәмиәтле байрамдар үткәреү өсөн тәғәйенләнгән.**

Мин дә Башҡортостанда шундай майҙан булыуын күрергә теләр инем. Унда республика бар матурлығында сағылырға, килгән кешеләрҙә дәүләтебеҙҙе арҡырыға-буйға йөрөп, ҡарап, танышып сығыу теләген тыуҙырырға тейеш, тип уйлайым. Бының өсөн яңы майҙан эшләп тороу ҙа кәрәкмәй, бары тик БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай бинаһы урынлашҡан Зәки Вәлиди урамынан алып, Республика Йорто урынлашҡан Туҡай урамынан Салауат Юлаев майҙанына тиклем территорияны ысын мәғәнәһендә Республика майҙанына әүерелдереү йүнәлешендә эшләргә генә кәрәк. Мәҫәлән, ҡабатлау булһа ла, әйтеп китмәй булдыра алмайым: Рәсәй федерализмына нигеҙ һалыусыларҙың береһе - Зәки Вәлидигә һәм уның арҡаҙаштарына ошо майҙанда һәйкәл мотлаҡ булырға тейеш. Үҙ иләндә бәйғәмбәрҙәр булмай, тигәндәй, төрки дәүләттәрҙә арҙаҡлы башҡортобоҙға һәйкәл дә асалар, уның исемен бәйғәмбәр кимәленә лә күтәрәләр, әммә тыуған Башҡортостанында ғына тейешле иғтибар юҡ.

Артабан был майҙанда Салауат Юлаев һәйкәленә еткәнсе заманса реклама щиттарынамы, йәки трансляция ашамы, республиканың ҡаҙаныштарын, уның туристарҙы йәлеп итерҙәй тәбиғәт объекттарын сағылдырған һүрәттәр, картиналар, видеолар күрһәтелергә тейештәр. Ә инде юл ыңғайы БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай йортондағы парламент музейына ла, Милли музейға ла инеп сығырға мөмкин. Әммә был мини-сәйәхәт "Ватан" этноауылы аша үтеп, мотлаҡ милли батырыбыҙ Салауат Юлаев һәйкәле эргәһендә тамамланырға тейеш, тип уйлайым. Шул саҡта халҡыбыҙҙың оло һәм бөйөк шәхестәре һәйкәленә ҙур тантаналарҙа ғына түгел, ә көн һайын тигәндәй сәскәләр һалыныр, милләтебеҙҙә илһөйәрлек тойғоһо тағы ла артыр ине.

**Әхәт СӘЛИХОВ, филология фәндәре кандидаты.**

АФАРИН!

# БЕҘ ҺЫНАТМАЙБЫҘ!

**(Башы 1-се биттә).**



Әйткәндәй, быны беҙ көндәлек тормошта ла, инфраструктура үҫешендә лә күреп-белеп, үҙебеҙ тойоп торабыҙ. Мәҫәлән, Республика көнө алдынан баш ҡалала яңы Затон күпере асылды. Объектты тантаналы асҡан ваҡытта РФ транспорт министры Максим Соколов Өфөлә иң ҙур һәм иң төп күперҙәрҙең береһе асылыуын һыҙыҡ өҫтөнә алып: "Объект беҙҙең өсөн бик әһәмиәтле, сөнки тиҙ төҙөлдө. Рөстәм Зәки улы, төҙөүселәр, ҡала хакимиәте башлығы менән беренсе эш кәңәшмәһе уҙғарғанда объекттың төп контурҙары ғына асыҡланған кеүек ине. Ләкин ике йылдан һуң ул сафҡа инде. Бындай тиҙлек тотош команданың бер төптән эшләүенә һәм РФ Хөкүмәте ҡарары менән 1,5 млрд һум аҡса - төҙөлөш күләменең өстән бер өлөшө самаһы сумма бүленеүенә лә бәйле", - тип белдерҙе.

Яңы күпер, бер яҡтан, Өфөнөң артабанғы үҫешенә булышлыҡ итһә, икенсе яҡтан, транспорт бәйләнешен камиллаштырыуға һиҙелерлек өлөш индерәсәк. Бөгөн ул М-7 трассаһына сыҡһа, киләсәктә, дәүләт-шәхси партнерлыҡ проекты тормошҡа ашырылып, тоннель төҙөлөшө тамамланһа, был күпер М-5 трассаһына сығыу мөмкинлеген дә бирәсәк.

БР Башлығы Рөстәм Хәмитов белдереүенсә, 2018 йылда тамамланырға тейешле проекттың, сифатына һәм ышаныслылығына зыян килтерелмәйенсә, ике йылға алдан тапшырылыуы - ҙур ҡаҙаныш ул.

Шулай уҡ баш ҡаланың Калинин районы халҡы өсөн Машина төҙөүселәр урамынан Вологодская урамына тиклем һалынған һәр йүнәлештә ике һыҙатлы Интернационал урамының дауамын асыу ҙа ҙур ваҡиға булды. Был объектты уҙған быуаттың 70-се йылдарында уҡ планлаштырып маташалар, әммә ул яңы ғына тормошҡа ашырыла. 2014 йылда ҡала хеҙмәттәре проект өҫтөндә эш башлай һәм ике йылдан һуң ул сафҡа индерелә. Инфраструктураның был яңы объекты Өфөнөң төньяҡ райондарындағы урам селтәре хәрәкәтен бушатырға һәм Октябрь проспектын Өфө-Шаҡша трассаһы менән тоташтырырға тейеш. Был инде автотранспорттың Силәбе яғына тотҡарлыҡһыҙ хәрәкәтен тәьмин итәсәк, тип күҙаллана.

Интернационал урамының дауамы төҙөлөшөнә әҙерлек барышында 630 тимер гараж алына, ямғыр һыуы канализацияһы һәм башҡа техник эштәр башҡарыла, иң мөһиме - инженер селтәрҙәре юлдан ситкә күсереп һалына. Был инде ағымдағы ремонт йәки техник хеҙмәтләндереү үткәрелгәндә лә юл боҙолмаясаҡ, тигәнде аңлата. Шулай уҡ газондар һәм велосипед юлдары ла ҡаралған, 107 урынға яҡтыртыу сығанағы, светофорҙар ҡуйылған, башҡа төҙөкләндереү эштәре лә башҡарылған.

Бынан ике йыл элек Өфө властары 10 йыл эсендә дүрт күпер төҙөүҙе тормошҡа ашырыу маҡсатын белдергәйне. Уларҙың береһе - Затон күпере сафҡа инде лә инде. Киләсәктә Урмансылар паркы эргәһендәге тоннель аша Ҡариҙел йылғаһы аша М-5 трассаһына алып сығасаҡ күпер, Инорс менән Һупайлы биҫтәһен тоташтырасаҡ күпер һәм Интернационал урамынан М-7 трассаһына тура сығау мөмкинлеген биргән күпер төҙөлөүе лә Ҡаф тауы артында түгелдер, тип ышанайыҡ.

**З. ӘЙЛЕ әҙерләне.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Ошо йылдың июлендә Башҡортостанда уртаса эш хаҡы 26 789 һум тәшкил иткән. Эшкә һәләтле халыҡ өсөн йәшәү минимумы 9363 һумға тиң. Тикшереүҙәргә ярашлы, төбәктә иҡтисади яҡтан әүҙем халыҡ һаны 2 миллион 015,9 мең кеше тәшкил иткән. Эшһеҙҙәр һаны - 110 меңдән ашыу. 1 октябргә республикала рәсми рәүештә теркәлгән 22,5 мең эшһеҙ һәм 36,3 мең вакансия иҫәпләнгән.

✓Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығы вазифаһына конкурс 27 сентябрҙә иғлан ителгәйне. Конкурста Илдар Чанышев, Николай Герасимов, Ринат Әхмәҙуллин һәм хакимиәт башлығы вазифаһын башҡарыусы Ирек Ялалов ҡатнаша. 19 октябрҙә депутаттар комиссия тәҡдим иткән кандидаттар араһынан яңы ҡала хакимиәте башлығын һайлаясаҡ.

✓Башҡортостан Хөкүмәте Баҡалы, Ғафури, Дәүләкән, Илеш, Ҡыйғы, Яңауыл райондарында, шулай уҡ Бәләбәй, Приютово ҡасаба Советында, Бәләбәй районы Аксаков ауыл Советында, Салауат районы Салауат ауыл Советында, Стәрлетамаҡ районы Отрадово ауыл Советында һәм Шишмә районы Шишмә ҡасаба Советында алдағы йылда йылытыу миҙгеле барышында йылылыҡ өсөн түләү тәртибен раҫланы. Республиканың башҡа муниципаль берәмектәрендә йыл дауамында йылылыҡ өсөн түләүҙең ғәмәлдәге тәртибе һаҡлана.

✓Башҡортостан буйынса ЮХХДИ идаралығы автобус водителдәренә видеокүҙәтеү ойоштороҙо. Йәшерен контроль пассажир транспорты водителдәренең юл ҡағиҙәләрен нисек үтәүен күҙәтеү өсөн ойошторолған. ЮХХДИ-һы экипажы маршрут башланғандан алып автобустың бөтә юлын видеорегистраторға төшөрә.

✓2017 йылға БДИ һәм ТДИ теҙмәһе билдәле булды. Теҙмәнең яңыртылған проектын Мәғариф һәм фән өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәт әҙерләгән. Документҡа ярашлы, имтихандар алдан, төп һәм өҫтәмә этапта уҙғарыла. 2016 йылдағы кеүек үк, теҙмәлә бөтә предметтар буйынса имтихандар үткәреү өсөн өҫтәмә резерв көн ҡаралған.

✓Башҡортостанда Республика психотерапия үҙәге асыла. Республика Хөкүмәте шундай ҡарар ҡабул итте. Яңы үҙәк асыу тураһында башланғыс "Башҡортостандың 100 йыллығына - 100 объект" проектына индерелгән. Стационарҙы файҙаланыуға тапшырыу 2018 йылдың беренсе кварталына билдәләнгән. Ошондай объекттың төҙөлөүе төбәктә суицидтар һанын кәметергә булышлыҡ итергә тейеш.

✓ *Ә төп яңылыҡ шул булды: быйыл Ҡыш бабайҙың ҡунаҡтар ҡаршылай торған тирмәһе бер түгел - биш урында тәҙләсәк. Төп тирмә, Ҡыш бабайҙың резиденцияһы Өфөнөң "Ватан" этнопаркында урынлашасаҡ.*



...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

**"Туристарҙы йыш ҡына төрлө "балдаҡтар" буйлап йөрөтәләр. Иҫтәлекле урындарҙы ҡарап сығыуға иҫәпләнгән маршруттарҙы "балдаҡтар" тип атайҙар. Ә Яңы йыл байрамдарында Башҡортостанда ял итергә теләүселәрҙең сәйәхәтен беҙ балдаҡ рәүешендә түгел, ә "нурҙар" рәүешендә ойоштормаҡсыбыҙ. Үҙәктәге берәй ҡунаҡханаға туҡталып, бер көндө - бер ҡалаға, икенсе көн - икенсеһенә барып ҡайтһалар, өсөнсө көндө иһә берәй районды барып күрә алалар", - тигәйне "Башинформ" мәғлүмәт агентлығында үткән кәңәшмә барышында Башҡортостан Эшҡыуарлыҡ һәм туризм буйынса дәүләт комитеты рәйесе Вячеслав Ғиләжетдинов. Ошо һүҙҙәр Башҡортостан туризмының төп үҙенсәлеген билдәләне лә, ахры. Хәйер, кәңәшмәлә һүҙ нимә тураһында барыуына ҡыҫҡаса байҡау яһайыҡ тәүҙә.**

# ҠЫШ БАБАЙ ТИРМӘЛӘРЕ...

## биш урында ҡоролаcаҡ



- Хәтерегеҙҙәлер, былтыр беҙ "Башҡортостанда - Яңы йыл", "Һоҡланғыс Башҡортостан" тигән проекттарға нигеҙ һалдыҡ, - тип башлап китте һүҙен Вячеслав Ғиләжетдинов. - Был проект сиктәрендә Башҡортостанды 50 мең тирәһе ҡунаҡ килеп күрҙе. Беҙгә был хәл ярайһы уҡ ҡыҙыҡлы, байрам рухына тап килешле һымаҡ тойолдо. Ошо саралар менән Башҡортостандан ситтә йәшәүселәргә төбәктең ҡышҡы гүзәллеген, үҙенсәлеген күрһәтеүгә өлгәштек. Кемдер тау саңғыһында шыуыу өсөн килһә, икенсе берәү Ҡыш бабайҙың тирмәһен - уның йәшәгән урынын күреү маҡсаты менән республикаға юлланды. Шуға ла беҙ был программаны быйыл да эшләргә булдыҡ. Был байрам киләсәктә традицион байрамға әйләнер, тип өмөтләнәм.

"Башҡортостанда - Яңы йыл" проекты 18 ноябрҙә башланып, 30 ғинуарға тиклем барасаҡ. Ошо осорҙа ойошторолған һәр сара үҙенсәлекле булмаҡсы. Былтыр Ишембай районында Торатау итәгендә ойошторолған Ҡыш бабайҙың тирмәһе барыһының да күңеленә хуш килгәс, беҙ ул тәжрибәне быйыл да ҡабатларға, хатта киңерәк ҡолас менән уҙғарырға булдыҡ", - тине Выячеслав Ғиләжетдинов һәм Яңы йыл проекттары менән яҡындан таныштырыу өсөн һүҙҙе урынбаҫарына бирҙе. Роман Шәйхетдинов үҙ сиратында Яңы йыл каникулдарының һәр көнөнә атама биреләсәген, сараларҙың ошо атамаларға ярашлы үтәсәген белдерҙе. "Мәҫәлән, 4,5 ғинуар - "Белем көнө", тип билдәләнде. Был көндә райондарҙа, күрше өлкәләрҙә йәшәүселәр Өфөнөң ҡайһы бер юғары уҡыу йорттарына "Асыҡ ишектәр көнө"нә килә ала. Ғәҙәттә, "Асыҡ ишектәр" яҙғы осорҙа ойошторола. Ләкин беҙ вуздарға был сараны балалар буш саҡта, ғинуарҙа үткәреп ҡуйырға тәҡдим иттек", - тине Роман Шәйхетдинов.

Каникул көндәренең тематик исемдәре түбәндәгесә: 1 ғинуар - Ҡыш бабай көнө, 2-һе - Ата-әсәләр көнө, 3-ө - Бала көнө, 4,5 ғинуар - Белем көнө, 6 ғинуар - Спорт көнө, 7-һе - Раштыуа быршыһы көнө, 8 - Игелекле күршеләр көнө тип билдәләнгән.

Ә төп яңылыҡ шул булды: быйыл Ҡыш бабайҙың ҡунаҡтар ҡаршылай торған тирмәһе бер түгел - биш урында тәҙләсәк. Былтыр ул Торатау итәгендә ҡоролдо. Быйыл төп тирмә, Ҡыш бабайҙың резиденцияһы Өфөнөң "Ватан" этнопаркында урынлашасаҡ. Уның эргәһендә Рәсәй почтаһы тарафынан ҡуйылған хат йәшниге торасаҡ. Балалар Яңы йылға ниндәй бүләк алырға теләүен белдереп, Башҡорт Ҡыш бабайына хат яҙа аласаҡ. Ҡыш бабай уларға үҙ бүләктәрен таратасаҡ, имеш. Был яңылыҡ тәүгә индерелә. Башҡорт Ҡыш бабайының йәмғеһе 5 ҡунаҡ тирмәһе барлыҡҡа киләсәк. Икенсе аҡ тирмә - Торатау итәгендә, өсөнсөһө - Мишкә ҡасабаһының Параолимпия спорты үҙәгендә төҙәләсәк. Ҡыш бабайҙың дүртенсе ҡунаҡ йортон Октябрьский ҡалаһының "Өйәҙе тау" ҡунаҡхана комплексына барып күрә аласаҡтар. Ҡыш бабайҙың бишенсе тирмәһе Учалы районының Кирәбе ауылында ҡороласаҡ. Ҡыш бабай ҡышлауын үҙҙәрендә төҙөү хоҡуғын 15 дәғүәсе араһынан 5 дәғүәсе - алдараҡ һанап үтелгән ауыл-ҡалалар яулаған. "Һайлап алыу талаптарыбыҙ бик юғары булды, урындарҙа яҡшы итеп әҙерләнә алырлыҡтарын ғына һайланыҡ", - тине Вячеслав Ғиләжетдинов.

Роман Шәйхетдинов Торатауҙа был тирмә икенсе йыл ҡоролоуын иҫәпкә алып, ишембайҙарҙың был юҫыҡта тәжрибәле булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды, быйыл да бик яҡшы әҙерләнәсәктәренә шиге юҡлығын белдерҙе.

Башҡорт ҡыш бабайы, күсмә тормош менән йәшәүсе халыҡ вәкиле булараҡ, үҙенең ҡышлауҙарын һәм йәйләүҙәрен берәмләп ҡарап сығасаҡ, тиелде кәңәшмәлә. Тимәк, Өфөнән тыш, һәр биш төбәктә лә республика кимәлендәге тамаша күрһәтелеренә өмөт ҙур. Өфөлә, һәр ваҡыттағыса, әҙерлеккә ең һыҙғанып тотонмаҡсылар. Шыршы майҙансыҡтарына бушлай ташый торған метробустар йөрөйәсәк, уларҙың маршруттары аҙағыраҡ хәбәр ителәсәк.

Шулай итеп, Башҡортостандың Туризм һәм эшҡыуарлыҡ буйынса дәүләт комитеты Яңы йыл байрамдарында Башҡортостанды туристарҙың иң яраткан урынына әйләндермәксе. Улар ата-бабаларыбыҙҙың ҡышҡы миҙгелдә берберенә ҡунаҡҡа йөрөшеү ғәҙәтен яңынан тергеҙәсәк.

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## ТӨНДӘ ЙӨРӨТМӘ

**"Башҡортостан Республикаһында бала хоҡуҡтарының төп гарантиялары тураһында"ғы Башҡортостан Республикаһы законына ярашлы, 18 йәше тулмаған балаларға төндә ата-әсәһеҙ йәмәғәт урындарында йөрөү тыйыла. Көҙгө-ҡышҡы осорҙа "комендант сәғәте" киске сәғәт 10-дан иртәнге 6-ға тиклем дауам итә.**

Өфө хакимиәтенең матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, йәмәғәт урындарына урамдар, стадиондар, балалар һәм спорт майҙансыҡтары, парктар, зыяраттар, ихаталар, шулай уҡ лифттар, подъездар ҡарай. Бынан тыш, балалар вокзалға, аэропортҡа барырға, йәмәғәт транспортында йөрөргә тейеш түгел. Балалар өсөн "комендант сәғәте" балиғ булмағандарҙы яҡлау сараларының береһе булып тора. Ул үҫмерҙәр енәйәтселеген кәметеүгә иҫәпләнгән һәм уларҙың хоҡуҡтарын, мәнфәғәттәрен яҡлауға йүнәлтелгән. "Комендант сәғәте" ҡағиҙәләрен боҙған өсөн шелтә биреү йәки административ штраф һалыу ҡаралған.

## ЯҢЫ СТАНДАРТТАР

**1 июлдә Торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәргә хаҡ артыуға бәйле, Башҡортостанда ағымдағы һәм 2017 йыл өсөн торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәргә яңы стандарттар раҫланды.**

Төбәк стандарттары йыл һайын билдәләнеп, айырым категория граждандар өсөн сығымдарҙы ҡаплауға аҡсалата компенсация һәм субсидия күләмен иҫәпләү өсөн нигеҙ булып тора. Билдәләнгән ҡағиҙәгә ярашлы, субсидия милекселәргә, торлаҡ бинаһын ҡуртымға алыусыларға, торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләүҙәр ғаиләнең дөйөм килеменең 20 процентынан артып киткән осраҡта бирелә (күп балалы һәм тулы булмаған ғаиләләр өсөн - 15, яңғыҙ йәшәгән пенсионерҙар өсөн 18 процент). Төбәк стандарттары Башҡортостандың 841 муниципаль берәмегә өсөн раҫлана. Рәсми мәғлүмәттәр буйынса, бөгөн Башҡортостандың 800 меңдән ашыу граждандары торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн төрлө компенсация ала.

## ХАҠТАР ҠЫҘЫҠҺЫНДЫРАМЫ?

**"Фатирҙар донъяһы" ресурсы мәғлүмәттәре буйынса, өсөнсө кварталда Өфөлә яңы төҙөлгән йорттарға хаҡтарҙың төшөүе теркәлгән.**

Беренсел баҙарҙа бер квадрат метрҙың уртаса хаҡы 11 процентҡа төшкән һәм 56,5 мең һум тәшкил иткән. Фатирҙың уртаса хаҡы дүрт процентҡа тиерлек кәмегән һәм 3,7 миллион һум тәшкил иткән.

Уҙған кварталда Мәскәүҙә яңы төҙөлгән йорттарға хаҡ 11 процентҡа тиерлек төшкән: хәҙер бер квадрат метр өсөн 227,6 мең һәм уртаса фатир өсөн 18,9 миллион һум түләргә кәрәк. Икенсе урында - Санкт-Петербург: бер квадрат метр өсөн 108,2 мең һәм уртаса фатир өсөн 7 миллион һум. Ғәҙәттәгесә, иң арзан ҡала - Магнитогорск, унда фатирҙың хаҡы уртаса 15, йыл башынан 23 процентҡа артҡан (бер квадрат метр өсөн 30,5 мең һәм фатир өсөн 1,5 миллион һум).

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Тире янғанда

❖ 300 грамм туралған һуғанды 1 литр үҫемлек майында алтынһыу төҫкә ингәнсе ҡыҙҙырырға, һөҙөргә, һуғанын ташларға, ә ҡайнар майҙа 300 грамм бал ҡорто балауыҙы иретергә. Май әҙер, уны янған урынға йыш һөртөргә.

### Аҙ ҡанлылыҡ

❖ Бер тигеҙ күләмдә кишер, сөгөлдөр, ҡара торманы ҡырғыстан үткәрергә, һутын һығып алырға, ҡара быялалы һауытҡа ҡойорға һәм башына шыйыҡса быуға әйләнеп осорлоҡ итеп ябып ҡуйырға һәм һауытты 3 сәғәткә талғын утҡа духовкаға ҡуйырға. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 1-әр ҡалаҡ эсергә. Дауалаңыу курсы - 3 ай.

### Арпа

❖ Күҙгә арпа сыҡһа, ҡайнар һыу менән сайылған алоэ япрағын турарға, ярты стакан бүлмә температураһындағы һыу өҫтәргә, 4-5 сәғәт төнәтергә, һуңынан 2-3 сәғәт һайын күҙҙәрҙе йыуырға. Ҡаты итеп бешерегән йәшел сәй ҙә ярҙам итә, мамыҡты сәйгә манып күҙҙәргә һалырға.

### Сөйәл үләне

❖ Халыҡ медицинаһында сөйәл үләне йыш ҡулланыла. Ул ағыулы үҫемлек, шуға ла состав күләмен һаҡлау мотлаҡ. Сөйәл үләнен ҡулланыу ауырлы ҡатындарға, эпилепсия, бронхиаль астма, стенокардия, неврологик ауырыуҙар менән яфаланыусыларға тыйыла. Иренгә һыуыҡ сыҡҡанын белгәс тә көнөнә 2 тапҡыр сөйәл үләне һутын һөртөргә. Тиренең бешкән урынына ла сөйәл үләне һөртәләр. Һыуланып торған экземаға сөйәл үләненең япрағын киптереп, ваҡлап һибәләр.

### Экзема

❖ Тире экземанан таҙарһын өсөн сей картуфты таҙартып ҡырғыстан үткәреп, марля салфеткаға төрөп, тирегә һалырға. 2 сәғәт һайын яңыһына алыштырырға. Ярты стакан картуф массаһына 1 балғалаҡ бал өҫтәргә була.

**Айбикә ЯҠУПОВА әҙерләне.**

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ

# ХАЛЫҠ МЕДИЦИНАҺЫ

Бөгөнгө көн психотерапияһы үҙ тамырҙары менән күп быуаттар буйы тупланған халыҡ тәжрибәһенә барып тоташа. Инандырыуҙың шифалылыҡ сере ябай халыҡта күптәргә билдәле булған. Ул бағымсылыҡ, сихырсылыҡ, өшкөрөү рәүешендә быуаттар буйына ауыҙҙан ауыҙға күсеп килгән.

Башҡорт халыҡ медицинаһында дауалау магияһы киң таралған булған. Дауалау магияһының бер нисә төрө билдәле: им-том итеү, арбау, күрәҙәлек итеү, ҡорбан салыу, ноҡот һалыу, төш юрау, ғибәҙәт ҡылыу, изге урындарға сәйәхәт итеү.

Им-том айырыуса йыш ҡулланылған. Берәйһе сөйәлдән ҡотолорға теләһә, айлы кистә сөйәлен айға күрһәтеп, бер нисә тапҡыр: "Бына минең тәтәйем, бына һиңә тәтәйем", - тип әйтергә тейеш булған. Шуныһы ҡыҙыҡ, күптәр, бигерәк тә бала-сағ, ошондай "дауаланыуҙан" һуң йыш ҡына сөйәлдән ҡотолған. Бында һис шикһеҙ психик тәьҫирҙең көсө хаҡында һүҙ бара.

Кеше бик ҡаты сирләһә, ҡорбан салыу магияһына мөрәжәғәт иткәндәр. Ауырыу кешенең берәй әйберен сығарып ташлау магияһы булған. Йәнәһе, ауырыуы ошо әйберҙә алған кешегә күсә. Ҡорбан салыуға оҡшаған тағы бер магия билдәле. Дауалаусы сирле кеше менән ауырыу "йоҡҡан" ергә барып, арбау һүҙе менән ауырыу әйәһен сирле кешенән сығырға өндәгән. Ауырыу әйәһенең күңелен күреү өсөн уға йоморҡа, энә йәки башҡа берәй нәмә ташлаған. Бынан һуң сирле кеше өйөнә икенсе юл менән, бер кемгә лә һүҙ ҡушмайынса ҡайтырға тейеш булған.

Биҙгәк менән яфаланыусы кеше ас килеш күршеккә бутҡа тултырып, юлда йылға аша кисеп сығып, ҡырға сығырға тейеш булған. Мифология буйынса, кеше ас икән, уның эсенә әйәләшкән биҙгәк тә ас. Билдәле урынға еткәс, бутҡа ергә ҡуйылыу менән ауырыу кеше ауыҙын асҡан. Йәнәһе, ауыҙҙан ас биҙгәк килеп сыға ла, ҡомһоҙланып бутҡаға ташлана. Шул арала кеше артына ла әйләнеп ҡарамайынса, өйөнә юл тота, йәнә йылғаны кисеп сыға. Быныһы ла биҙгәкте алдаштырыу, уның кеше өйөнә юл тапмауы өсөн эшләнә.

Әгәр ауырыу кеше үҙ яфаланыуын берәйһенә һөйләй ҡалһа, уның хәле бер аҙ еңеләйеп ҡала. Ауырыуҙың бер өлөшө тыңлаған кешегә күсә, имеш. Ауылдарҙа хатта ошондай юл менән сирлеләрҙең интегеүҙәрен "үҙҙәренә ҡабул итеүсе" кешеләр ҙә билдәле. Ғәҙәттә, улар абруйлы, һау-сәләмәт кешеләр булған.

Тәтәтеү магияһын башҡарыу өсөн артыш, кейәү үләне, мәтрүшкә, шулай уҡ көкөрт, дары, йәшен атҡандан янған ағас күмеренә ут тоҡандырып, ауырыу кеше йәки уның торлағы тирәләй әйләнеп сыҡҡандар. Шулай итеп, ауырыусыны сир килтергән ендән, ауырыу эйәһенән "ҡотҡарғандар".

Ҡурҡытыу-аптыратыуға бәйле дауалау ҙа булған. Мәҫәлән, биҙгәк менән яфаланған кеше йоҡлап ятҡанда уның юрған аҫтына бесәй һалғандар йәки уға һалҡын һыу һипкәндәр. Ауырыу кешенең битенә ҡапыл сәпәп ебәреү "дауаһы" ла билдәле. Әлбиттә, бындай дауаның нигеҙе психологик тәьҫир итеүгә ҡайтып ҡала.

Һары ауырыуы булғанда муйынға һары төҫтәге мәрйен таҡҡандар, һары төҫтәге балыҡҡа (күлтабан балығына, суртанға), еҙ самауырға ҡарап ултырырға тәҡдим ителгән, көнбағыш сәскәһе ҡайнатмаһы эселгән, йәки уның менән сирлене йыуғандар. Ҡыҙылса, әҫпе менән ауырығанда сирле кешегә ҡыҙыл төҫтәге күлдәк кейҙергәндәр, ул ятҡан урынды ҡыҙыл шаршау менән уратҡандар, ҡыҙыл төҫтәге еләк-емеш (йышыраҡ ҡыҙыл көртмәле) һүтын эсергәндәр.

**Варис ҒҮМӘРОВ.**
**"Башҡорт халыҡ медицинаһы".**
**(Дауамы бар).**

ӘРМЕГӘ КИТӘ ЕГЕТТӘР

# ХӘҮЕФҺЕҘЛЕГЕҢ ХАҠЫНДА...

## иң башта үҙең ҡайғырт!

### Өйҙә һине атай-әсәйең көтә...

...Рядовой Плеханов учение ваҡытында "йәшереп" алып ҡалған бер "холостой патрон"ды казармаға алып килә. Кис, "оружейка"ла автомат таҙартҡан мәлдә ана шул патронды һынап ҡарарға уйлай. Автоматының магазинына ҡуя ла, икенсе бер һалдатты шаяртып алмаҡсы була... "Холостой" патрондан бер ни ҙә булмаҫ, тип уйланым", - ти ул һуңынан хәрби трибунал судында. Асылда, көбөгән терәп атһаң, холостой патрондың һуғыу тулҡыны менән дә кеше үлтереп була икән!.. Әммә, бәхеткә, Аллаһы Тәғәлә эсәге ике урындан өҙөлгән һәм байтаҡ ҡан юғалтҡан әлеге һалдатты ҡатмарлы операция ярҙамында ҡотҡарып алып ҡалырға насип итте. Шуның өсөн госпиталь командованиеһе минә һәм тағы бер хирургҡа сираттағы офицер званиеһын ваҡытынан бер аҙ алдараҡ бирергә Мәскәүгә юллау ебәрҙе...

...Йәш лейтенант Хрящев полк буйынса дежурға баҫа. Ә уның ярҙамсыһы булып сержант Соловьев тора. Лейтенантҡа ни бары егерме бер генә йәш була. Дембелгә йыйынып йөрөгән сержант та уның тиҫтере. Тик. Башҡа һалдаттар йоҡлай, ә офицерҙар өйҙәренә ҡайтып киткән. Дежурҙа китап уҡыу, йә иһә, алмашлап ял итеп алыу урынына, дежурный менән ярҙамсыһы үҙҙәренсә көн үткәрә башлай. Әрмелә "панибратство" тигән нәмә рөхсәт ителмәй, әлбиттә. Әммә инде икенсе йыл хеҙмәт иткән "старик" һалдаттарҙың әрһеҙәрктәре үҙҙәрен кисә генә курсант погондарын лейтенанттыҡына алыштырған бәғзе егеттәр менән тиң күрә. Шул уҡ ваҡытта, йыуашыраҡ (хатта мөшәүерәк) булған ҡайһы бер лейтенанттар, үкенескә, быға юл ҡуйып, ысынында иһә үҙҙәренең абруйҙарын төшөргән осраҡтар ҙа юҡ түгел. Был юлы ла лейтенантҡа "Вася" тип өндәшергә тартынмаған "карт" һалдат Соловьев йәш начальниктың пистолеты менән уйнап алырға була. Вася, һис һүҙһеҙ, магазины патрондар менән тулы пистолетын кобураһынан сығарып, сержантҡа бирә. Пистолет менән уйнай торғас, сержанттың бер патронды патронникка ебәреүен дә абайламай ҡала офицер. Хәҙер инде пистолет предохранителдән дә алынған, йәғни, атыуға әҙер... Бер ни тиклем ваҡыттан, "күпте белгән" йәш офицер сержантҡа нисек дөрөҫ төҙләргә өйрәтә башлай һәм яңылыш курокка баҫа... Соловьев ергә ауа. Пуля тап маңлайға барып тейгән була. Офицерҙы хәрби трибунал суды оҙайлы ваҡытҡа төрмәгә ебәрҙе. Соловьев цинк табутында өйөнә ҡайтып китте... Бына шундай хәлдәрҙе иҫләп, йәш һалдаттарыбыҙҙы һәр төрлө аңһыҙ бәлә-ҡазаларҙан ҡурсалағы килә.



Шулай ҙа улар - башҡаларға ғибрәт булырлыҡ хәлдәр, тип уйлайым.

...Рядовой Кирсанов поста торғанда автоматтан аяғына ата. Онталған һөйәктәрен ялғай-ялғай, әллә нисә операция үткәреп, хәрби травматологтар уның аяғын ҡотҡарҙы. Әммә унда оҙаҡ йылдар буйы уңалмай торған "хроник остеомиелит" тип аталған һөйәк ауырыуы ҡалды. Прокуратура был һалдатҡа ҡарата эш тә ҡуҙғатты. "Членовредительство" тигән статья буйынса. Тик уның ата-әсәһенең насар һаулығын күҙ уңында тотопмо, әллә һалдатты йәлләпме, нисектер уны "яңылыш ҡына атылған" тип таптылыр. Әрме срогын ваҡытынан алда тамамлау ниәте менән ҡылған эше һалдаттың үҙенә оторо ҡаршы булып сығыуын ул, әлбиттә, аңланы... Госпиталдәрҙә оҙаҡ дауаланыу арҡаһында үҙенең призыв һалдаттарынан бер йылға тиерлек һуңғараҡ ҡалып, өйөнә ҡайтып китте ул.

...Самсонов ике-өс ай эсендә өс мәртәбә госпиталгә килеп эләгә. Өсөнһөндә лә... "гимнастеркаға аҡ яға теккән ваҡытта яңылыш ҡына энә йотоу" сәбәпле. Иң тәү килгәнендә, ысынлап та, энәне яңылыш йотҡан, тип ышаныу мөмкин булған хәлдә лә, икенсе һәм өсөнсө осраҡтар, әлбиттә, шик тыуҙырырлыҡ ине. Хирургтарҙа башҡасараҡ фекер йөрөтөүгә этәрә. Йотолған энә ике-өс көндән ҡорһаҡта эшкәртелгән аҙыҡҡа эйәреп, эсәк стенкаһына ҡаҙалмайынса ғына тәбиғи юл менән организмдан сығып та китә. Шул арала "тапҡыр" һалдат та ял итеп ала... Энәнең эсәк буйлап нисек хәрәкәт итеүе көн дә рентген контроль ярҙамында күҙәтелеп бара, әлбиттә. Энә "сығып китеү" менән пациент уны унитаздан ағыҙып ебәрә. Әммә өсөнсө мәртәбәһендә хирургия бүлеге начальнигы дежурҙағы медсестраға "пациенттың бәҙрәфкә барыуын контролдә тоторға" ҡуша. Һөҙөмтәлә, шәфҡәт туташы килеп төшкән энәне күрә. Ә энә... еп менән нык ҡына итеп шырпы бөртөгөнә бәйләнгән... Бына ни өсөн эсәккә ҡаҙалмайынса, енел генә "үтә сығып" йөрөгән икән шундай осло энә! Эшкә ифрат та һүлпән ҡарауы менән дә айырыла ине ул егет. Тап ана шул ялҡаулығы өсөн хеҙмәттән иптәштәре лә яратмаған икән. Ә инде уның энә йотоу осрағы утҡа керәсин һипкән һымаҡ була... Үҙенең хәлен шулай итеп үҙе ҡатмарландырған был егеткә башҡа һалдаттар "шпагоглотатель" тигән исем дә тағалар. Ундайҙар дембель ваҡыты еткәнсе рәхәтлек күрмәй, хатта "молодой"ҙар тарафынан да ҡыйырһытыла башлауҙары мөмкин... Әрмелә хеҙмәт итеп ҡайтҡан егеттәрҙең барыһы ла минең менән риза булыуҙарына иманым камил.

...Ашығыс рәүештә рядовой Тюлькинды ҡабул итеү бүлмәһенә алып киләләр. Һул ҡулына уралған бинты ҡанға уҡмашҡан, беләгендә ҡан туктата торған жгут... Уға ярҙам итеп килгән һалдат бер ҡулына целлофан пакет тотҡан. Пакетта Тюлькиндың ниҙер эшләгән ваҡытта балта менән яңылыш өҙә сабылған урта өс бармағы. Хирургтар яраны эшкәртеп маташҡан арала, госпиталь начальнигы ашығыс рәүештә санитар вертолет саҡырта. Тюлькинды өҙөлгән бармаҡтары менән бергә округ госпиталенә ҡан тамырҙары хирургы ҡарамағына ебәрәләр. Бәхеткә, операция бик уңышлы килеп сыға. 7-8 сәғәт дауамында хирургтар уның өс бармағын да тамыр һәм нервылары менән бергә ялғап ҡуялар. Табиптарҙың эше тураһында яҙыуҙы мин маҡсат итеп ҡуймайым. Тюлькинды әйләнеп ҡайтайыҡ. Ошондай осраҡтарҙа мотлаҡ рәүештә суд-медицина экспертизаһы үткәрелә икәнлеге барыбыҙға ла мәғлүм булһын. Тикшереү һөҙөмтәһендә бына нимә асыҡлана: рядовой Тюлькин һул ҡулының бармаҡтарына балта менән... ике мәртәбә үҙе сапҡан икән! Тәүҙә ике бармағын, һуңынан өсөнсөһөн "яңылыш ҡына" сабып өҙгән... Эш шуның менән генә бөтһә, бәлки, был ваҡиға "шыма ғына" үтеп тә китер ине. Хәрби прокуратура һалдатты йәлләр ҙә ине, тип уйлайым. Әммә... Инде ҡулына "йәбешеп" уңала башлаған бармаҡтарының бәйҙәрен үҙаллы сисеп, тырнап, яраларына аңлы рәүештә инфекция индереп, табиптарҙың бар тырышлығын юҡҡа сығара Тюлькин! Уның "эше" артабан ни менән барып бөткәне минә мәғлүм түгел. Һәр хәлдә, яҡшы түгелдер, тип уйлайым.

...Рядовой Джанбулатов Эркен. Мыҡты кәүҙәле шул ҡаҙаҡ егете һаман да күҙ алдымда. Намыҫлы, эш һөйөүсән, ябай ауыл малайы. Әлеге лә баяғы, дембелгә бөгөн-иртән ҡайтам, тип торған был һалдат бер "молодой"ҙың салбар ҡайышын һорап алған һәм уға үҙенекен ялғаған... "Үҙ иркем менән үләм" тигән ҡаҙаҡса яҙылған ҡағыҙ табыла уның кесәһенән. Доктор булараҡ, ана шул ваҡиғалар эсендә мин дә йөрөйөм. Ул ғына ла түгел, командирға шул бәләкәс кенә ҡағыҙ кисәгендәге яҙыуҙы тәржемә итеп тә бирҙем. Часта ҡаҙаҡса белгән башҡа кеше табылманы, әллә ни, һалдат йыйып барған бер ҡосаҡ хаттарҙы урыҫ теленә тәржемә итергә ҡуштылар. Ауырлыҡ менән, хәлемдән килгәнсе тәржемәләнем... Һөйгән ҡыҙы икенсе егеткә кейәүгә сыҡҡан булған икән...

### ШУЛАЙ ИТЕП...

**Фамилия һәм исемдәр, әлбиттә, үҙгәртелде, әммә былар барыһы ла булған хәлдәр. Егеттәрҙе артыҡ ҡурҡытыу ниәте менән дә яҙманым был мәҡәләне, ә үҙ ғүмерең, һаулығыңа һаҡсыл һәм ифрат та игтибарлы булыуға йүнәлеш биреү маҡсаты менән бәйән иттем. Ҡәҙерле егеттәр, милләттәштәрем, яҡташтарым, ата-әсәләрегеҙ һеҙҙең имен-һау әйләнеп ҡайтыуығыҙҙы көтә. Ғүмерегеҙ тик башлана ғына. Гражданкалағы "Хәүефһеҙлек техникаһы" тип аталған нәмә әрмелә лә бар. Хатта унда был мәсьәлә күпкә юғарыраҡ кимәлгә ҡуйылған, тиһәм дә хаталанмайымдыр. Хәҙерге ваҡыттағы ҡатмарлы ҡорал, техника менән бәйләнешле һәр төрлө занятиелар алдынан мотлаҡ үткәрелә торған хәүефһеҙлек буйынса инструктаждарҙы һәр саҡ иғтибар менән тыңлағыҙ һәм унда әйтелгәндәрҙе һис һүҙһеҙ үтәгеҙ. Шул уҡ ваҡытта үҙегеҙҙең мосолман икәнлегегеҙҙе бер ҡасан да иҫегеҙҙән сығармағыҙ. Бер эште лә "Бисмиллаһ" әйтмәйенсә башламағыҙ. Бына шул саҡта хеҙмәтегеҙҙең срогы тулыу менән имен-һау көйөнсә туғандарығыҙҙы, яҡындарығыҙҙы ҡайтып күрерһегеҙ, иншалла. Ә кемделер һөйгән ҡыҙы көтмәне икән, быға һис тә ҡайғырмағыҙ, киреһенсә, шатланығыҙ ғына. Һалдатын әрменән көтә алмаҫтай ҡыҙ менән тормош ҡороп та, ғүмер буйы уның менән бергә йәшәүҙән кеше барыбер әллә ни отошта булмайҙыр...**

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ,**
**яҙыусы, отставкалағы подполковник.**
**(Аҙағы. Башы 41-се һанда).**

### "Самострел"дар

Ә түбәндә һөйләнәсәк хәлдәр бер аҙ икенсе юҫыҡтараҡ. Әгәр юғарыла бәйән ителгән ваҡиғалар һалдаттың алабарманлығы һәм һаҡһыҙлыҡ һөҙөмтәһе булһа, былары - күрәләтә, йәғни аңлы рәүештә үҙҙәренә бәлә-ҡаза сәбәбе тыуҙырыусылар хаҡында. Әрмебеҙҙең бәсен төшөрмәү ниәтенәндәр, һирәк-һаяҡ була торған ошо кире яҡ тураһында ошоға са яҙғаным юҡ ине. Тәүҙән уҡ әйтеп ҡуйыйым, бындай күренеште, бәхеткә, яҡташтарыбыҙ араһында осраҡҡаным юҡ.

✓ *Венгрияның баш ҡалаһы Будапештҡа ла башҡорттар исем ҡушҡан, тип һөйләйҙәр. Башҡорттар буҙа әҙерләгәндәр ҙә "Буҙа беште, килегеҙ!" тип, ҡунаҡҡа саҡырғандар һәм был һүҙ ҡалаға исем булып йәбешеп ҡалған, тиҙәр.*



ХАҠ ТАМЫРЛЫБЫҘ

**Күптән түгел миңә Башҡортостан Республикаһы Фәндәр академияһының социаль культурология һәм антропология үҙәге етәксеһе Юлдаш Йосоповтың "Юрматыларҙың генографияһы" тип аталған лекцияһын тыңларға тура килде. Йәш ғалим үҙенең сығышында башҡорт милләтенә ҡараған ырыуҙар вәкилдәренең ҡандарына ентекле анализ үткәрелеүе һәм уларҙың бер-береһе менән ҡатнашып, аралашып йәшәүе һөҙөмтәһендә уртаҡ күрһәткестәре булыуын, ә бына башҡаларҙан айырмалы юрматыларҙың ҡандары таҙа килеш ҡалыуын әйтеп, быға ғәжәпләнеүен дә белдерҙе.**

# ҠАНЫҢ НИҢӘ ТАҘА, ЮРМАТЫ?



Ысынлап та, юрматылар айырым бер утрауҙа йәшәмәй, башҡа милләттәштәре кеүек үк, Көньяҡ Уралды төйәк итеп, шунда ғүмер кисерә. Башҡа ырыуҙарҙан да кәләш әйттерә, уларға ҡыҙ бирә. Ә бына ҡандары нисек сағыштырмаса таҙа булып ҡалған һуң? Был һорау, әлбиттә, мине лә ғәжәпкә ҡалдырҙы һәм башыма ҡылт итеп бәләкәй саҡта ишеткәндәрем иҫкә төштө.

Минең олатайым Шәйәхмәт Багаев тирә-яҡҡа шөһрәтле тип даны таралған мулла булды. Ул фарсы, ғәрәп телдәрен дә бик яҡшы белеп, шул телдәрҙә яҙылған күп һанлы китаптарынан доғалары менән бергә беҙгә әкиәттәр, хикәйәттәр ҙә уҡып ишеттерә ине. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ул китаптарҙың береһе лә юҡ - олатайым, тәләфләнеп, әрәм-шәрәм булып йөрөрҙәр, тип, үҙе үлгәс, һандыҡҡа тултырып, башы осона күмергә ҡушҡайны, һәм шулай эшләнеләр ҙә. Ул беҙгә уҡыған бер хикәйәт юрматыларҙың тарихына ҡағыла ине һәм унда яҙылғандарҙы ун йыл самаһы элек башҡа берәүҙең ауыҙынан да ишеттем. Ишембай районының Һайран ауылында йәшәүсе Ғаяз Яҡупов исемле уҙаман мулла олатаһының йәш саҡта ғәрәп илдәренең береһендә белем алыуын һәм унан алып ҡайтҡан ҡулъяҙмаларының береһендә юрматыларға ҡағылышлы хәл-ваҡиға һүрәтләнеүен әйтеп, уның эстәлеген һөйләп биргәйне. Унда ла мин олатайымдан ишеткәндәр һүҙмә-һүҙ тип әйтерлек ҡабатлана, тик тауҙарға ҡағылышлы ерендә генә айырма бар.

Бик борондан юрматылар Уралтау ҡуйынын төйәк иткән, һунар итеп, мал аҫрап, иген игеп, бик иркенләп донъя көткән, тиеберәк башлана ине ул хикәйәт. Шулай байлыҡта-муллыҡта рәхәтләнеп йәшәп ятҡанда Юрматы иленә йот килә. Өс йыл рәттән күктән бер тамсы ла ямғыр төшмәй, бар йәшеллек кибеп, тирә-йүн ҡара ергә әйләнә. Аяуһыҙ ҡояш нуры мул һыулы йылғаларҙы ҡорота, ағастарҙы ҡоро һөлдәгә ҡалдыра. Аслыҡтан көтөү-көтөү малдар ҡырыла. Һунар итерлек ҡошкейек ҡалмай. Үҙҙәренә лә үлем ҡурҡынысы янауын, тотошлайы менән юҡҡа сығасаҡтарын аңлаған Юрматы халҡы тыуған төйәген ташлап китергә мәжбүр була. Йәшеллек эҙләп көньяҡ-көнсығышҡа ҡарай юл тота улар. Шыҡһыҙ ҡаҙаҡ далаларын да үтеп, ярты йыл тигәндә Һиндостан сигенә барып сығалар. Бындағы йәшеллек, муллыҡ әсир итә килеүселәрҙе һәм улар ошо ерҙә төпләнергә ҡарар итә.

Йылдар артынан йылдар, быуаттар артынан быуаттар үтә. Юрматылар ошо ергә яраҡлашып, джунглиҙарҙа һунар итеп, мул һыулы йылғаларында балыҡ тотоп, йәшелсә-емеш үҫтереп, мал аҫрап донъя көтә. Өҫтәренән тире-күн кейемдәр, ҡулдарынан уҡ-һаҙаҡ, һөңгө төшә. Еңелсә генә кейенеп, хатта һунарға ла ағыулы уғын ауыҙға ҡабып ҡына атыусы көпшә тотоп йөрөй башлайҙар. Аттарҙы ҡулға өйрәтелгән филдәр, тарыбойҙайҙы дөгө алыштыра...

*(Ошо урында башыма, был хикәйәт дөрөҫлөккә яҡындыр, тигән уй килде. Әгәр әҙәм балаһы күреп аралашмаһа, ҡулланмаһа, ер аяғы ер башындағы кейек-хайуандарҙы фил, маймыл, тутыйғош, дөгө тип үҙенсә исем ҡушмаҫ ине. Африкала йәшәмәгәс, ундағы хайуандарҙың, мәҫәлән, жираф, бегемот һәм башҡаларҙың башҡортса исемдәре юҡ бит. Тимәк, башҡорттоң йәшәйешендә ҡасандыр юлбарыҫы ла, маймылы ла булған).*

...Ваҡыт үткән һайын элеккеләр аҡрынлап хәтерҙән юйыла. Юрматылар ҙа үҙҙәренең ҡайҙан булыуҙарын, был тарафтарға нисек килеп сыҡҡандарын онота, үҙҙәрен мәңге ошо ерҙә йәшәгән кеүек тоя башлай. Бер заман ырыу башлығы Абдулла өс көн рәттән бер үк төш күрә. Ап-аҡ кейемдәге, аҡ һаҡаллы ҡарт янына килеп: "Һеҙ башҡорттар, ә башҡорт иле бынан бик алыҫта, Урал тауы тарафында. Унда һеҙҙең ата-бабаларығыҙҙың һөйәктәре ята. Уларҙың рухы һеҙҙе саҡыра. Ҡайтығыҙ үҙ илегеҙгә", - ти. Ырыу башлығының уны нисек табырға тигән һорауына ҡарт: "Унда көмөш һыулы Аҡ йылға булыр. Ярында береһе йөрәкте, икенсеһе ҡатын-ҡыҙҙар күкрәген хәтерләткән, өсөнсөһө иң бейеге булып, түбәһе күккә ашып торған дүрт тау булыр. Бына шунда юрматыларҙың тыуған төйәге, башланғысығыҙ", - тип Урал тауҙарына юл күрһәтә (Бында дүртенсе тау нисек һүрәтләнеүе хәтерҙә ҡалмаған). *(Ә бына Ғаяз уҙаман тауҙар хаҡында башҡасараҡ, йәғни ҡарт: "Унда өс тау булыр. Береһенән (Торатау) ҡалған икәүһенең түбәһе күренеп торор. Ә ул икәүҙән (Арҡыялан менән Алатау) бер-береһе күренмәҫ", - тип әйткән тигәйне...)* Ҡарттың әйткәндәре Абдулланың башынан сыҡмай һәм ул ныҡлы ҡарарға килеп, был тауҙарҙы эҙләп табыр өсөн сапҡынсылар ебәрә. Улары байтаҡ ҡына ваҡыттан һуң әйләнеп ҡайтып, тауҙарҙы күреүҙәрен, әммә уның тирәяғында мадьяр тигән халыҡтарҙың йәшәүен әйтә. Бер-береһен бүлдереп, ундағы байлыҡ-муллыҡ, гүзәллек хаҡында бәйән итә. Абдулланың да шул яҡтарҙы бик тә күрәһе килеп йөрәге ашҡына, күңеле тынысһыҙлана башлай һәм ул ырыуҙаштарына тиҙ арала йыйынып, юлға сығырға бойороҡ бирә.

Тормош кәрәк-яраҡтарын филдәргә артмаҡлап, мал-тыуарҙарын әйҙәп, юлға сыға улар. Ҡаҙаҡ далаларына еткәс, әйберҙәрен дөйә, аттарға йөкмәтәләр. Саҡрым-саҡрым юлдар үтеп, ниһайәт, Суҡан йылғаһы (Яйыҡтың боронғо исеме) буйына килеп етәләр. Йылғаның икенсе ярында, артабан үткәрмәҫкә теләп, уларҙы урындағы юрматыларҙың ғәскәре ҡаршы ала. Күп ҡан ҡоймаҫ өсөн ике яҡтан да унар яугирҙы бер-береһенә ҡаршы баҫтырырға булып, еңгән осраҡта ғына юрматылар йылғаны кисеп сығып, артабан юлдарын дауам итә, теләгән ерендә төпләнә ала, тип һөйләшеп килешә яҡтар.

Ситтән килгән ҡәүем яугирҙарының ҡулында йәйә-уҡ, һөңгө-фәлән күрмәгәс, тиҙ арала ҡыйрата һалырбыҙ, тип уйлағандарҙыр, күрәһең, урындағы юрматылар. Әммә улар ҡаршы сығып, уҡтарын тоҫҡаған арала Һиндостан юрматылары ауыҙҙарына көпшә ҡаба һалып, ағыулы уҡтары менән тегеләрҙең унауһын да түшәп һала.

Бына шулай ҡайтып төпләнә Һиндостан юрматылары ата-бабалары төйәгенә. Был хәл VIII-IX быуаттарҙа булған тиеберәк хәтерҙә ҡалған. Артабан улар урындағы юрматылар менән һыйышып, бер-береһенә ҡыҙ биреп, ҡоҙалашып йәнәш йәшәй. Мәҫәлән, Һиндостандан ҡайтҡан юрматы бейенең улы урындағы юрматылар башлығы Солтандың ҡыҙы Мәрипәгә өйләнә. Тап улар күсеп китә лә инде Венгрия тарафтарына һәм үҙҙәре менән 2 мең ырыуҙашты бергә алып китә. Улар менән китеүселәр араһында йәнәй ырыуы башҡорттары ла була. Башҡорттарҙың Венгрияға барып урынлашыуы һәм уларҙың артабанғы тормошо хаҡында Әхмәтзәки Вәлиди бик асыҡ яҙып ҡалдырған.

Ысынмылыр-бушмылыр, Венгрияның баш ҡалаһы Будапештҡа ла башҡорттар исем ҡушҡан, тип һөйләйҙәр. Башҡорттар буҙа әҙерләгәндәр ҙә Дунайҙың икенсе ярында йәшәүселәрҙе "Буҙа беште, килегеҙ!" тип, ҡунаҡҡа саҡырғандар һәм был һүҙ ҡалаға исем булып йәбешеп ҡалған, тиҙәр.

Ҡулымда рәсми документтар булмағас, үрҙә яҙылғандарҙы ысынлап та булған хәл, тип әйтә алмайым. Дөрөҫ булһа, бәлки, бер заман улары ла табылыр. Әммә юрматыларҙың башҡа башҡорт ырыуҙары менән бик аралашмай, сағыштырмаса таҙа ҡанлы булыуҙары әйтелгән хәл-ваҡиғаларҙың дөрөҫлөгөн раҫлаған кеүек миңә. Сөнки башҡаларҙан айырылып, байтаҡ ғүмер айырым йәшәгәндә генә таҙа ҡанлы булып ҡалырға мөмкиндер.

**Мөҙәрис БАГАЕВ.**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

Тарих фәндәре докторы Н. Мәжитов иртә тимер быуатына ҡараған ҡомартҡыларҙы тәрән өйрәнеп, шундай фекергә килә: урман һәм урман-далалы Көньяҡ Уралдағы иртә тимер быуатына ҡараған археологик ҡомартҡылар б.э.т. VI быуаттан алып беҙҙең эраның IV быуатына тиклем йәшәгән савромат-сармат ҡәбиләләренән ҡалған тигән хата фекер һаман да йәшәп килә һәм был төшөнсәләр миҫалдар рәүешендә килтергәндә савромат мәҙәниәте тип (б.э.т. VII-IV быуаттар), иртә сарматтыҡы тип (б.э.т. IV-II быуаттар), урта сарматтыҡы тип (б.э.т. II-I быуаттар), һуңғы сарматтыҡы тип (б.э.II- IV быуаттар) алына. Н.А. Мәжитовтың хеҙмәтендә ("Башҡорт халҡының тарихы", 2009, 168-2003-сө биттәр) боронғо һәм урта быуаттарҙағы Көньяҡ Уралдың тарихы буйынса ғилми тикшеренеүҙәр килтерелә. Ғалим был хеҙмәтендә боронғо башҡорт этносының барлыҡҡа килеү һәм үҫеш процестарын өйрәнеп башҡорттарҙың автохтон (ерле) халыҡ булыуы хаҡында гипотезаһын нигеҙләй. Ысынлап та, көнсығышҡа табан савромат-сармат ҡәбиләләре ерҙәре нисек кенә индермәй (алып ташларға был һөйләмде). Шуға күрә Урал-Волга буйында табылған археологик ҡомартҡыларҙы сармат-савромат ҡәбиләләреке тип һанау мәсьәләһе бәхәсле (асыҡ) көйө ҡала (93, 173-сө бит). Авестаның бер гимнында савроматтарҙың телгә алыныуы уларҙың Иран халыҡтары менән бишектәш булыуы хаҡында һөйләй (Смирнов, 1964, 194-се бит). Күсмә тормош менән йәшәүсе, күпләп йылҡы малы үрсетеүсе иран телле сарматтар б.э.т. VIII быуаттан башлап Кавказ тауҙары менән Дон, Волга йылғалары араһында йәшәгән. Б.э.т.III быуатта сармат ҡәбиләләренең Ҡара диңгеҙҙең төньяғына күсенеүе күҙәтелә. Сарматтарҙың бер өлөшө булған сирактар һәм аорстар Кубанға һәм Төньяҡ Кавказға китә, икенсе бер өлөшө б.э.т. II быуатта өс ырыу - языгтар, роксоландар, сарматтар составында Днепр йылғаһы бороломаһындағы Никополгә юллана. Улар илле йыл һуҙымында Дондан Дунайға тиклем арауыҡҡа урынлашып, 500 йыл самаһы Ҡара диңгеҙҙең төньяғында хакимлыҡ итә (14, 45-се бит).

Скифтарҙың күршеләре булған савроматтар хаҡында боронғо грек тарихсыһы Геродот шулай ти: "Танаис (Дон) йылғаһы аръяғында - был ерҙәр скифтарҙыҡы түгел - ер биләмәләре савроматтарҙыҡы" (Геродот, Тарих, 192-194-се биттәр). Страбон үҙенең китабында (480-481-се биттәр) һәм (209, 112-се бит) түбәндәгеләрҙе яҙа: "Әгәр ҙә Каспий диңгеҙенә инһәң, уң яҡта скифтар һәм сарматтар, улар Европа илдәре менән сиктәш, Танаис менән был йылға араһында көнсығыш скифтар, биләмәләре Көнсығыш диңгеҙгә һәм Һиндостанға тиклем һуҙылған номадтар йәшәй. Азияның Дон йылғаһы йүнәлешендә йәшәүсе Скифияға килеп, Диодор әйтеүенсә, Сицилийскийҙың ҡушыуы буйынса унда йәшәүселәрҙең йәнен ҡыйып дан ала. Скифтар юҡҡа сыға (97, 36-сы бит). Ғалим Акания Ширакации VII быуатта түбәндәгеләрҙе теркәй: "Сарматия үҙҙәренең Европа өлөшөнән Рипия (Рифей, Уралтау) тауҙарының көнсығыш һырттары, Танаис (Дон), Меотис (Аҙау) диңгеҙе менән айырыла, Кавказ тауҙары буйлап, Грузия һәм Албания буйлап Каспий диңгеҙенә тиклем һуҙыла. Сарматияла йылғалар күп, уларҙың береһе 70 ҡултығы булған Этиль йылғаһы ла бар, ул йылға буйында Басил халҡы һаҡлана" (203, 49-сы бит). Дон артында һәм Әстерхан далаларында Сарматтар һәм Савроматтар йәшәй башланы (97, 176-сы бит). V быуат аҙағында сарматтар хаҡында тарих өнһөҙ. Европа авторҙары Марцеллин һәм Иордан, боронғо авторҙарҙың береһе лә үҙҙәренең хеҙмәттәрендә сарматтарҙың алтыны, боландарҙы ҡәҙерләүе хаҡында һис юғы беҙҙең эраның I быуатында ла бер ниндәй мәғлүмәт яҙмай.

**(Дауамы бар).**

✓ ЮНЕСКО-нан Мәскәү ҡалаһына саҡырыу булды. Мәскәүҙә Рәсәйҙе күрһәтә алырҙай фольклор коллективын һайлап алырға кәрәк ине. Төрлө рус коллективтары араһынан беҙҙе һайланылар.



# ХАЛҠЫБЫҘ

## сит ил тамашасыларын

**Мәҙәниәт һәм сәнғәт өлкәһе нисек кенә юғары үҫешкән, академик, классик алымдар юғары баһаланған, сит ил, сит тел мәҙәниәте өлгөләрендә дан яуланған, мәртәбә алған хәлдә лә, беҙ, ябай тамашасы, барыбер ҙә халыҡсанлыҡҡа ынтылабыҙ. Ни өсөн шулаймы? Сөнки ул беҙгә яҡын, ул - үҙебеҙҙеке, беҙ ундағы һәр һүҙҙе, һәр ымды аңлайбыҙ, тоябыҙ. Халыҡсанлыҡ бер ваҡытта ла иҫкереүгә дусар булмаған төшөнсәләрҙең береһе. Был төшөнсәнең атамаһы иһә - фольклор, халҡыбыҙҙың милли фольклоры. Өфө ҡалаһының "Мираҫ" фольклор йыр һәм бейеү ансамбле тап ошо иҫкермәҫ һәм һайыҡмаҫ тереһыуҙы тапҡан да инде. Улар был рухи мираҫ менән республикабыҙҙы ғына түгел, сит илдәрҙе лә хайран итеп ҡуя. Был хаҡта һәм башҡа ижади эшмәкәрлек хаҡында уларҙың үҙҙәренән ишетәйек. Редакциябыҙ ҡунаҡтары: "Мираҫ" фольклор йыр һәм бейеү ансамбленең етәксеһе, Башҡортостандың халыҡ артисы Илүзә НОҒМАНОВА, ансамблдең ир-егеттәр труппаһы репетиторы, хореограф Марат СОЛТАНОВ һәм вокал буйынса солист Салауат МӨХӘМӘТЙӘНОВ.**

**▸ Бөгөнгө көндә шундай ҙур һәм көслө коллективтарҙың береһе булған "Мираҫ" ансамблен Бөйөк Британияла беләләр, ә үҙебеҙҙең республикала артыҡ танып еткермәйҙәр. Был ансамблдең Өфө ҡалаһынтыҡы булыуы менәнме, әллә сағыштырмаса йәш коллектив булыуығыҙ менән бәйлеме, әллә башҡа сәбәптәр бармы?**

**И. Ноғманова:** Әлбиттә, был беҙҙең баш ҡаланыҡы булыуыбыҙға ла бәйлелер. Күберәген баш ҡаланың, республика кимәлендәге сараларҙың уртаһында булабыҙ. Әммә шул уҡ ваҡытта сит өлкә, сит ил тамашасыһына ла яҡшы танышбыҙ инде хәҙер. Үҙендә бер нисә ижади төркөмдө туплаған һәм 120 артистан торған берҙән-бер ансамбль ул "Мираҫ". Бейеүселәр, хор, оркестр һәм халыҡ инструменттары ансамбле дөйөм бер олуғ көс, камил театр булып тора.

Ансамблебеҙ йәш, уның ойошторолоуына быйыл ун йыл була. Заманында халыҡ традицияларын табыу, йыйыу, үҫтереү һәм йәш быуынға тапшырыу маҡсаты менән ойошторолған коллектив бөгөн дә үҙ бурысын шул маҡсатҡа ярашлы атҡара. Уның исеме лә - "Мираҫ", йәғни үҙеңдән һуң килгәндәргә тапшырыр, ҡалдырыр ҡиммәт, тигәнде аңлата бит.

**М. Солтанов:** "Мираҫ" баш ҡалабыҙҙы, республикабыҙҙы сит өлкәләрҙә, илдәрҙә юғары кимәлдә күрһәтә һәм таныштыра ала торған бер матур өлгө ул. Уның репертуарында етмештән артыҡ номер бар. Һәм был номер ябай йыр йәки бейеү генә түгел, ә башҡорт халҡының, шулай уҡ төрлө милләт вәкилдәренең фольклор нигеҙендәге тормош-көнкүреш күренеше лә. Ысынында, беҙҙе беләләр һәм танйыйҙар ул, Өфөлә үткән концерттарҙа залда алма төшөр урын булмай. Сөнки бөгөнгө фольклор йола күрһәтеү генә түгел, ә халыҡтың рухи хазинаһын, фәлсәфәһен сағылдырыусы юғары сәнғәт тә.

**▸ Ысынлап та, "фольклор" тигән һүҙ ҡайһы бер тамашасыны өркөтөргә мөмкин. Һәм күп осраҡта шулай була ла. Беҙ был һүҙҙән, нисек кенә оят булмаһын, боронғолоҡ, ялҡытҡыс оҙайлы йолалар сынйырын көтәбеҙ, ә күңел "шоу" һорай һәм шул сәбәпле касса төбөндә торған тамашасы икенсе концертты һайлап та ҡуя. Ә һеҙҙә "алма төшөр урын булмай", тиһегеҙ. Сер нимәлә бында? Ниндәй яңы алымдар ҡулланаһығыҙ халыҡты йәлеп итеү, тамашасыға ҡыҙыҡлы булыу өсөн?**

**И. Ноғманова:** Заманға ярашлы бөтә алымдарҙы ла ҡулланабыҙ. Халыҡ йырҙарын яңыса аранжировкалайбыҙ, көйҙәрҙе асылын боҙмайынса эшкәртәбеҙ, йолаларҙы лирик биҙәлештәр менән байытабыҙ, костюмдарыбыҙҙың сағыу булыуына өлгәшәбеҙ, бейеүҙәребеҙҙең йыр менән оҙатылыуы ла бер илаһи күренеш тыуҙыра. Хатта ҡурайҙы ла беҙ үҙебеҙсә яңғыратабыҙ, тиергә мөмкин.

**С. Мөхәмәтйәнов:** Фольклор нигеҙендә башҡарылған тамашалар ысынында тулыһынса бер театрлаштырылған тамаша булып китә ул, заманса биҙәлештәр, бер аҙ стилләштереүҙәр менән тулыландырылып, үҙенсәлекле шоу төҫөн ала. Ике сәғәттән ашыу ваҡыт эсендә халыҡты ялҡытмау һәм икенсе концертҡа килерлек теләк тыуҙырыу өсөн уның рухи зауығын ҡәнәғәтләндерергә тырышабыҙ. Бында ул йыр ҙа тыңларға, бейеү ҙә күререгә, оркестр башҡарыуын да ишетергә, башҡа мәҙәниәттәр донъяһын да өйрәнергә һәм донъяуи мәғәнәгә торошло фәһем алып ҡайтырға ла тейеш. Эйе, күңел асып ҡына түгел, ә нимәлер белеп, эске донъяһын байытып ҡайтырға тейештәр беҙҙең концерттарҙан. Беҙ бит бөгөнгө тамашасыны үҙебеҙҙең үткән йәшәйеш, тарих ептәре менән тоташтырып торабыҙ.

**▸ "Этно" тигән һүҙ модаға инеп китте. Һәм шул шауҡымға эйәреп, фольклорҙы боҙоп, танымаҫ хәлгә индереп сәхнәгә сығарған күп кенә төркөмдәр барлыҡҡа килде. Һеҙҙә фольклорҙың төп нөсхәһенән ситләшмәү эштәрен кем контролдә тота?**

**М. Солтанов:** Беҙҙә фольклорға нигеҙләнгән бер номер ҙа тикшереүһеҙ үтмәй. Ә ул тикшереүҙе, әлбиттә, бары тик был өлкәлә белеме булғандар ғына үткәрә. Был йәһәттән беҙ уңдыҡ: методик бүлек етәксеһе Юлай Ишбулды улы Ғәйнетдиновтың әле "Хазина" тапшырыуын алып барғандан тупланған иҫ киткес бай фольклор архивы бар. Ул заманында был мираҫты ауылдар буйлап йөрөп йыйып алған. Тимәк, халыҡтың үҙенән яҙҙырып, һөйләтеп, уйнатып ҡаралған өлгөләр былар. Ул өлгөләрҙе тотоп ҡына уйлап сығарып булмай.

**И. Ноғманова:** Фольклорҙы артыҡ стилләштереүгә мин үҙем дә ҡаршымын. Стилләштерҙеңме, фольклор колоритын, оригиналлеген юғалта. Бында бик һаҡ булырға кәрәк. Тамашасы арбалһын да, шул уҡ ваҡытта боронғолоҡ менән бәйләнешкә инеүен дә аңлаһын. Быңа ошо бәйләнеш ята ла инде "этно" төшөнсәһендә лә.

**С. Мөхәмәтйәнов:** Эйе, бөгөнгө тамашасыға ҡыҙыҡлы булыу өсөн һәр кем үҙ алымдарын ҡуллана һәм шул сәбәптән фольклорҙы боҙоуға барғандар ҙа бар. Вокал өлкәһендә лә юҡ түгел ундайҙар. Тик беҙҙең тамашасы бик уяу. Улар шундуҡ тауыш күтәрә, башҡарыусының күҙенә тура ҡарап әйтергә лә мөмкин. Барыбер ҙә халыҡ араһында белемле, халыҡ ижадын аңлаған, өйрәнгәндәр күп, оло быуын вәкилдәрен дә алдап булмай. Шунлыҡтан, фольклорға үҙ белдеге менән тотонорға ҡыйыулыҡ итеүселәр һирәгәйҙе хәҙер. Етмәһә, яһалмалыҡ менән алдырып та булмай бит ул.

**▸ Һуңғы ваҡыттағы сәфәрегеҙ - Бөйөк Британия. Унда ҡайһылай барып эләктегеҙ, ситтә һеҙҙе нисек ҡабул иттеләр, беҙҙең фольклор нисегерәк баһалана? Башҡаларҙа бармы ул "фольклор" тигән төшөнсә? Ҡыҫҡаһы, сәфәр тәьҫораттары менән бүлешәйек әле.**

**И. Ноғманова:** Иң башта ЮНЕСКО-нан Мәскәү ҡалаһына саҡырыу булды. Мәскәүҙә Рәсәйҙе күрһәтә алырҙай фольклор коллективын һайлап алырға кәрәк ине. Төрлө рус коллективтары араһынан беҙҙе һайланылар. РФ Мәҙәниәт министрлығы етәкселәренең беҙҙең сығыштарҙы ҡараған бар ине, былтыр улар Мәскәүҙә сығыш яһағанда ла килгәйнеләр. Беҙ бит башҡорт халҡының милли фольклорынан тыш, башҡа халыҡтарҙың да милли мәҙәниәтен пропагандалайбыҙ. "Мираҫ"тың шулай универсаль, күп яҡлы репертуарын баһалап та, шундай ҙур һәм яуаплы сәфәргә ебәрҙеләр ҙә инде.

**М. Солтанов:** Беллингемдың (Бөйөк Британия) йыл да үтә торған Донъя бейеүҙәре фестиваленде ҡатнаштыҡ беҙ, был сара илдә икенсе тапҡыр үткәрелә. Беҙҙе унда яҡшы таныштарын ҡаршы алғандай ҡабул иттеләр. Сөнки фестивалде ойоштороусылар беҙҙең ижад менән интернет аша танышып, үҙҙәре лә беҙҙе һайлап, сараға саҡырырға ниәтләгән булғандар икән. Бары тик туранан-тура сыға алмай, Мәскәү аша саҡыртҡандар. Англия, Франция һәм Германия илдәре беҙҙе "бүлешә" алмай, йәрәбә тартҡан һәм йәрәбә буйынса Англияға эләккәнбеҙ.

**С. Мөхәмәтйәнов:** Фестивалдә Мартиника, Мексика, Чили, Бөйөк Британия, Рәсәй, Корея һәм Төньяҡ Кипр илдәре үҙ фольклоры менән сығыш яһаны. Әлбиттә, һәр береһенең сығышы үҙенсәлекле булды, әммә беҙгә еткәне булманы. Быны беҙ тамашасының нисек ҡабул итеүенән генә лә әйтә алабыҙ. Хатта башҡа илдәрҙең артистары үҙҙәре лә беҙҙе эркелешеп килеп ҡарай торғайнылар. Ә зал инде беҙҙе һәр ваҡыт аяғүрә баҫып ҡаршыланы, шулай уҡ алҡыштарға күмеп оҙатты. Хатта киләһе йыл Чилиҙа сығыш яһарға саҡырып ҡалдылар.

**И. Ноғманова:** Башҡорт бейеүҙәренән "Тирмә янында", "Йәшлек" кеүек күмәк бейеүҙәрҙе алып барҙыҡ. Рәсәй вәкилдәре булараҡ, рус мәҙәниәтен дә күрһәттек. Шулай уҡ башҡорт халыҡ йырҙары, башҡорт ҡурайы таң ҡалдырҙы инглиздәрҙе. Мин сәхнә артынан тамашасының реакцияһын, күҙ ҡараштарын күҙәтеп торҙом һәм уларҙың әҫәрләнеп, онотолоп ултырыуын аңғарҙым. Етмәһә, ҡурай үләнен алып сығып, күҙ алдарында унан музыка ҡоралы яһап алып уйнап та күрһәтте Юнир Һағынбаев. Ышанмайынса, сығып тотоп ҡарайҙар. Хатта сәхнә артына ла эҙләп килеп, костюмдарыбыҙҙы, биҙәүестәребеҙҙе тикшереп сыҡтылар. "Башҡорттар ҡайҙа йәшәй ул?" тип һорайҙар,



✓ ***Әле мексикандар менән һөйләшеүҙәр алып барылды. Улар беҙгә үҙҙәренең бейеүен һалырға теләй. Ә беҙ уларҙың беҙҙең башҡорт бейеүен өйрәнеүен шарт итеп ҡуйҙыҡ. Бик теләп риза булдылар.***



"Уралда", тиһәк, аңлағандай булып баш һелкәләр.

**М. Солтанов:** Фестивалдә ҡатнашыусы һәр коллектив бер кисте ниндәйҙер сара ойоштороға тейеш ине. Беҙ был юлы ла һәр кемдең иҫендә ҡалырлыҡ эш башҡарҙыҡ - һабантуй үткәрҙек. Башҡорт һабантуйы сиктәрендә милли уйындар, уҙышмаҡтар, башҡорт көйҙәренә бейеүҙәр, уйын-көлкө яһап, барыһын да ҡатнаштырып, һөйөүҙәрен яуланыҡ.

**С. Мөхәмәтйәнов:** Фестивалдең ойошторолошо бик юғары кимәлдә булды. Хатта бер мәл мине тетрәндерҙе лә. Ямғыр башланып киткәс, асыҡ һауалағы концерт кисектерелде лә, тиҙ генә ҙур ҡыуыш ҡоролоп, эсенә сәхнә һәм эскәмйәләр теҙеп, хәҙер инде халыҡты түләүле концерҡа саҡырҙылар. Был ойоштороусыларҙың тамашасыһына шундай иғтибарлы, ихтирамлы, ә тамашасының мәҙәниәтле булыуын күрһәтте. Берәү ҙә түләүле концертҡа инмәйем, тип торманы. Һәр береһе "инглиз кимәлен" тотто. Афариндар!

▸ **Шундай ҙур коллективҡа костюм сәхнәгә сығара. Репертуарығыҙҙағы шундай номерҙарҙы һанай башлаһаң, ҡул бармаҡтары етмәҫ. Быңдай киң эшмәкәрлектең зарурлығы бармы?**

Уларға ҡытлыҡ тойғаныбыҙ юҡ. Яңы бейеү йәки йыр тыуа икән, уға мотлаҡ кейем тектерелә. Өфө ҡала округы хакимиәте ул йәһәттән беҙҙең талаптарҙы үтәй, уларға рәхмәтебеҙ сикһеҙ.

Дөрөҫ билдәләнегеҙ, оло коллективҡа, етмәһә, универсаль коллективҡа кейенеү еңел эш түгел. Костюмдар уңайлы булырға тейеш. Ул бейеүсегә ҡатмарлы хәрәкәттәр яһарлыҡ, музыкантҡа үҙ ҡоралында уйнарлыҡ, шул уҡ ваҡытта зауыҡлы ла, заманса ла һәм тарихилығына ла тура килергә тейеш. Әгәр бейеү ун бишенсе быуаттыҡы икән, уның

**С. Мөхәмәтйәнов:** Ансамблдең төп репертуары - башҡорт милли фольклоры. Һәр концерттың тәүге өлөшө башлыса үҙебеҙҙең халыҡ ижадына бағышлана, икенсе бүлектә иһә, тамашасы зауығын ҡәнәғәтләндереү, уларҙың ҡыҙыҡһыныуын уятыу һәм милләт-ара дуҫлыҡты нығытыу маҡсатында башҡа милләт уйындары, бейеүҙәре сығарыла.

мәҙәниәт тә ҡыҙыҡлы. Шулай уҡ Англияла саҡта ла оҫталыҡ дәрестәре күрһәттек, ҡатнашыусылар һыу буйы булды. Тик бер юлы ҡулдарҙа һығылмалыҡ, аяҡтарҙа ҡырҡыу тыптырлау тотоу һәм бөтөн тән корпусының эшләп-уйнап тороуы улар өсөн ауыр. Бер хәрәкәтте өйрәнгәнсе, хәлдән тайҙылар. Иманым камил, грузиндар бер ваҡытта ла башҡорт бейеүен башҡара алмаясаҡ, шул уҡ мексикандар ҙа уны төрлөләк өсөн генә аласаҡ, ә беҙҙең егеттәр иһә, ҡандай итеп бейей грузиндыҡын да, башҡаныҡын да. Шунлыҡтан, беҙҙең бейеүҙәр-ар, тренингтар үткәрергә ине...

▸ **Ғаилә тәрбиәһе, тигәндән, һеҙҙе кемдәр былай рухлы итеп тәрбиәләне? Ниндәй юлдар алып килде ошо өлкәгә?**

**И. Ноғманова:** Минең атай-әсәйем йырсы һәм гармунсы булды. Баймаҡтың Кәкре ауылындағы бер өмә йәки мәжлес тә уларһыҙ үтмәй ине. Элек бит кешеләр кемделер аҡсаға яллап эшләтеү тигән төшөнсә булманы. Һәр оло эш байрам шикелле итеп, өмә менән үтте. Ул өмәләр аҙаҡ йыр-бейеүле мәжлес артында ризаландырылды. Мин иһә ҙур ғаиләләге кинйәкәү. Ә кинйәкәүҙәргә атай-әсәй артынан эйәреп йөрөү хоҡуғы бирелә. Шулайтып, ололар мәжлесенә йөрөй торғас, уларға ҡушылып йырлап-бейеп, әртис булып киттем. Аҙаҡкараҡ әсәйем мине уҡытыусы йә бухгалтер итергә ныҡышты. Әммә һуң ине инде, улар үҙҙәре лә уйламайынса, миндә сәнғәткә һөйөү тоҡандырғайны.

**С. Мөхәмәтйәнов:** Мин дә Илүзә Ҡаһарман ҡыҙы кеүек бәләкәйҙән һабантуйҙарҙа, кон-



# ФОЛЬКЛОРЫ МЕНӘН...

## да яулайбыҙ

**мәсьәләһен хәл итеү ҙә еңел түгелдер. Тамашасы хәҙер иҫ киткес матур, күркәм, бай сәхнә кейемдәрен күрергә өйрәнгән. Ауырмы улар талабын ҡәнәғәтләндереү?**

**И. Ноғманова:** Беҙҙең костюмдарыбыҙ ҙа бик яҡшы ул. шул ун бишенсе быуаттыҡына тап килеүе мөһим. Был юҫыҡта ла беҙ төрлө өлкә белгестәре менән кәңәшләшеп эшләйбеҙ, уларҙы саҡырабыҙ, кәңәштәрен тыңлайбыҙ. Был бик яуаплы эш.

▸ **"Мираҫ" ансамбле башҡорт фольклорынан тыш, төрлө милләт фольклорын да**



**И. Ноғманова:** Күптән түгел бер ойошманан шылтыратып, улар ойоштorған сарала немец, мари бейеүҙәрен башҡарыуыбыҙҙы һоранылар. "Ғәфү итегеҙ, - мин әйтәм, - "Мираҫ" ансамбленең төп репертуары башҡорт бейеүҙәре-йырҙары, уларһыҙ беҙ бер ҡайҙа ла сығыш яһамайбыҙ..." Ризалаштылар, сығыштарыбыҙ башҡорт бейеүе менән башланды һәм тамамланды, бик ҡәнәғәт ҡалдылар.

Репертуарыбыҙға башҡа милләт фольклорын да индереүебеҙ беҙҙең профессиональ артистарыбыҙ башҡаларҙың мәҙәниәтен дә шундай юғары кимәлдә башҡара ала икәнде күрһәтеү ҙә ул. Беҙ башҡа халыҡтарҙың бейеүен дә бейей алабыҙ, ә бына башҡорт бейеүен һәр кем бейей алмай. Унан һуң, республикабыҙҙа төрлө милләт халҡы йәшәй. Һәм улар беҙҙең концерттағы шул үҙ милләтенең бейеүен ҡарарға, йырын тыңларға ла килә бит. Был уларҙың күңелендә беҙҙең халыҡҡа ҡарата хөрмәт, рәхмәт тойғоһо уята. Мәҫәлән, сит өлкәләрҙә йөрөгәндә лә, үҙ милләтенең фольклорын күреп, күңеле тулған кешеләр: "Ниндәй талантлы халыҡ был башҡорттар!" - тип килеп ҡулдарҙы ҡыҫа. Беҙҙең өсөн был ҙур мәртәбә.

**М. Солтанов:** Әле мексикандар менән һөйләшеүҙәр алып барылды. Улар беҙгә үҙҙәренең бейеүен һалырға теләй. Ә беҙ уларҙың беҙҙең башҡорт бейеүен өйрәнеүен шарт итеп ҡуйҙыҡ. Бик теләп риза булдылар. Уларға беҙ ҙә, беҙҙең ҙең ситтәрҙә булмауына мин аптырамайым.

▸ **Бөгөнгө ансамблдәр бейеү ҡуйыусыларға мохтаж, шулай бит? Һеҙҙә был мәсьәлә нисек хәл ителә? Бөгөнгө бейеүҙәргә артыҡ стилләштереү, модернизациялау хас кеүек. Бер мәл килеп халыҡсан бейеү һалыусыларһыҙ ҡалып ҡуймаҫбыҙмы икән?**

**М. Солтанов:** Эйе, быңдай хәүеф юҡ түгел. Әммә халыҡсан бейеү ҡуйыусыларыбыҙ ҙа бар әле, улар таштар араһындағы гәүһәр кеүек кенәләр, әммә бар. Үкенескә ҡаршы, тарихты, фольклорҙы, халыҡ ижадын ентекле өйрәнеп, костюмдар буйынса оло тикшеренеүҙәр алып барып, һәр хәрәкәтте, ымды, мимиканы еренә еткерә белеүсе оҫталарыбыҙ олоғайып китте. Ә беҙ бары тик шундай оҫталар менән генә эшләп өйрәнгәнбеҙ. Һуңғы бейеүҙәребеҙҙе шундай оҫталар - Риф Ғәбитов, Валерий Степанов, Динислам Исҡужиндар ҡуйғайны.

**И. Ноғманова:** Йәш бейеү һалыусыларға тап ана шул эҙләнә белеү, хатта рух етмәй. Сөнки рухы булған кеше мотлаҡ үҙенең тарихы һәм халыҡ ижады менән ҡыҙыҡһынасаҡ. Ә былар барыһы ла ғаилә тәрбиәһенән килә. Атай-әсәй бәләкәйҙән балаһының күңеленә тыуған илгә, милләткә, уның йәшәйешенә һөйөү орлоғо һалырға тейеш. Йәштәргә улар сәнғәт һәм мәҙәниәттең төп асылын, уны мәңгелек итеү серҙәрен төшөнһөн өсөн ошондай темаларға семинарҙцерттарҙа йырлап йөрөнөм. Ағайымдың табындарҙа йырлағанын ауыҙ асып тыңлап, "Юлдаш" каналы йырсыларын, алып барыусыларын ҡабатлап, йырсы булырға хыялланып үҫтем. Әсәйемә лә рәхмәт, ул миндәге был һәләтте баҫманы. Әгәр ул шул саҡ: "Егет кешегә заманға ҡулайлы һөнәр һайларға кәрәк", - тиһә, бәлки, мин икенсе юлдан китеп, күңелемде һындырған да булыр инем. Ул инде, киреһенсә, төрлө конкурстарға йөрөттө, минең уңыштарым өсөн һөйөндө. Шунлыҡтан, башҡа юл йәки һөнәр хаҡында уйлағаным да булманы. Тик шуныһы: Өфөгә театр артисы булырға тип килгәйнем. Ул йылда сәнғәт институтында был бүлек ҡабул итмәй булып сыҡты һәм мин вокал бүлегенә инеп киттем...

**М. Солтанов:** Мәктәпте тамамлайһы йылда уҡытыусылар "Кем булаһың?" тигән һорауҙы йыш бирә ине. Һәр береһенән һорап киләләр ҙә, мине төшөрөп ҡалдыралар һәм минең фамилия тәңгәленә "Марат - культпросвет", тип яҙып ҡуялар. Ә минең географияны өйрәнге килә, шул тиклем оҡшай торғайны ошо фән. Тик барыһы ла мине артист итергә тырышты. Хатта әсәйем дә "географ булам" тигәнемде "хореограф булам" тип аңлаған булған. Һәм мине атайым Стәрлетамаҡ мәҙәниәт ағартыу техникумына алып килде. Мин инде атай-әсәй теләгән үтеп, шунда уҡырға тороп ҡалдым...

(Дауамы 11-се биттә).

***✓ Һин яңғыҙлыҡтың ҡурҡыныс нәмә икәнлеген татып ҡарамағанһың әле, сөнки башың йәш! Тирә-яғыңда шығырым тулы халыҡ, ә һин бер үҙең, йәнең үрһәләнгәндә йыуатырлыҡ, сырхап киткәндә маңлайыңа усын баҫырлыҡ яҡының юҡ.***



# САҠЫР МИНЕ ЗӘҢГӘР КИҢЛЕКТӘРГӘ...

Хәйҙәр ТАПАҠОВ

(Повестан өҙөк)

–Генерал? Беҙ иң әүәл кешеләр, шуны онотма! Батша ғәли йәнәптәре лә, - тағы ла Брежневҡа ҡарап алды, - батырлыҡтар күрһәтмәй генә түшенә алтын йондоҙҙар таҡҡан герой ҙа! Бейек тәхет һәм алтын погондар тормош сәхнәһенең алдатҡыс атрибуттары ғына. - Асылған ҡаптан һурып алынған сигарет ҡалын ирендәргә ҡыҫылды. - Барып шартлатып ишеккә йоҙаҡ һалды. - Хәҙер тартынмай ғына көйрәтеп ебәр. Ҡамасауламаҫтар.

- Ундай ғәҙәтем юҡ.

- Дөрөҫ эшләйһең, сәләмәтлекте йәштән һаҡларға кәрәк.

Урталыҡты кәлепләп, улай-былай йөрөп алғандан һуң, йыртып ырғытырға теләгәндәй, ҡорғандарҙы ян-яҡҡа тартып ебәреп асып, тәҙрә төбөнә терһәкләнгән Слуквин биниһая ваҡыт бер ни ҙә өндәшмәне. Шунан ҡапыл ҡайырылып миңә тишерҙәй итеп ҡараны:

- Баймөхәмәтов, әйт әле, әҙәм балаһы ҡасан күңелендәге серҙе теләһә кемгә, хатта шайтандың үҙенә асып һалырға әҙер? - Тотҡарлыҡһыҙ үҙе үк яуапланы. - Катарсис кисергәндә!

Замполит ысынлап та ул шаңҡығанға, иҫәңгерәгәнгә оҡшағайны. Бына ул киҫкен хәрәкәтләнеп, сапсығандай итеп бармаҡтары менән сәстәрен араланы ла ағы еңгән яһил күҙҙәрен хәтәр яндырҙы:

- Ҡатынымдың хәле нисек, әйтәйемме?

- Пальпация яһағанда тойҙом, Яна Григорьевнаның эсенең уң яғында шеш бар. Шуның этиологияһын һәм патогенезын асыҡлау маҡсатында акушер-гинекологҡа барып күренергә кәңәш иткәйнем бит теге саҡ.

Урынһыҙ ҡулланылған аңлайышһыҙ медицина терминының мәғәнәһенә төшөнөп етмәгән Слуквин аңшая биреп торҙо ла һуҡ бармағын алға сәнсте:

- Һин уны гинекологҡа, ә ул беҙҙе онкологҡа ебәрҙе!

Шул һүҙҙәрҙе ишеткәс, тәнемдән боҙ һалҡыны йүгереп үтте, күҙ алдарым ҡараңғыланды, тамағым кипте.

- Тартырға рөхсәт итегеҙ, Павел Сергеевич...

- Алдыңда ята бит! Тағы, ишек төбөн һаҡлама әле, бына бында, өҫтәл янына яҡынла.

Шылып ултырып, тоҡандырылған сигаретты бер ике һурыуым булды, быуылып йүтәлләй башланым, күҙҙәремдән йәштәр атылып сыҡты. Ҡулымдағын көл һауытына тыҙыным.

- Онколог әллә ниндәй анализдар тапшырырға ҡушып, оҙаҡ, ентекләп тикшергәндән һуң, янында мине генә ҡалдырып, беҙҙең икебеҙ өсөн дә аяуһыҙ хөкөмөн сығарҙы, операция яһарға һуңлағанһығыҙ, тине. Йәшерәм дә бит, тик Янаның күңеле һиҙгер. Беҙ яңғыҙаҡтарбыҙ, фани донъяла бер яҡыныбыҙ ҙа юҡ! Дөрөҫ, Янаның алыҫта бер туған апаһы йәшәй, тик бала саҡтан бер-береһе менән аралашмағас, аралары һыуынып бөткән. Мин, мәҫәлән, уны бер тапҡыр ҙа күрмәнем. Бына ошондай ҡаты һынау алдында тороп ҡалдыҡ. Ә миңә звание бирҙеләр, бөтәһе лә ҡотлай. Мәғәнәһеҙлек бит был!

Слуквин ҡойондай өйөрөлөп килеп кире креслоһына гөрһөлдәне, шунан ярҙам өмөт иткәндәй, өңөлөп төбәлде:

- Нимә эшләргә миңә, ә?

- Йәшәргә, ауыр булһа ла йәшәргә, иптәш подполковник.

- Ҡайһылайыраҡ итеп?

- Белмәйем...

- Шул шул! Өмөтө һүнгәндәр тере мәйет менән бер.

- Һеҙ командир, ныҡлыҡ теләйем.

- Паникаға бирелә, тимәксеһегеҙме? Әгәр үҙем ошо хәлдә ҡалһам, сирҙе, бәлки, икенсерәк, еңелерәк тә ҡабул итер инем. Миңә ҡалһа, ауырлыҡтарға түҙеп өйрәнгәнмен. Ә Яна тормошомда ҡояш, һулар һауа, һыу, ут! Сиам игеҙәктәре ише ул минең ярты кәүҙәм! Һәм ана шуларҙан яҙыуҙан, айырылыуҙан йәшәүгә мәғәнә юғалтыуҙан ҡурҡам! Һин яңғыҙлыҡтың ҡурҡыныс, аяныслы нәмә икәнлеген татып ҡарамағанһың әле, сөнки башың йәш! Тирә-яғыңда шығырым тулы халыҡ, ә һин бер үҙең, йәнең үрһәләнгәндә йыуатырлыҡ, сырхап киткәндә маңлайыңа усын баҫырлыҡ яҡының юҡ. Дөйөмләштереп әйткәндә, бер кемгә лә кәрәк түгелһең, ғөмүмән, был донъяла һин артыҡ кеше!

Шымтайып ҡалдым, ошо ерҙә тағы нимә өҫтәп әйтә алам инде?

Слуквин тартып бөткән сигаретын һүндереп тә тормай, тәмәке һауытына ырғытты ла яңыһын тоҡандырҙы.

- Яҙмышым хаҡында нимә лә булһа белгең киләме?

- Мине өнһөҙ тыңлаусы сифатында саҡырғанһығыҙ түгелме?

- Һеҙ бик итәғәтле күренәһегеҙ.

- Ауыл тәрбиәһе.

- Әгәр улай икән, бигерәк тә шәп. Атайым яғынан ҡартатайым Ерофей Евстигнеевич Себер крәҫтиәне ине. Шаулы урындарҙа йәшәүҙе мөрхәтһенмәй, бар ғүмерен кеше аяғы һирәк баҫҡан тайгала үткәрҙе. Бер нисә йәйге каникулымда шул Себер төпкөлөндәге бәләкәй ауылда ял иттем. Утарҙың эргәһендә генә болоттарға үрелеп сопкалар ҡалҡҡан. Тирә-яҡта иҫ киткес, цивилизация еле ҡағылмағанғалыр, тәүтормоштан килгән күркәмлеген һаҡлаған хозур тәбиғәт, саф һауа, таштарға бәрелеп аҡҡан үтә күренмәле, тештәргә үтерлек һалҡын һыулы, бәрҙеләр, бағырҙар ҡарпыған йүгерек шишмәләр. Әйттереүҙе көтмәй, унда барырға атлығып ҡына торам. Ҡартатайым тәү ҡарашҡа уҫал, ҡырыҫ, аҙ һүҙле күренһә лә, ғәҙел, киң күңелле, йор һүҙле бабай ине. Урман-ҡырҙарҙағы һанап бөтөргөһөҙ үләндәрҙең барыһының да атамаһын, уларҙы ҡасан йыйырға кәрәклекте, ниндәй сиргә дауа икәнен, ҡулланыу алымдарын белә, ҡоштарҙың, йәнлектәрҙең ҡылыҡтарын аңлай. Миҙгелдәрҙең нисек килерен, көндәлек һауа торошон хаталанмай алдан билдәләй.Үҙе кешеләргә хаслыҡ ҡылмай, тәбиғәткә зыян килтермәй, һәммәһе менән килешеп, ярашып йәшәне. Ҡартатайым туҡһанын тултырып, сырхамай ғына ҡартлыҡтан үлде. Ауыл мөхитен күреп үҫкән кеше булараҡ, уның тәрбиәһен алғандарға гелән ышанып, хөрмәт менән ҡарайым. Бөгөн телемдең сиселеп торған сағы... - Слуквин оҙон һүҙгә төшөргә йыйыныуын белдереп, урынында ҡайҡайҙы ла башын артҡа ташланы. Мин дә йәйелеп үк китмәһәм дә иркенләңкерәп ултырҙым.

–Шул катарсис йәнде быраулай. Эсемдәген тотошлайы менән тышҡа түгеп ташлап, яңынан тулаһым килә. Буш һауытҡа яңы шыйыҡса ҡойолған кеүек. Мөмкин түгел. Атайымдың сығышын белдең, әсәйем Мәскәүҙеке, ә мин үҙем Мурманск ҡалаһында тыуғанмын, Владивостокта, шунан Таганрогта йәшәнек, бер һүҙ менән әйткәндә, "Адресым - Советтар Союзы". Хәрби ғаиләнән. Атайым кадровый офицер, әсәйем театр актрисаһы. Һыланып-һыйпанып, эйелмәй-бөгөлмәй йөрөгән, сәхнә ҡанундарын тормошҡа күсереп йәшәгән елбәҙәк һылыу ҡатын ине заманында. Йәшәү урындарыбыҙ йыш алмашынғанлыҡтан, ул һөнәре буйынса эшләмәне тиерлек, тик шул һылыулығы арҡаһында юлдарын, яйын табып, атҡаҙанғанды алды барыбер. Атайым икенсе ранг капитаны званиеһында хәрби диңгеҙ флотының һыу аҫты кәмәһендә хеҙмәт итте. Өйҙә әҙ генә ял итә лә ҡалған ваҡыты оҙайлы, айҙарға һуҙылған йөҙөүҙә. Иҫ белгәс тә әле, көн һайын тиерлек диңгеҙ ярына барып баҫам да, сәғәттәр буйы яҡын кешемде йотҡан диңгеҙгә ҡарап торам. Ажғыр тулҡындар араһынан бына-бына ҡалҡыуыстай тумалаҡ башня күренер төҫлө. Өсәүләшеп барып кәмәне ҡарағаныбыҙ ҙа булды. Оҡшаманы, каюталары тар, консерва банкаһына тыңҡысланған килька балыҡтай тояһың үҙеңде, тын тарыға. Йә, нисегерәк беҙҙең "Суртан", тип ҡыҙыҡһыналар шундағы матростар. Шыҡһыҙ, килбәтһеҙ, тим, тураһын әйтеп, кәмәгеҙ суртан түгел, хас та ҡара табут. Ул нимәне яратмай яманлауым ярты-йорто йәшәүебеҙҙән ялҡыуға бәйле булғандыр, күрәһең. Атайымдың кейеменә, тәненә диңгеҙ тоҙоноң ҡырҡыу еҫе елләтмәҫлек кимәлдә һеңгәйне. Шул ҡәҙерле еҫте бөгөн дә һағынам. Әсәйем тормошонан һис ҡасан риза, ҡәнәғәт булманы, күсмә йәшәүенән йәм, мәғәнә тапманы, яңғыҙ ҡалған саҡтарында миңә күрһәтмәҫкә тырышып илаулап та алғылай торғайны. Бергә булған саҡтарында йыш талаштылар, әрләштеләр, юҡтан ғына бәхәс сығарҙылар. Ошоларҙы һиҙҙермәҫкә, бөтәһен дә ал да гөл итеп күрһәтергә маташалар, тик өй эсендәге ғауғаны баҫып, йәшереп ҡалыу мөмкинме инде? Миңә ун йәштәр самаһы ине шикелле, әсәй өҫтәлдә ҡыҫҡа яҙылған ҡағыҙ киҫәген ҡалдырып, бер көн зымзыя юҡҡа сыҡты: аҙна ҡайтманы, ун көн... Был мәлдә ялда йөрөгән атайым эскеләштерә башланы, бер нисә тапҡыр лаяҡыл иҫерек ҡайтып инде, ә инде йөҙөүгә ваҡыты еткәс, бюллетендә ятыуына һылтанып, вахтаға сыҡманы ла ҡуйҙы. Бергә хеҙмәт иткән дуҫы килеп өгөтләп тә маташты, ә ул бер ни тип тә яуап ҡайтармай, өмөтһөҙ ҡул һелтәп ҡуйыу менән генә сикләнде. Бер айҙан беҙҙе судҡа саҡырҙылар. Низағлашыуҙың маҡсаты - айырылышыу процедураһын рәсмиләштереү һәм дөйөм мөлкәтте бүлешеү түгел, минең артабанғы яҙмышты хәл итеү икән. Әсәйем залға көйәҙ кейенгән ниндәйҙер ят ир менән килеп инде. Атайым оҙон буйлы, мыҡты кәүҙәле, сибәр ир ине, ә был урта буйлы, һалпыш ҡорһаҡлы, пеләшләнә башлаған оло башлы күрмәлекһеҙ әҙәм. Әсәйем, биҙәнмәгәс, үтә лә йәмһеҙ күренде. Беҙ ултырған яҡҡа өңөлөп, моңһоу итеп ҡарап-ҡарап ала. Ә беҙ - күрмәмеш тә һиҙмәмеш. Һуңғы сиктә теге һөйкөмһөҙ ят ирҙе һайлай алмайым бит инде, ултырыш барышында баҫып, ҡаршылағы өҫтәл артындағыларға ишетелерлек итеп, бер ҡайҙа ла бармайым, тинем. Ҡарар сығарыр алдынан мөләйем йөҙлө апай үҙемде генә айырым бүлмәгә саҡырып индереп, тағы ла бер тапҡыр кем менән ҡалырға теләүемде белеште, әле әйткән һүҙҙәреңдән һуңғараҡ баш тартмаҫһыңмы, тип төпсөндө, уйымда ныҡ торғанлығыма инанғас, тексы алдан әҙерләнгән ҡағыҙға ҡултамға ҡуйҙырҙы. Урамға сыҡҡас, әсәйем йүгереп килеп алдыма тубыҡланып, мине ҡосаҡлап алды ла түгелеп илай башланы. Атайым да, әсәйем дә ауыҙҙарына һыу уртлағандай ҡыланалар, бер-беренә һүҙ ҡушмайҙар, аҙаҡтан ете-ят кешеләрҙәй хушлашманылар ҙа. Икәүләп диңгеҙ ярына барҙыҡ. Ҡарашын билдәһеҙлеккә төбәгән атайым бармағындағы алтын балдағын һурып алды ла йән асыуына ажар тулҡындарға ырғытты, шунан сүкәйеп, устары менән йөҙөн ҡаплап, өшөгәндәгеләй бөршәйҙе. Уны бахыр хәлендә күреп өйрәнмәгәнлектән, юғала биреп ҡалдым. Ҡулдар йәйелгәндә хәсрәтле, тормоштан ваз кискән күҙҙәр йәшләнгәйне. Шунда тәүге тапҡыр ир кешенең илауын күрҙем. Йортобоҙҙа ҡалам, тиһәм дә киләсәктә ғаиләлә йәшәргә яҙманы: башта кадет мәктәбендә тәрбиәләндем, ары хәрби училищела уҡыным. Шунан академия. Атайым ваҡытынан алда отставкаға сыҡты. Башҡаса өйләнмәне. Ҡуңалтаҡ тормошон көйләй, яйға һала алмай, тамам эскегә һалышты, ҡасандыр ыҫпай кейенгән, бөтә ерҙә лә үҙен килешле тотҡан ир һуңғы йылдарында йөҙөн сал һаҡал-мыйыҡ баҫҡан, әрпеш асарбаҡҡа әүерелде. Училищела уҡып йөрөгән сағымда уны причалда үле килеш тапҡандар. Күршеләребеҙҙең һөйләүенә ҡарағанда, быялаланып ҡатҡан күҙҙәре диңгеҙгә төбәлгән булған. Ҡайтып ерләп киттем. Һуңғы юлға оҙатыуҙа бер кем дә булмаҫ инде, тиһәм, байтаҡ кеше йыйылып китте. Флоттан да делегация бар, ҡәбер ташы, тимер кәртә килтергәндәр. Хәрби йолаға ярашлы, табут өҫтөнә диңгеҙ фуражкаһын һалдылар, автоматтан залп та бирҙеләр. Ҡайғынан, яҡынымды эт һымаҡ күммәгәндәренә ҡыуаныстан иланым. Был мәлдә әсәйем театрҙа режиссер булып эшләгән теге ире менән Алыҫ Көнсығышҡа күсеп киткәйнеләр. Баштараҡ йыш хаттар яҙҙы, яуап хәбәре алмағас, һуңғараҡ бөтөнләй төңөлдө шикелле. Уның артабанғы яҙмышын белмәйем. Бер нисә тапҡыр сәйер шылтыратыу ҙа алдым. Трубканы тыңлайым, әммә өндәшкән кеше юҡ. Һуңғы тапҡыр сымдың теге осонда ҡатын-ҡыҙ үкһеүен ишеттем. Бер килеп телефон да өндәшмәҫ булды. Шулай итеп, был донъяла япа-яңғыҙым тороп ҡалдым.

**(Дауамы бар).**

✓ *Йәштәргә теләгем бар. Әсә һөтө менән бирелгән туған телде һаҡлаһындар, иң ауыр мәлдәрҙә лә намыҫтарын юғалтмаһындар, ғүмер буйына хеҙмәт юлынан атлаһындар. Хеҙмәт ятратмаған кеше бер ваҡытта ла бәхетле була алмай.*



МИЛЛӘТ БАЛҠЫШЫ

# ХАЛҠЫБЫҘ ФОЛЬКЛОРЫ МЕНӘН...

## сит ил тамашасыларын да яулайбыҙ

(Башы 8-9-сы биттәрҙә).

**▸ Ансамблдә эшләү үҙе бер айырым донъялыр ул. Бейеүселәрҙең, театр актерҙарының репетицияларында ултырғаным бар. Режиссер артистарҙы шундай бер сиктә тота, уның бар ирегеН, теләктәрен сикләй кеүек. Артистар тик уның әйткәндәрен, ҡушҡандарын ғына үтәп, үҙенең шәхес үҙенсәлектәрен бөтөнләй үлтерә кеүек. Кем аңлата ала былдай эш алымын?**

**И. Ноғманова:** Дин һәм башҡа төрлө фәлсәфәләрҙең барыһының да нигеҙендә, юғарыға күтәрелеү өсөн иң беренсе үҙеңдәге ғорурлыҡты бөтөрөү фарыз, тигән төшөнсә ята. Был мәңгелек фәлсәфә, уны шәхес булып формалашыу процесында ниндәйҙер унышҡа өлгәшкән, бейеклектәр яулаған кешеләрҙең барыһы ла үтә. Сыныҡыу юлы был. Артист буйһонорға, ҡушылғанды теүәл үтәргә, үҙ эмоцияларын баҫып, икенсе тулҡынға инергә өйрәнә. Бынын өсөн ул үҙен тулыһынса "онтап" ташлай һәм янынан "әүәләй". Уйлап ҡарағыҙ, ниндәй эске көс талап ителә быныҢ өсөн.

**М. Солтанов:** Ансамблдә бейеү, мәҫәлән, бер тәртипкә буйһоноу, синхронлыҡ, башҡаларҙан айырылмау, әммә шул уҡ ваҡытта үҙ индивидуаллегеңде юғалтмау ул. Айҙар, йылдар дауамындағы ҡатмарлы хеҙмәт. Бында, Илүзә Ҡаһарман ҡыҙы әйтмешләй, иң беренсе эске көс кәрәк. Эстән көслө булмаған кеше был тәртипкә күнә лә алмай - китә. Йәғни, тәбиғи һайлап алыу процесы бара. Үҙ-үҙен йәлләмәгәндәр генә мин-минлеген баҫа, камиллаша, сәнғәт бейеклегенә күтәрелә ала.

**С. Мөхәмәтйәнов:** Йырсыларҙа ла шулай уҡ: һин хорҙың бер күҙәнәге икәнһең, уның сифатлы сығышы өсөн тырыш. Өйрәткәндә тыңлай һәм ҡабул итә белеү ҙә фарыз. Тәнҡитте ҡабул итә белмәйһең икән - уңышһыҙлыҡ көт. Өйрәтеүселәр һине шулай эшкәртеп, ҡағып-һуғып, әүәләп, һинән аҫылташ яһай. Шул хәҡиҡәтте онотмаҫҡа кәрәк. Үҙеңдә тейешле эш тәртибенә күндерә белеү йәшәйештә лә ярҙам итә ул. Һин башҡаларҙы тыңлай белергә, улар фекерен ҡабул итергә лә өйрәнәһең. Был үҙенә күрә бер мәктәп.

**▸ Әйткәндәй, кемдәрегеҙ өйҙә башҡортса һөйләшә? Эштә ниндәй телдә аралашаһығыҙ?**

**М. Солтанов:** Коллективта башҡорттар үҙ-ара тик башҡортса ғына аралашабыҙ. Мин бала саҡта рус телле ауылда үҫтем, әммә әсәйгә "мама" тигән өсөн дә мөйөшкә баҫҡаның булды. Бөгөн туған телеңде белеү йәштәр араһында модаға инде, тиһәм дә, арттырыу булмаҫ. Рус теленән тыш, туған телен белгәндәрҙе хөрмәт итәләр, ҡалай ҙа.

**С. Мөхәмәтйәнов:** Бәләкәс улыбыҙ өйҙә әсәһе менән үҙ-ара русса һүҙҙәр ҡыҫтырып ебәрһәк: "Эй, нинә русса һөйләшәһегеҙ?"- тип тыйып ҡуя. Бына шундай быуын үҫтерәбеҙ, Аллаға шөкөр. Башҡорт йырҙарын, башҡорт телен пропагандалап та, үҙем башҡортса һөйләшмәһәм, бөтөнләй оят булыр ине.

**И. Ноғманова:** Эштә лә, өйҙә лә, урамда ла башҡортса аңлағандайға һәр ваҡыт башҡортса өндәшәм. Был беҙҙең тел, уны бөтөрһәк тә - беҙ генә бөтөрә, йәшәтһәк тә - беҙ генә йәшәтә алабыҙ. Икенсе милләт килеп уны йәшәтә лә, ҡыҫа ла, ҡырҡа ла алмай. Шунлыҡтан, ҡалайтһаҡ та туған телебеҙ өсөн үҙебеҙ генә яуаплы.

**▸ Емешле ижад итеү, милли идеяларға хеҙмәт итеү һәм киләсәк быуындарға мираҫ булыу маҡсатындағы ижади тормошоғоҙҙа үҙегеҙгә нимәләр теләр инегеҙ? Ниндәй хыялдар бар әле һеҙҙең?**

**И. Ноғманова:** Ансамблдең етәксеһе буларак, мин "Мираҫ"тың үҙ бинаһы булыуын теләр инем. Ул инде күптән айырым театр, айырым зал тотороҡ кимәлгә еткән, үҫешкән. Үҙаллы гастролдәр ойоштороу өсөн транспорт та кәрәк. Әлбиттә, беҙ былай ҙа республикабыҙ, ҡалабыҙ етәкселегенең хәстәрен тойоп йәшәйбеҙ, әммә үрҙә һанап үтелгәндәргә беҙ мохтаж.

**М. Солтанов:** Ысынлап, беҙҙең һәләтле көслө коллектив та, бай репертуар ҙа, урап сыҡҡыһыҙ фольклор базаһы ла, яулап алынған тамашасы ла бар. Шундай байлыҡты беҙ нисек тә тарҡатмаҫҡа, үҫтерергә һәм халыҡ мәнфәғәтендә ҡуллана белергә генә тейеш. Мин үҙебеҙгә шул бәхетте теләр инем.

**Ошо көндәрҙә "Мираҫ" фольклор йыр һәм бейеү ансамбле үҙенең ун йыллығын билдәләй. Уларға иҫәнлек-һаулыҡ һәм милли үҙаңына тоғро тамашасылар ғына теләйбеҙ, ә ҡалғанын улар үҙҙәре лә башҡарыр. Һәләтле бит улар!**

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА әңгәмәләште.**

ЯҘЫУСЫҒА - ӨС ҺОРАУ

# ҺҮҘ ҠӨҘРӘТЕН...

## быуа алмай ерҙә бер көс тә

**Бөгөн беҙ өс һораузы билдәле шағирә, тәржемәсе, З. Биишева исемендәге премия лауреаты, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Әнисә ТАҺИРОВАға йүнәлттек.**



**➔ Әнисә Абдулла ҡыҙы, һеҙҙе бөгөнгө замандың ниндәй күренештәре борсоуға һала?**

- Әлеге ваҡытта мине иң ныҡ борсоғаны - туған телдең яҙмышы. Атаҡлы рус педагогы К. Ушинскийҙың шундай һүҙҙәре бар: "Халыҡтың бөтә нәмәһен ал - ул кире ҡайтарасаҡ. Ләкин теленән яҙҙырһаң, ул бер ваҡытта ла күтәрелә алмаясаҡ. Тел үлһә, халыҡ та үлә". Мәктәптәрҙең бер-бер артлы ябылыуы, балаларҙың ситкә һибелеүе бик борсоулы. Минең уйымса, ул - фажиғәгә яҡын бер күренеш.

Үҙемдең миҫалды килтерәйем. Мин үҙем Ишембай районы Маҡар ауылынан. Минең әсәйем үҙенең тыуған ауылына - борон-борондан аҫаба башҡорттар йәшәгән Шишмә районы Иҫке Ябалаҡлы ауылына кәсеп ҡайтты. Әсәйем бик атаҡлы фельдшер ине. Ул үҙенең көсө менән медпункт астырыуға өлгәшеп, 20 йылдан ашыу шунда эшләне. Мөмкинлек булғанда, йүгереп, әсәйем янына ҡайта торғайным. Гөрләп торған 10 йыллыҡ мәктәп бар ине. Йәштәр кисен клубта матур-матур спектаклдәр ҡуя торғайны. Бына шул ҙур Ябалаҡлы ауылының гөрләп торған мәктәбе хәҙер юҡҡа сыҡты. Балалар ситкә тарала, ауылда тороп ҡалған ҡарттар, яйлап, баҡыйлыҡҡа күсә. Балаларҙы ситкә йөрөтөп уҡытыу, мөхитенән айырыу - уларҙың юлын киҫеүгә тиң. Бик хәүефле был. Күңелде өйкәп торған нәмә - шул.

Тағы. 90-сы йылдарҙа Башҡортостан телевидениеһында мөхәррир булып эшләгән сағымда филология фәндәре докторы, башҡорт телендәге фәнни хеҙмәттәре менән донъя кимәлендә билдәлелек яулаған ғалимә Нәжибә Хәйерзаман ҡыҙы Мәксүтова менән "Һинең туған телең" тигән тапшырыуҙар серияһын эшләгәйнек. Ул серияға ҡаршылыҡтар бик күп булды, ләкин беҙҙең ныҡышмаллыҡ менән ике йылда ундан ашыу тапшырыу эшләнек. Уның бер генә фекерен килтерәм: "Кешенең бар булмышы уның туған теле ярҙамында асыла", - тигәйне ул. Кеше үҙенең уй-фекере несекәлектәрен бары туған телендә генә биреүгә өлгәшә ала. Шуға күрә, йәштәргә, матбуғат хеҙмәткәрҙәренә бик күп эш атҡарырға кәрәк әле.

**➔ Әҙәби мөхит, әҙәбиәт донъяһы торағында ни әйтерһеҙ?**

- Әҙәбиәт донъяһы мәҙәниәт менән йәнәш йәшәй. Күңелдә иң һыҙлатҡаны - Бөтә Рәсәйҙәге әҙәбиәт, мәҙәниәт донъяһының түбән төшөп китеүе. XXI быуатта әҙәбиәт тә, мәҙәниәт тә бик түбән төштө. Мин быны совет балаһы буларак әйтәм. Элек ниндәй гөрләп эшләгән ижад йорттары бар ине. Хәҙер һеҙ берәй ижад йорто тураһында ишеткәнегеҙ бармы? Элек Переделкино, Малеевка, Пицунда, Кацивели, Ялта һымаҡ иҫ китмәле ижад йорттарында төрлө милләт яҙыусылары йыйылып, фекер алыша, бер-береһенең ижадын өйрәнә, әҫәрҙәрен тәржемә итә торғайны. Был әҙәбиәтте күтәрә торған күренеш ине. Мин шул ижад йорттары китапханаларында үҙем өсөн күпме яңылыҡтар астым... Яҙыусыларҙың ҡайһылары вафат, Мәскәүҙәге яҙыусылар менән минең дә бәйләнештәр өҙөлөп бөтөп бара. Бәгзе берәүҙәр сит илдәргә китте, күптәр үҙ-үҙенә бикләнде... Юлия Друнина, 90-сы йылдарҙағы фажиғәләрҙе кисерә алмай: "Минең Рәсәйҙең упҡынға тәгәрәүен күргем килмәй", - тип, үҙ-үҙенә ҡул һалды... Ҡыҙғаныс... Беҙ уның менән бик уҡ йыш булмаһа ла, ижад йорттарында һөйләшеп, бер-беребеҙҙең хәлебеҙҙе белешә торғайныҡ. Уның әйткәне тормошҡа ашмағайы, тип, ҡотом осоп ҡуя.

Икенсенән, үҙәк телевидениела ла, үҙебеҙҙә лә яҙыусыларҙың яҡты йөҙө күренмәй башланы. Телевидениела эшләгән сағымда, "Автограф" тапшырыуында, бихисап шағирҙарҙан шиғыр уҡыттыҡ. Хәҙер иһә, "Автограф" тип аҫһаң, унда кешеләр шиғыр уҡый ҙа бит, араларында шағирҙар юҡ.

**➔ Заман ағышына килгәндә, беҙ ҡайҙа барабыҙ?**

- Әлбиттә, күңелде йылытҡан ыңғай күренештәр ҙә бар. Технологиялар алға китә, әммә мәҙәни кимәл артҡа тәгәрәй. Еңел аҡса артынан ҡыуыу, байлыҡ сире менән ағыуланыу, хеҙмәткә ерәнеп ҡарау, кеше елкәһендә йәшәргә тырышыу - боҙоҡлоҡтоң иң ҡурҡыныс күрһәткесе. Ундай кешеләр намыҫ менән йәнәш йөрөмәй, әлбиттә. Беҙ эштән ҡурҡманыҡ: конкурстан үтә алмаған, комсомол йүнәлтмәһе алдыҡ та, төҙөлөшкә киттек. Кирбесен дә ташыныҡ, изměһен дә иҙҙек, йорттар һалырға ла ярҙам иттек. Еңел булманы, ләкин беҙҙең быуын тормош мәктәбен үтеп, институттарға, университеттарға инеп китте... Хәҙер эш юҡ, имеш... Эшләргә теләмәй йәштәр. "Еңел" аҡса, "тәтәй" эш кәрәк. Ялҡаулыҡ - замандың иң аҙғын сире. Әгәр Хөкүмәттең мәҙәниәткә, әҙәбиәткә ҡарашы үҙгәрмәһә, был сирҙе һауыҡтырып булмаясаҡ. Юлия Друнина әйтмешләй, әҙәбиәт, мәҙәниәт үҙ юлына төшмәһә, илдең һәләкәткә барыуы бик мөмкин. Совет заманында әҙәбиәт - халыҡты, мәҙәниәтте һаҡлаусы ҡалҡан ине. Әле ул үҙе яҡлауға мохтаж. Ләкин кем уны яҡлар?

Йәштәргә бер нисә теләгем бар. Әсә һөтө менән бирелгән туған телде һаҡлаһындар, иң ауыр мәлдәрҙә лә намыҫтарын юғалтмаһындар, ғүмер буйына хеҙмәт юлынан атлаһындар. Хеҙмәт яратмаған кеше бер ваҡытта ла, күпме генә миллиондарға күмелеп ятһа ла, бәхетле була алмай. Һүҙемде йомғаҡлап, үҙемдең "Һүҙ" исемле шиғырымдан бер генә дүрт юллыҡты килтергем килә.

*Иң тәүҙә һүҙ булған.*
*Һүҙ ҡөҙрәтен*
*Быуа алмай ерҙә бер көс тә.*
*Һүҙ, тел йәшәгәндә, халыҡ йәшәр,*
*Һүҙ ул - йәшәү бирер йәншишмә.*

**Иҙел РӘХИМОВ яҙып алды.**

*✓ Вируслы инфекция эләктереү хәүефе кешененең физик әүҙемлеге артҡан һайын кәмей бара. Хатта түбән физик әүҙемлек тә бөтөнләй хәрәкәтһеҙ йәшәүгә ҡарағанда инфекция эләктереү ҡурҡынысын 10 процентҡа кәметә.*



ИНТЕРНЕТТАН



# АТЛАП ЙӨРӨШӨҢ...

## холҡоңдо күрһәтә

■ Киҫкен респираторлы вируслы инфекция эләктереү хәүефе кешененең физик әүҙемлеге артҡан һайын кәмей бара. Дания ғалимдары үткәргән һынауҙар күрһәтеүенсә, был бактериаль инфекцияларға ла ҡағыла. Ғалимдар 3 йыл дауамында 18 мең кешененең йәшәү рәүешен тикшергән. Хатта түбән физик әүҙемлек тә бөтөнләй хәрәкәтһеҙ йәшәүгә ҡарағанда бактериаль инфекция эләктереү ҡурҡынысын 10 процентҡа кәметә. Был бигерәк тә гүзәл затҡа ҡағыла.

■ Әсә менән бала араһындағы бәйләнеш уларҙың беренсе тапҡыр бер-береһен күргәс түгел, ә ауырға ҡалғас та нығына. Баланың физик һәм аҡыл үҫеше ошо мәлдә әсә менән бала араһындағы эмоциональ контакттың ни тиклем нығыраҡ булыуына бәйле. Квинсленд университеты ғалимдары перинаталь бәйләнеш мәсьәләләренә ҡағылған тикшеренеүҙәр үткәргәндән һуң ошондай һығымтаға килгән. Буласаҡ әсәнең тыуасаҡ сабыйына эҫенеү процесы боҙолһа, бала аҙаҡтан насар һөйләшеүе, насар атлап китеүе бар, психик үҫеше лә аҡһауы ихтимал.

■ "Быуындар һыҙлай, көн боҙолор, ахыры", тигәнде ишеткәнегеҙ барҙыр. Ғалимдар хроник ауырыу менән һауа шарттары араһындағы бәйләнеште тикшереп ҡараған. "Болотло, ауырытыуы ихтимал" тип аталған уникаль проект идеяһы Манчестер университеты ғалимдарыныҡы, улар уҡ уны тормошҡа ашырған. Ғалимдар смартфон өсөн махсус аппликация булдырған, уның ярҙамында һәр кем ауырыуы хаҡында көндәлек алып бара ала, ә программа яҙмаларҙы һауа шарттары менән сағыштырып барған. Проектта 9 мең кеше ҡатнашҡан. Һөҙөмтәләр күрһәтеүенсә, һауа боҙолоуы менән хроник ауырыуҙар араһында бәйләнеш бар. Был асыш табиптарға ауырыуҙарҙы яҡшыраҡ аңларға ярҙам итәсәк. Проект әлеге көндә лә эшләй.

■ Иҙәнгә төшөп киткән ризыҡты тиҙ генә алһаң, бер нәмә лә булмай, уны ашарға ла ярай, тип иҫәпләйбеҙ беҙ. Быны Рутгерс-Нью-Брансуик университеты ғалимдары ла тикшереп ҡараған. Улар ҡарбуз, икмәк, майлы икмәк, йәбешкәк кәнфит алған һәм уларҙың балаҫҡа, керамик плитаға, ағас һәм керамик иҙәнгә төшөрөп ҡараған. Иҙән дә, балаҫ та алдан сальмонеллаға оҡшаш бер бактерия менән "эшкәртелгән". Ризыҡ бысраҡта 1 секундтан 5 минутҡа тиклем ятҡан. Лаборатор тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ысынлап та, ризыҡты төшөп киткәс үк алһаң, ул бактериялар менән зарарланып өлгөрмәй икән. Шулай уҡ уның ҡайҙа төшөүе лә мөһим икән. Иң хәүефһеҙе булып балаҫ торған. Ризыҡтың еүешлек кимәлен дә иҫәпкә алырға кәрәк, мәҫәлән, ҡарбуз тиҙ бысранған, бактериялар унда шунда уҡ "йөҙөп" киткән. Ғалимдар шуға ла "5 секунд ҡағиҙәһе"нең өлөшләтә эшләүен дәлилләгән, ҡайһы бер бактерияларға ризыҡҡа күсеү өсөн секунд та етә.

■ Кешенең нисек атлап йөрөүе уның "эске донъяһы" тураһында ла "һөйләй". Портсмут университеты ғалимдары 29 кешенең психоэмоциональ потртетын тикшереп ҡараған һәм һуңынан уларҙың барыһын да атлатып ҡараған. Тәндең өҫкө һәм аҫҡы өлөшөнә махсус датчиктар беркетелгән. Уларҙы тикшереп ҡарағандан һуң, шул асыҡланған: агрессив кешеләр ҡулдарын ныҡ һелтәп, ныҡ хәрәкәтләнеп атлай икән.

БУЛҒАН ХӘЛДӘР

# ҒӘЖӘП АТА ҠАҘҘАР

**Ғәжәп хәлдәрҙең шаһиты булырға тура килә ҡайсаҡ. Әҙәм балаларынан башҡа һәр төрлө кейек-йәнлектәр менән булған ҡыҙыҡлы ваҡиғалар айырыуса хәтерҙә ҡалыусан. Бөгөнгө һүҙем дә бер нисә йыл элек йорт ҡаҙҙары менән үҙем шаһит булған ваҡиғалар тураһында.**



Раҡия инәйҙәрҙең йорто Урал тауы итәгендә ултырған Байым ауылының иң осонда, башҡа өйҙәрҙән айырымыраҡ урынлашҡан. Ауыл ситендәге ҡайын урманына инә бирәберәк тора. Уларҙың ихатаһында, ялан һарайҙарында ла киҫелмәй ҡалған унлаған дәү ҡайын башын күккә сөйгән. Шуның өсөн дә, күрәһең, ҡуян, төлкө һымаҡ Урал урманы кейектәре уларҙың кәртә-ҡураһына, хатта ишек алдына ла, төндәрен, ҡайһы берҙә көндөҙҙәрен дә, инеп сыҡҡылай. Ҡуяндар, билдәле, бесән һарайы тирәһендә уранғылай. Ә йыртҡыс төлкө, әлбиттә, ҡош-ҡорт маҙарҙы һағалай. Көнө-төнө йоҡлауҙан бушанмаған бәйҙәге ҡарт Муйнаҡты бар тип тә белмәйҙәр. Үәт замана йәнлектәре!

Инәйебеҙ яҙ һайын инкубаторҙан егерме биш - утыҙлаған ҡаҙ бәпкәһе алып, улар үҫеп еткәнсе күҙгә тиклем шулар менән булаша. Тик, Раҡия инәй үҙе әйтмешләй, инкубатор - инкубатор инде ул. Аҙ ғына күҙ яҙҙырыуың була, бәпкәләр бер нисә өлөшкә бүленешеп, тырым-тырағай таралышырға әҙер генә торалар. Күҙгә табан ғына, инде үҫеп етеп килгән себештәр араһында берәй лидеры табылып, башҡа иптәштәрен йыйып, эйәртеп йөрөй башлай башлауға, әммә йәй буйына "тәрбиәләү" өсөн уларға оло ҡаҙҙар кәрәк шул...

Шулай, үткән йыл инәйебеҙ башҡаса инкубаторҙан бәпкә алмаҫҡа ҡарар итте. Көҙөн ҡаҙҙарҙың икәүһен иткә һуйҙырмай, яҙғылыҡҡа ҡалдырҙы. Береһе аталыҡ, ә икенсеһе, кәүҙәгә бер аҙ ҡайтышырағы - инә ҡаҙ. Тик, ғәжәпкә, инәйәбеҙҙең һарайында ҡышлап сыҡҡан был ике ҡаҙ тәүҙәрәк тә, яҙға оторо ла бер-береһенә ҡарата битараф ине. Яҙ еткәс, Раҡия инәй күпме генә көтмәһен, ҡаҙҙары йомортҡа һалманы, сөнки... ҡаҙҙарҙың икеһе лә аталыҡ булып сыҡты. Бына һиңә - мә! Инде байтаҡ ҡына олоғайған инәйебеҙ хаталанған икән...

Был юлы ла Баймаҡтағы эшҡыуар Байрамғоловтың инкубаторынан бәпкәләр алып ҡайтырға мәжбүр булды ул. Ихатала торған ҙур ситлек эсенә ебетелгән икмәк, табаға һыу һалып, бәләкәстәрҙе шунда урынлаштырҙы. Сөнки оло ике ата ҡаҙ уларҙы ситһенеп, суҡып имгәтеүе ихтимал...

Ихатаға бәләкәстәр килеп инеү менән, ысынлап та, оло ҡаҙҙарҙың тыныслығы юғалды. Улар, муйындарын аҡҡошҡа оҡшата биреп дуғаландырып бөгөп, сәйер генә "ғо-ғо-ғо" тигән тауыштар сығарып, ситлек тирәләй әйләнешә. Үҙҙәренә һалған емде лә ашамайынса, бер-икене генә суҡып алалар ҙа, кемделер һыйларға саҡырғандай, ян-яғына ҡаранып ҡаңғылдашалар. Көндәрҙән бер көндө Раҡия инәй, шулай ҙа, бәләкәстәр өсөн бик хәүефле булыуға ҡарамаҫтан, бәпкәләрҙе аталыҡтар янына сығарҙы. Берәй нәмә була ҡалһа тип, ҡулына тал сыбығын әҙерләп тотоп торған инәйебеҙ бот сабып хайран ҡалды. Инде һигеҙенсе тиҫтәһен тултырған инәйебеҙ ике ата ҡаҙҙың кескенә бәпкәләрҙе бындай йылы ҡабул иткән хәлде быға саса һис ҡасан күргәне юҡ ине. Етмәһә,

МӨҒЖИЗӘЛЕ ДОНЪЯ

# ХӨРӘФӘТИ ХИКӘЙӘЛӘР,

## йәки йәнәшәбеҙҙә кемдәр йәшәй?



### Ендәр

Ен, күҙгә күренмәүсе, кеше һаулығына ҙур зыян килтереүсе бер көс. Ендәр ташландыҡ мунсаларҙа, кешеләр йөрөмәй торған сүп-сарлы, иҫке әйберҙәр туҙып ятҡан урындарҙа оялап, шунда йәшәй, тиҙәр. Оло кешеләрҙең һөйләүенә ҡарағанда, ташландыҡ әйберҙәр, сүп-сар ташланған урындарҙа йөрөмәҫкә, унда уйнамаҫҡа, ташландыҡ әйберҙәргә тотонмаҫҡа, уларҙы урынынан ҡуҙғатмаҫҡа кәрәк. Сөнки ташландыҡ әйберҙәр араһында ендәрҙең ояһы булыуы мөмкин, ә иҫке әйберҙәрҙе ҡуҙғатҡанда уларҙың ояһы боҙолоп, ендәрҙең асыуын килтерә. Был ваҡытта ен үҙенең тыныслығын боҙған кешене һуға, йәки ҡаты ауырыуға дусар итә. Ен һуҡҡан кешенең күҙҙәре һуҡырая, ауыҙы ҡыйшая, ул ҡотора йәки аҡылдан яҙа, аяҡтары йәки ҡулдары ҡороуы, хатта кешенең ен һуғыуҙан үлеүе мөмкин. Ен һуҡҡан кешене дарыу менән һауыҡтырыу мөмкин түгел, бында табиптар ҙа көсһөҙ. Ғәҙәттә, ен һуҡҡан кешене муллаға алып баралар, уны тик мулла ғына һауыҡтыра ала. Мулла ен һуҡҡан кешене ҡарай, һораша, әгәр ен һуғыуы бик көслө булһа, мулланың был көскә ҡаршы торорлоҡ уҡымышы булмаһа, ул ен һуҡҡан кешене өшкөрмәй, сөнки уның зәхмәте мулланың үҙенә һуғылыуы мөмкин. Бәлки, шуғалыр, муллаларҙы уҡымышына ҡарап, көсһөҙөрәктәрен - мулла, ә көслөләрен - уҡымышлы, шәп, бик көслө мулла, тип йөрөткәндәр. Бик ҡаты ауырыуҙарҙы һәм бик ҡаты ен һуҡҡандарҙы, араның бик алыҫ булыуына ҡарамаҫтан, көслө муллаға алып барырға тырышҡандар. Ауырыуҙарҙың күпселеге мулла өшкөргәндән һуң, һауыҡҡан.

***✓ Үҙегеҙҙең пландарығыҙ һәм ниәттәрегеҙ хаҡында бер кемгә лә һөйләмәгеҙ, сөнки был хуплауға тағы бер ынтылыш. Маҡсаттарығыҙҙы асып биреп, һеҙ уға өлгәшә торған ҡиммәтле энергияғыҙҙы сарыф итәһегеҙ.***



бәпкәләр үҙҙәренеке лә түгел бит әле.

Ситлек эсенән тайыш-тойош баҫып, берәм-һәрәм сығып килгән бәпкәләрҙе күреү менән ата ҡаҙҙар ҡысҡырышып ҡаңғылдашып ҡанат ҡағып алдылар, унан "ғо-ғо-ғо" тип, мөмкин тиклем йомшағыраҡ өндәшергә тырышҡандай, бәпкәләр тирәһендә йөрөй башланылар. Үҙҙәренең баянан бирле ашамай һаҡлаған емдәренә әйҙәй кеүек ине улар бәпкәләрҙе. Улары ла, һис ни булмағандай, оло ҡаҙҙарға эйәрҙе лә китте. Ата ҡаҙҙар табалағы емде бер-икене суҡыған булалар ҙа, һарыҡайҙар килеп, бәләкәй генә йомшаҡ суҡыштары менән ашағанын кинәнешеп ҡарап торалар. Хатта бик ирмәк итеп, ергә бер аҙ сүгә биреп, хас та кеше һымаҡ бейешеп тә алалар. Ул ғына ла түгел, һауытҡа ем өҫтәргә яҡынлашҡан Раҡия инәйгә ыҫылдашып ҡаршы килә башланылар, етмәһә... Хәҙер бәпкәләр тирәһенә ем урлашырға тауыҡтар ҙа килә алмай. Әллә ҡасан уҡ ошо тирәлә осоп әйләнгеләгән ала ҡарғаны бер нисә мәртәбә ҡурҡытып ҡыуып ебәрҙеләр. Яҙғы ҡояш болот артына йәшеренгәс, бер аҙ һалҡынайып, ямғыр күҙе төшә башлау менән бәпкәләрҙе ҡуйындарына алып, йылы ҡауырһындар араһына йәшерҙеләр...

Шулай итеп, был ике ата ҡаҙ кескәйҙәрҙе йәй буйына үҙ бәпкәләрендәй итеп ҡарап, һаҡлап алып йөрөнө. Ҡайһы ваҡыт үҙәнгә Таулы йылғаһы буйына алып барып йөрөп тә киләләр. Көҙгә тиклем егерме биш бәпкәнең барыһы ла иҫән генә йөрөп, инде ололарға тиңләшеп үҫеп тә етте. Ноябрь айы башланыуға йәш ҡаҙҙар кәүҙә ҙурлығы буйынса ололарҙан айырғыһыҙ ине инде. Тик оло ике аталыҡ ҡына уларҙы һаман да бала итеп күрә, ахрыһы, яндарына яҡынлашҡан сит кеше, йә эт-маҙарҙы шундуҡ ҡыуып ебәрә, һаман да булһа бәпкәләрен яҡлашалар ине.

Көндәрҙән бер көндө, таң яҡтырғас, Раҡия инәй тышта ҡаҙҙар ҡаңғылдаған тауышҡа тәҙрәгә баҡты. Ни күҙҙәре менән күрһен, йылтырап торған ҡыҙыл төлкө ялан кәртәгә инеп алған да, ҡаҙҙар тирәһендә урала. Ә ике ата ҡаҙ, улай-былай йүгергеләп, берәй ҡаҙҙы әләктереп алып китергә йәтешләп йөрөгән хәйләкәр йыртҡыстан башҡаларҙы ҡурсалап, ҡанаттарын йәйеп, тегене суҡырға маташа... Инәйебеҙ таяғын алып тышҡа йүгереп сығыуға яуыз төлкө бер ҡаҙҙы муйынынан тешләп, ҡойма ярығынан сығып та һыҙҙы. Барлап иҫәпләгәндән һуң, йәш ҡаҙҙарҙың барыһы ла иҫән, ә бер аталыҡ юҡ икәне беленде. Шулай итеп, ата ҡаҙ бәпкәләрҙе һаҡлап, батырҙарса үҙенең ғүмерен бирҙе... "Ә-ә-әй, меҫкенкәй, - тип уны йәлләп уфтанды Раҡия инәй, - күп кенә кешеләргә лә үрнәк булырлыҡ аталыҡ ине..."

Икенсе бер хикәйәтем дә ата ҡаҙ менән бәйле. Мин бала саҡта булды был хәл. Әсәйемдәр күрше Комсомол ауылында йәшәгән Әхмәтсафа ағайҙарҙан бер пар ҡаҙ алып ҡайтты. Аталыҡ менән инәлек. Инәлеге - түбәһендә өлтөкәйе булған ала ҡаҙ. Ә аталығы ифрат та аҡҡошҡа оҡшаған ап-аҡ, оҙон муйынлы ине. Үҙебеҙҙең ике инәлекте лә тиҙ арала үҙ итеп алды был ата ҡаҙ. Бергә килгән ала ҡаҙынан һис тә айырып ҡараманы, башҡаларға ла иғтибарын тигеҙ бүлде. Яҙға өс инә ҡаҙҙың барыһы ла себеш сығарҙы. Ә аталыҡ үҙенең бурысын намыҫ менән үтәй ине. Көн буйы быуанан ҡайтышмаған ҡаҙҙарҙы бәпкәләре менән эйәртеп, кискә өйгә алып ҡайта. Өс ҡаҙҙың үҫеп етеп килгән себештәре шул тиклем күп һымаҡ тойола, йәйелеп йөрөп, урамда үлән йолҡҡолап ашап йөрөгәндәрендә күпселеге аталары һымаҡ ап-аҡ булған себештәр өй ихатаһын бөтөнләйгә ҡаплап алған һымаҡ. Әллә ҡайҙан ҡулйыуғыстың һыуын ағыҙырға ла өйрәнеп алғандар. Гүйә, һыу буйынан һыуһап ҡайталар: килеү менән ихатала бағанала элеүле торған ҡулйыуғысҡа сиратҡа теҙелеп алырҙар ине лә, оҙон муйындарын һуҙып, суҡыштары менән ҡулйыуғыстың һыуын аҫтан ағыҙып, эсеп бөтөргәнен ирмәк итеп ҡарап тора торғайным. Көҙ еткәс, атайымдар ололарға тиңәлеп үҫеп еткән ҡаҙҙарҙы иткә һуйҙылар. Урынына себештәр араһынан бер йәш ҡаҙ ҡалдырып, инде ҡартайған, тип, әлеге аҡ аталыҡ менән бергә килгән өлтөкәйле ала ҡаҙҙы ла тотондолар. Бына шул көндән башланды инде әлеге аҡ ата ҡаҙҙың мажараһы. Ике-өс көн ихата буйлап ҡаңғылдап, унда-бында һуғылып йөрөнө тыныслығын бөтөнләйгә юғалтҡан аталығыбыҙ. Яҙғылыҡҡа тип ҡалдырған башҡа инәлектәрҙе бар тип тә белмәй. "Алаҡасты һағына, ахырыһы", тине әсәйем. Бер аҙҙан аҡ аталығыбыҙ урам тышына осоп сығып та китте. Артынан етеп кенә булмай. Туп-тура түбән оста йәшәгән Рауза апайҙарҙың өйөнә ҡарай йүнәлде. Шуларҙың урам тышында йөрөгән бер-нисә ҡаҙ төркөмөнә ҡушылып алды. Шунан алып, был ҡаҙҙарҙан айырып та алып булмай башланы уны. Күпмелер йөрөгәс, ҡышҡылыҡҡа тотоп алып ҡайтып, үҙебеҙҙең башҡа ҡаҙҙар янына бикләп ҡуйҙы әсәйемдәр. "Яҙға тиклеп ала ҡаҙҙы, моғайын, онотор, быларын ҡабаттан ҡабул итеп алыр", тинеләр. Әммә ҡышты бик бойоҡ үткәргән аталығыбыҙ башҡаса үҙебеҙҙең ҡаҙҙарға яҡынламаны, уларҙы үҙһенмәне. Мөмкинлек сыҡҡан һайын ҡаҙыбыҙ Рауза апайҙарҙың өйөнә ҡасып сығып китер ине...

Ошо хәлдәрҙе ҡабат-ҡабат иҫләйем дә, хайуандарҙың ҡайһы бер яҡтарын үҙебеҙ менән сағыштырып ҡарайым. Беҙ аҡылһыҙға һанап йөрөгән бәғзе хайуан, йәиһә ҡошҡорттарҙың шундай ғәжәп сифаттарын күреп, Раббыбыҙ тарафынан аҡыл тип аталған иң ҡиммәтле нәмә менән бүләкләнгән әҙәми зат хаҡында уйлана башлайым. Аллаһы Тәғәлә биргән ана шул оло ниғмәттең һәм башҡа бихисап, гүзәл нәмәләрҙең ҡәҙерен белеп, тик файҙаға ҡулланып, улар өсөн Аллаһы Тәғәләгә ғүмеребеҙ буйына шөкөр итеп, фәҡәт Уға ғына баш эйеп, был донъялағы үҙебеҙҙең төп тәғәйенләнешебеҙҙе аңлап, дөрөҫ кенә итеп йәшәргә тейешлегебеҙ тураһында фекер итәм. Шундай бурыс тик беҙгә генә, кешеләргә генә бирелгән, тип әйтһәм, әлбиттә, яңылышасаҡмын. Сөнки әҙәм балаларынан башҡа тағын да аҡыллы йән эйәләре - ендәр ҙә бар. Изге Ҡөрьән Кәримдә Аллаһы Тәғәлә уларға ла тап ана шундай бурыс йөкмәткәне хаҡында әйтә. Әммә ендәр беҙгә күренмәй, һәм уларҙың үҙ хәстәре. Мине әҙәм балалары нығыраҡ борсой.

**А.ҠЫУАНДЫҠОВ.**

Шулай, йәй көндәренең береһендә, ауылдың таҙа кәүҙәле, көслө бер ир кешеһе ен һуғыуҙан ҡотора. Ул йәмһеҙ итеп аҡырып, ҡулына үткер балта алып, йортҡураларын емерә башлай. Ҡатыны, бала-сағалары ҡурҡышып ҡасып бөтә. Ҡоторған кешенең күршеләре, уның йәмһеҙ тауышын ишеткән кешеләр уның йорт тирәһенә йыйыла. Аранан бер олораҡ кеше, был кешене ен һуҡҡандыр, мин уны ташландыҡ мунсаның мейесен емереп, суйын зәңгәрҙәрен (тимер ҡойолма) алып йөрөгәнен күргәйнем, ти. Йыйылған кешеләрҙең ҡайһылары, ағай-энеләре ҡоторған кешене тынысландырырға тырышып ҡарай, ләкин ул кешеләрҙе үҙенә яҡын ебәрмәй, балта менән киҙәнә, сабып үлтереү менән ҡурҡыта. Шулай ҡоторған кешене тота алмай аҙапланғанда, аранан бер кеше, аңғармаҫтан, уның артынан барып ҡосаҡлап ала, балта менән киҙәнергә ирек бирмәй, ҡалғандар уның балтаһын тартып ала, ҡулаяҡтарын арҡан менән ныҡлап бәйләй. Ҡоторған ирҙең ауыҙынан күбектәр сыға, ул һүгенә һәм мәғәнәһеҙ һүҙҙәр һөйләй. Ауыл муллаһын саҡырып килтерәләр, ул ауырыуға яҡын килергә ҡурҡа, алыҫтан ғына тороп, эстән генә нимәлер уҡый ҙа, был кешене ен һуҡҡанлығын, һауыҡтырыу өсөн шаҡтай алыҫта йәшәүсе көслө муллаға алып барып өшкөртөргә кәрәклеген әйтә. Ен һуҡҡан кешенең туғандары шунда уҡ ат егеп, уны арбаға бәйләп һалып, юлға сығалар. Көслө, тип даны таралған мулланың ауылына нисә көн барғандарҙыр, әммә юлда енленең бәйле аяҡ-ҡулдарын сисмәйҙәр һәм мулла йортона шул көйгә килеп инәләр. Юлсыларҙы мулла үҙе ҡаршы сығып ала, ҡул биреп күрешә, иҫәнлек-һаулыҡ һораша, ниндәй йомош менән килгәндәрен белешә. Юлсылар, үҙҙәренең арбала бәйле ятҡан туғандарына күрһәтеп, нимә өсөн килтергәндәрен һөйләп бирә. Мулла доғаларын уҡып, арбала ятҡан кешегә бер нисә тапҡыр өшкөрә лә, тыныс ҡына уны сисергә ҡуша, ҡулдары быуылып күгәргән бит, ти. Ен һуҡҡан кешенең туғандары арҡанды сисеүҙән баш тарта, уны бәйләүе ниндәй хәтәр эш икәнен һөйләп бирә. Мулла уларға ҡурҡмаҫҡа, сисергә ҡуша. Туғандарының олоһо уның аяҡ-ҡулдарын сисә. Сисеп бөткәс, ир тороп ултыра, йән-яғына ҡарана ла, ят мулланы күреп, арбанан төшөп, уның янына килә, ҡул биреп иҫәнләшә. Туғандарынан уны ни өсөн бында алып килеүҙәрен һораша, ҡулдары иҫһеҙләнеүен әйтә. Уларҙы ыуғылай. Улар күмәкләп өйгә инәләр, был көнө кис тә, иртәгәһе көн иртәнсәк тә мулла ауырыуҙы тағы өшкөрә. Тағы ла бер көндән һуң юлсылар тамам һауыҡҡан туғандары менән ауылдарына ҡайтып китә. Һуңынан был ир ысынлап та иҫке мунса мейесенән суйын зәңгәрҙәрен алыуын әйтә. Башҡа ул ундай әйберҙәргә теймәй.

**(Бөрйән районы Ырғыҙлы ауылында йәшәп, 1988 йылда вафат булған Асиғолов Тимерйәндән яҙып алынды).**

**Рауил АСИҒОЛОВ.**
**Бөрйән районы.**
**(Дауамы бар).**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

Уңышлы кешеләр һәм уңышһыҙҙар араһында интеллект, тәжрибә һәм һәләт буйынса айырма ҙур түгел. Әгәр ике кеше бер үк төрлө һәләткә эйә икән, бизмәндең уңышлы яғы дәртле һәм энергиялыһы яғына тартасаҡ. Бик йыш уңыш уртаса һәләтле кешегә йылмая, ә инде һәләтлеһе үҙенең инертлығы арҡаһында уңышһыҙлыҡ кисерә. Марк Твендан уның уңышы тураһында һорағас, ул: "Мин ҡанатлы, дәртле булып тыуғанмын", - тип яуаплай. Томас Эдисон: "Әгәр кеше балаларына энтузиазм тапшыра ала икән, үҙе үлгәндән һуң да баһалап бөткөһөҙ мираҫ ҡалдырасаҡ", - ти. Ул үҙенең эссеһында: "Кешелек тарихында теләһә ниндәй бөйөк һәм иҫтәлекле ваҡиға - кемдеңдер энтузиазмы триумфы", - тип билдәләй. Бындай кешеләрҙең тормошо уларҙың фәлсәфәһенең асыҡ сағылышы булып тора. Әгәр ыңғай нәмә көтһәгеҙ, тартыу ҡануны буйынса, магнит кеүек, уны үҙегеҙгә тартып килтерәсәкһегеҙ. Иҫегеҙҙән сығармағыҙ - һеҙҙең бөгөнгө көтөүегеҙ иртәгәнең ысынбарлығы ул.

## Серлелек принцибы

Үҙегеҙҙең пландарығыҙ һәм ниәттәрегеҙ хаҡында бер кемгә лә һөйләмәгеҙ, сөнки был хуплауға тағы бер ынтылыш. Маҡсаттарығыҙҙы асып биреп, һеҙ уға өлгәшә торған ҡиммәтле энергияғыҙҙы сарыф итәһегеҙ, шулай уҡ үҙегеҙҙе контролләргә тырышыусыларҙың ҡаршылығына дусар булаһығыҙ. Күпселек һеҙҙе уй-ниәттәрегеҙҙән баш тарттырырға теләр. Тирә-яҡтағыларға ҙур уңыш ҡаҙанған кешеләр оҡшамай, улар уртаҡул булыуҙан арынырға тырышыусыларға нисек тә булһа ҡамасауларға тырышасаҡ. Уларға бында мөмкинлек бирмәгеҙ! Бик күп еңеүселәр беренсе аҙымдарын да яһамайынса еңелеүгә дусар була, сөнки үҙҙәре хыялланған нәмә тураһында яҡындарына, туғандарына, таныштарына һөйләп, үҙҙәрен кире дүндереүгә дусар ителәләр. Хыялығыҙ кем менәндер уртаҡ булмаһа, уны үҙегеҙҙә генә тотоу хәйерлерәк.

## Һеҙ ялға лайыҡ

Үҙегеҙгә бүләк итә алған иң яҡшы ял - ул медитация. Кешелекте камиллаштырыу тураһында хәстәрлек күреүселәр төрлө ваҡытта һәм төрлө дәүерҙәрҙә бер үк фекергә килә - аҡыл, физик һәм рухи ҡеүәтте мөмкин тиклем киңерәк асыр өсөн ял, көсөргәнештән арыныу һәм үҙ-үҙең менән һөйләшеү кәрәк. Шунһыҙ беҙ һәләттәребеҙҙең әҙ генә өлөшөнә иҫәп тота алабыҙ. Ҡеүәтте асыуға ярҙам итеү буйынса күп төрлө алымдар һәм ысулдар эшләнә. Шуларҙың иң киң таралғаны - медитация. Ул бер кешенең йәки төркөмдөң асышы түгел, ниндәйҙер дини төркөм йәки конфессияға ла бәйләнмәгән. Унда бағышлау ҙа, тантана ла талап ителмәй. Хатта кемдеңдер ярҙамынан тыш, үҙ аллы өйрәнергә мөмкин.Медитацияны урап алған яһалма сер һәм йәшеренлек күптәргә уның сикһеҙ мөмкинлеген аңларға ҡамасаулай. Медитация сәнғәтенә тиҙ генә өйрәнергә мөмкин, сөнки һәр беребеҙҙә тыуғандан уҡ шундай һәләт һалынған. Бары тик төп принциптарҙы аңлап, уны үҙ аллы ла башҡарырға ғына кәрәк.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**

✓ *Артабан да юлаевсылар уйын дилбегәһен ҡулынан ысҡындырманы һәм ҡунаҡтарға тағы ла ике шайба "бүләк" итте. "Автомобилист" иһә уйын барышында үҙ иҫәбенә тик бер генә гол яҙҙы.*



*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# БАШҠОРТОСТАН ЮЛДАШ ТЕЛЕВИДЕНИЕҺЫНА - 15 ЙӘШ!




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА әҙерләне.

*ХОККЕЙ*

САЛАВАТ ЮЛАЕВ хоккейный клуб

# УҢЫШЛЫ БУЛДЫ АҘНА

**Ситтә уҙғарған уйындарҙан һуң юлаевсылар көрәштәштәрен үҙ боҙонда ҡабул итте. Силәбенең "Трактор"ы, Ханты-Мансиҙың "Югра"һы һәм Екатеринбургтың "Автомобилист" командаһы менән осрашыуҙар "Салауат Юлаев" өсөн, башлыса, уңышлы булды.**

"Трактор" менән "йәшел машина"ның уйыны хәтерҙә киҫкенлеге һәм ҡатылығы менән уйылып ҡалды. Ике команданың да тик еңеүгә булған ынтылышы уйынсыларҙың һәр хәрәкәтенән асыҡ күренеп торҙо. Шулай ҙа уңыш юлаевсыларға йылмайҙы. Уларҙың әүҙемлеге һәм ныҡышмалығы еңеү яуларға мөмкинлек бирҙе. Уйын һөҙөмтәһе 2:1.

"Югра"ға ҡаршы матчта Игорь Захаркин алдағы уйынсылар составын үҙгәртмәйенсә сығарҙы. Был юлы ла, тәү ҡарашҡа, өҫтөнлөк юлаевсылар яғында ине. Ләкин хужаларҙың боҙҙағы артыҡ ығы-зығыһы, ниндәйҙер кимәлдә йыйнаҡһыҙлығы уйынсыларҙың бербер артлы штрафсылар эскәмйәһенә эләгеүенә сәбәпсе булды. "Югра" бындай мөмкинлекте ҡулынан ысҡындырманы һәм ике осорҙа Андрей Гаврилов ҡапҡаһына 3 шайба оҙатты. Юлаевсылар иһә тик өсөнсө осорҙа ғына 2 шайба менән яуап ҡайтара алды. Матч иҫәбе 2:3.

Екатеринбург уйынсылары менән алышҡа юлаевсыларҙың тик еңеү өсөн генә сыҡҡанлығын тәүге минуттарҙа уҡ күрергә мөмкин ине. Көрәштәшенән күпкә көслөрәк икәнлеген тәүге осорҙоң хужалар файҙаһына 3:0 иҫәбе менән тамамланыуы ла асыҡ сағылдырҙы. Артабан да юлаевсылар уйын дилбегәһен ҡулынан ысҡындырманы һәм ҡунаҡтарға тағы ла ике шайба "бүләк" итте. "Автомобилист" иһә уйын барышында үҙ иҫәбенә тик бер генә гол яҙҙы. Шулай итеп, 5:1 иҫәбе менән юлаевсылар "Автомобилист"ты тар-мар итте.

**Гөлназ МАНАПОВА.**

**41-се һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Ҡәлеб. Роулинг. Шәхес. Кәмит. Уртаҡ. Ауыҙлыҡ. Байығыу. Ашлыҡ. Сынйыр. Амбал. БДИ. Тарма. Рәшә. Метр. Пеләш. Ровно. Итек. Волкано. Ергән. Шакиров. Рикотта.

**Вертикаль буйынса:** Балалары. Кейекбаев. Ғәлләмов. Рәми. Оффшор. Таусы. Ҡыуыш. Бүрек. Алкино. Хоҙайбирҙин. Тоғро. Бүгәс. ВИА. Уҡа. Тәпке. Шама. Ырым. Ҡаҡ. Аршын.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1438 һижри йыл.*

| Октябрь (Мөхәррәм) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 17 (16) дүшәмбе | 6:21 | 7:51 | 13:30 | 16:40 | 18:10 | 19:40 |
| 18 (17) шишәмбе | 6:23 | 7:53 | 13:30 | 16:38 | 18:08 | 19:38 |
| 19 (18) шаршамбы | 6:25 | 7:55 | 13:30 | 16:35 | 18:05 | 19:35 |
| 20 (19) кесе йома | 6:27 | 7:57 | 13:30 | 16:33 | 18:03 | 19:33 |
| 21 (20) йома | 6:29 | 7:59 | 13:30 | 16:31 | 18:01 | 19:31 |
| 22 (21) шәмбе | 6:31 | 8:01 | 13:30 | 16:29 | 17:59 | 19:29 |
| 23 (22) йәкшәмбе | 6:33 | 8:03 | 13:30 | 16:26 | 17:56 | 19:26 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**15 октябрь "Шәүрәкәй"** (М. Буранғолов), музыкаль комедия

**16 октябрь "Ғәфү ит мине!"** (И. Герман), мелодрама

**18 октябрь "Тыуған йылдарыбыҙ ҙа бер, яҙмыштар ҙа уртаҡ".** Мостай Кәримдең тыуған көнөнә арналған театрлаштырылған тамаша

**20 октябрь "Маҡтымһылыу, Әбләй һәм ҡара юрға"** (Т. Ғарипова), мюзикл

**21 октябрь "Мин - ҡатын-ҡыҙ"** (Т. Миннуллин), бишек йыры

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**16 октябрь "Аладдин"** (И. Казакова), әкиәт. Башлана 12.00

**16 октябрь "Ханума"** (А. Цигарели), музыкаль комедия. Башлана 18.00

**18 октябрь "Яуҙы еңгән мөхәббәт"** (М. Кәрим), лирик комедия

**19 октябрь "Беҙҙең өйҙөң йәме"** (М. Кәрим), хәтирәләр

**20 октябрь "Ҡыҙ урлау, йәки башкирская пленница"** (М. Кәрим), музыкаль комедия

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**19, 20 октябрь Премьера "Хыялдар тормошҡа ашыр ер"** (В. Аккерман), комедия

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**18 октябрь "Уйна, думбырам!"** Гүзәл Үмөрҙәлина һәм республикабыҙҙың билдәле думбырасылары һәм музыканттары.

АФАРИН!

# БӘХЕТЛЕНЕҢ БАЙРАМЫ - БЕР ЮЛЫ,

## йәки Шәһит аллеяһына яңы шыршылар өҫтәлде



**Республика Хөкүмәтендә 2016 йыл өсөн журналистика өлкәһендә Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге республика премияһы лауреаттарын бүләкләү тантанаһы уҙҙы. Комиссия конкурсҡа тәҡдим ителгән туғыҙ дәғүәсенең өсәүһен һайлап алды.**

- Шәһит Хоҙайбирҙин премияһы менән ғүмерен журналистикаға арнаған кешеләр бүләкләнә. Ул шуның менән әһәмиәтле һәм ҡиммәтле. Дәғүәселәрҙең һәр береһе лайыҡлы, әммә быйыл комиссияның фекере бер булды һәм беҙ еңеүселәрҙе һис бер ауырлыҡһыҙ билдәләнек, - тине Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары, Ш. Хоҙайбирҙин исемендәге Хөкүмәт премияһы буйынса комиссия рәйесе Салауат Сәғитов.

2016 йылғы премия лауреаттарының береһе - 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы командиры генерал-майор Миңлеғәле Шайморатов тураһында билдәһеҙ факттарҙы асҡан материалдар авторы, "Российская газета" редакцияһының Өфө филиалындағы өлкән хәбәрсеһе Гөлназ Данилова. "Хеҙмәтемде юғары баһалағандары өсөн рәхмәт, - тип һөйләне ул. - Мин атайым - танылған яҙыусы һәм журналист Булат Рафиҡовҡа бик рәхмәтлемен. Тап ул мине һәм апайымды ныҡлы характер һәм рух ныҡлығы кәрәк булған һөнәргә өйрәтте. Мәҡәләләремдең темаһы бала саҡ менән бәйле. Геройҙарыбыҙҙың ҡаһарманлыҡтарын танырға, тарихи ғәҙеллекте тергеҙергә кәрәк - бына ошо һәр саҡ төп фекер булып яңғыраны. Был ябай һүҙҙәр генә түгел, рухи бәйләнеш. Генералдың шәхесенә, тарихҡа ҡарата ҡыҙыҡһыныу бөтмәҫ, дауам итер, тип ышанам..."

"Башҡортостан" юлдаш телевидениеһы журналисы Гүзәл Хәмитова премияға "Эҙәрмән", "Позывной "Барс", "Мистик Башҡортостан" тапшырыуҙар циклы өсөн лайыҡ булды. "Беҙҙең бер генә күрһәткес - эфир, - тине ул. - Ҡаты шарттарҙа эшләп, ҡыҙыҡлы тапшырыуҙар төшөрөргә тырышабыҙ. Күптәр матур, бай республикабыҙҙа йәшәп тә ҡайҙа барырға мөмкин икәнлеген, ниндәй тәбиғәт объекттары барлығын белмәй. Бынан тыш, журналист булараҡ, проблемаларҙы ла күтәрергә тейешбеҙ. Барыбыҙ ҙа ғорурланған Бөрйән бал ҡорто, Ирәмәлдәге юғалыр сиккә еткән үҙенсәлекле алтын тамыр дарыу үләне, ирей башлаған Аҫҡын боҙ мәмерйәһе. Бындай проблемалар байтаҡ, һәм мин Башҡортостан юлдаш телеканалы коллективына уңайлы эшләү мөмкинлеге һәм яҡшы техник база өсөн сикһеҙ рәхмәтлемен..."

"Киске Өфө" гәзите хәбәрсеһе Фәүзиә Мөхәмәтшина 36 йыл ғүмерен журналистикаға арнаған. Үҙе өсөн оло оҫталыҡ мәктәбенә әүерелгән "Башҡортостан" гәзитендә байтаҡ йылдар эшләгән. Ул ошо баҫманың төрлө йылдарҙағы баш мөхәррирҙәре Абдулла Исмәғилев, Мансур Әйүпов, Тәлғәт Сәғитов, шулай уҡ өлкән быуын журналистарынан Дәүләт Мәһәҙиев, Рәүеф Насиров, Әниф Бикҡолов, Ризван Хажиев һәм башҡа ҡәләмдәштәре исемдәрен телгә алып, уларҙың оҫталыҡ мәктәбе һабаҡтары хаҡында оло ихтирам менән һөйләне. Бөгөн дә Фәүзиә Миҙхәт ҡыҙының "Киске Өфө"ләге аналитик мәҡәләләре замандың көнүҙәк мәсьәләләрен күтәрә... "Ул бер нәмәгә лә битараф түгел, - тип яҙғайны лауреат хаҡында яңыраҡ ҡына "Башҡортостан" гәзитендә баҫылған мәҡәләһендә шағирә Лариса Абдуллина. - Бигерәк тә үҙен уратып алған мөхит, көндәлек йәшәйешебеҙ мәсьәләләре тәжрибәле журналист иғтибарынан ситтә ҡалмай. Темалар "аяҡ аҫтында ғына" ята, тик унда төп проблеманы айырып алып, аналитика дәрәжәһенә күтәрә белергә генә кәрәк. Һәм Фәүзиә апай Мөхәмәтшина шулай эшләй ҙә. Ул булһынмы һаулыҡ һаҡлау, мәғариф өлкәһендә көн дә тыуып ҡына торған мәсьәләләр, йә иһә һаманға тиклем камиллаша алмаған торлаҡ-коммуналь хикмәттәре, социаль-тәьминәт, пенсияға бәйле һорауҙар..." "Ижади мөхит булдырылған "Киске Өфө" гәзитендә эшләү минең өсөн яңы мөмкинлектәр асты; гәзитебеҙ, әйтерһең дә, хеҙмәт биографияма икенсе һулыш өҫтәне ", - тип һөйләне лауреат үҙе бүләкләү тантанаһында.

11 октябрҙә иһә яңы лауреаттарҙы ҡотлау тантанаһы Шәһит Хоҙайбирҙиндың тыуған ере - Күгәрсен районында дауам итте. Бында Өфөнән килгән ҡунаҡтарҙы - БР Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары буйынса агентлыҡ етәксеһе Борис Мелкоедов, БР Журналистар союзының идара рәйесе, "Йәшлек" гәзите мөхәррире Артур Дәүләтбәков, "Киске Өфө" гәзите мөхәррире Гөлфиә Янбаеваны һәм лауреаттарҙы Хоҙайбирҙин ауылы халҡы икмәк-тоҙ, ҡымыҙ менән ҡаршы алды. Ауыл мәҙәниәт йортонда лауреаттарҙы сәләмләү тантанаһы булып үтте. Унда Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге Күгәрсен район премияһының быйылғы өс лауреаты - "Мораҙым" район гәзите хәбәрсеһе Гөлназ Сәйетбатталова, фотохәбәрсе Зыя Ғарипов, филология фәндәре кандидаты, яҙыусы Фәнзил Санъяровты, шулай уҡ Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге Хөкүмәт премияһы лауреаттарын ҡайнар тәбрикләнеләр, сәскә гөлләмәләре, иҫтәлекле бүләктәр тапшырҙылар. Журналистар Шәһит батырҙың йорт-музейын ҡараны, изге йоланы тотоп, Шәһит аллеяһына йәш шыршы ағастары ултыртты. Юғары наградаға лайыҡ булған журналистар өсөн айырыуса тулҡынландырғыс ине был көн, сөнки ул оло байрамыбыҙ - Республика көнөнә тап килде. Өҫтәүенә, бынан ике көн алда ғына күренекле дәүләт эшмәкәре, ялҡынлы публицист-журналист Шәһит Хоҙайбирҙиндың тыуыуына 120 йыл тулыуҙы киң билдәләгәйнек. Бәхетленең байрамы - бер юлы, тигән халыҡ һынамышына раҫ килде көҙҙөң һуңғы сыуаҡ был көнө. Тантана Республика көнөнә арнап һәм ҡунаҡтар өсөн әҙерләнгән ҙур байрам концерты менән тамамланды.

**Ләйлә АРАЛБАЕВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ХӨКӨМДӘН ҠУРҠМА,

## хөкөм ителеүҙән ҡурҡ

Ханды Хоҙайораһы булһа, үҙ халҡына хасланыр. Байҙы Хоҙайораһы булһа, дәүләтенә маһайыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Һәр бөйөк эш ябай, етди, һиҙелеп бармаған шарттарҙа башҡарыла. Ялтырауыҡтар, шау-шыуҙар, кәперенеүҙәр аҫтында һөрөп тә, сәсеп тә, төҙөп тә, хатта фекерләп тә булмай.

**(Лев Толстой).**

Уйламаҫтан ахмаҡ һүҙ ысҡындырыу мөмкинлегенән бәрәү ҙә һаҡланмаған, әммә уны уйлап әйтеү - бәлә.

**(М. Монтень).**

Аҡылдан шашып яратыуҙан ҡурҡ, ысын мөхәббәт асыҡ һәм тыныс була.

**(Генри Торо).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер бик бай һәм аҡыл эйәһе сауҙәгәр ауырып китә. Үҙенең тиҙҙән теге донъяға күсәсәген аңлағас, янына берҙән-бер улын саҡырып ала һәм былай ти: "Улым, миңә был донъяны ҡалдырып, баҡыйлыҡҡа күсергә ваҡыт килеп етте. Һуңғы үтенесем шул: мәйетемде кәфенгә төрә башлағас, хеҙмәтселәргә минең һул аяғыма иҫке башмағымды кейҙерергә бойороҡ бир". Ошо һүҙҙәрҙе әйтә лә, йән бирә сауҙәгәр.**

**Уны һуңғы юлға оҙатырға бик күп халыҡ йыйыла. Мәйетте мосолман йолаһы буйынса тәрбиәләп, кәфенгә төрә башлағас, улы бер хеҙмәтсеһенә иҫке башмаҡ тоттора һәм атаһының һул аяғына кейҙерергә бойора. "Был мөмкин түгел, - ти хеҙмәтсе, - беҙҙә ундай йола юҡ!" "Был бит атайымдың һуңғы үтенесе, ул теләгәнсә эшләгеҙ, зинһар..." - ти егет илай-илай. "Мосолман ҡануны буйынса мәйет бары тик кәфенгә төрөлөргә тейеш. Мин был ҡағиҙәне боҙа алмайым" , ти хеҙмәтсе. Егет кеше ни эшләргә лә белмәй, һуңғы үтенесен үтәмәйенсә, атаһының мәйетен зыяратҡа алып китеүҙәрен теләмәй ул. Шунан мәйетте мосолманса ерләү ҡанундарын ныҡлап белгән башҡа кешеләрҙе эҙләтә башлай. Ул кешеләр ҙә мәйеттең аяғына башмаҡ кейҙереүгә ҡаршы була. Шулай итеп, сауҙәгәрҙе уның һуңғы үтенесен үтәмәйенсә, әммә бар ҡағиҙәләрҙе күҙәтеп, зыяратҡа алып барып ерләйҙәр.**

**Ҡәбер эргәһендә күҙ йәше түгеп ултырған егеткә атаһының яҡын дуҫы килеп өндәшә һәм уға хат тоттора. Был хатты уға атаһы тере сағында яҙған була: "Улым, мин һиңә бар байлығымды ҡалдырам, уларҙы аҡыл менән тотон, һаранланма, юҡҡа-барға туҙҙырма ла. Мин туплаған байлыҡ һиңә тормошта дөрөҫ юл һайларға ярҙам итһен. Ҡасандыр берәй ваҡыт һин дә минең эргәмә күсерһең - кеше мәңгелек түгел. Шуны хәтереңдә тот: ерҙәге юлың тамамланғас, һин ул тормоштағы бер байлығыңды ла, хатта бер нигә ярамаған иҫке башмаҡтарыңды ла үҙең менән алып китә алмаҫһың..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**

«ПечатниК» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450059, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Комсомол урамы, 27/1).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 14 октябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4417
Заказ - 1913/10